КИТАП

БАШКОРТ ТЕЛЕ

3

З. Ғ. Нафикова, Ф. Ф. Мортазина

БАШКОРТ ТЕЛЕ

3


Телмәр
һөйләү телмәре
монолог
диалог
эске телмәр
уйлау
хыялланыу
мимика
яҙма телмәр
инша
диктант
изложение
хикәйә
шиғыр


Һөйләм
әйтелеү маҡсаты буйынса
хәбәр һөйләм
һорау һөйләм
өндәү һөйләм
һөйләм киҫәктәре буйынса
әйә
хәбәр
әйәрсән киҫәктәр
әйә менән хәбәрҙе асыҡлай
һөйләмдең нигеҙе
төп мәғәнә аңлата
йыйнаҡ һөйләм
тарҡау һөйләм


Текст
тема
кем?
нимә?
төп фекер
автор һүҙе
өлөштәре
башы
инеш
төп өлөшө
төп фекер
аҙағы
һығымта
ҡыҙыл юлдан яҙыла


Һүҙ
яһалышы буйынса
мәғәнәһе буйынса
тамыр
йәш
яһалма
йәш + лек
синоним
ҡарт – оло
антоним
аҡ – ҡара
омоним
май – май
бер мәғәнәле
ауыл
күп мәғәнәле
тура
һыу аға
күсмә
болот аға

З. Ғ. Нафиҡова, Ф. Ф. Мортазина

БАШҠОРТ ТЕЛЕ 3

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы

2-се баҫма

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.161.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Н28

Шартлы тамғалар

– парлашып йәки төркөмдә эшләү

– ҡағиҙә

– хәтереңә һал

– үҙ аллы эш

– ятлау өсөн шиғыр

– ижади эш

– күсереп яҙ

– ҡатмарлы эш

Схемалар билдәһе

– предмет атамаһы

– предмет хәрәкәте

– предмет билдәһе

– ярҙамсы һүҙ

. – һөйләм

Нафиҡова, З. Ғ., Мортазина, Ф. Ф.

Н28 Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 3-сө класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – 2-се баҫма / З. Ғ. Нафиҡова, Ф. Ф. Мортазина. – Өфө : Китап, 2017. – Һүрәттәре менән 160 бит.

ISBN 978-5-295-06800-3

УДК 373.161.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922

ТП – 2017

ISBN 978-5-295-06800-3

© Нафиҡова З. Ғ., Мортазина Ф. Ф., 2016
© Мөхтәруллин А. Р., һүрәттәр, 2016
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

I бүлек. Танышыу

1. Таныш булығыҙ!

1. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Һөйләшеүҙә нисә кеше ҡатнаша?

– Һаумы, Илшат!
– Сәләм, Әнүәр! Таныш бул, был – Әмир, был – Илгиз. Улар беҙҙең класҡа уҡырға килгәндәр.
– Бик яҡшы. Бергә уҡырбыҙ, дуҫтар булырбыҙ.
– Ярай, һау булығыҙ!
– Иртәгә осрашырбыҙ !

- Һеҙҙең класта яңы уҡыусылар бармы? Улар менән таныштығыҙмы?

2. Нимә ул телмәр? Таблицаға ҡарап һөйлә.



3. Һөйләмдәрҙе тултырып, күсереп яҙ.

1. Беҙҙең класта бөтәһе … уҡыусы. 2. Йәйге … һуң беҙ тағы мәктәптә йыйылдыҡ. 3. Бигерәк тә дуҫым … менән осрашыуға мин бик ҡыуанам.

- Телмәр төрөн билдәлә.
- Һөйләмдәрҙә баш киҫәктәрҙе табып әйт.

4. Тексты уҡы.

Иртә торғас, сәләм бирәм:
– Һаумы, ҡояш, һаумы, көн,
Һаумы, атай, әсәкәйем,
Таңғаса һағынып бөттөм.

– Һаумыһығыҙ, һеңлеләрем,
– Һаумыһығыҙ, әнеләр!
Улар ҙа мине сәләмләп:
– Һаумы, ағай, – тинеләр.

(Гүзәл Ситдиҡова)

● Кем һаулыҡ һораша?

2. Хәлдәр нисек?

1. Текстарҙы уҡы. Һөйләү телмәренең ниндәй төрҙәре ҡулланыла? Һөйләшеүҙә нисә кеше ҡатнаша?

1. – Сәләм, Гөлдәр! Хәлдәрең нисек?
– Хәлдәр насар. Математиканан «икеле» алдым.
– Әйҙә дәрестәрҙе бөгөн бергә әҙерләйек! Мин һиңә математиканан ярҙам итермен!
– Ярар, рәхмәт! Дәрестәрҙән һуң осрашырбыҙ.

2. Иртәгә беренсе сентябрь. Мин яңы костюмымды, күлдәгемде үтекләп ҡуйҙым. Туфлиҙарымды таҙарттым. Кисә баҡсанан сәскәләр алып ҡайттыҡ. Гөлләмәне яратҡан уҡытыусым Гүзәл Сабир ҡыҙына бүләк итәсәкмен.

2. Нимә ул һөйләү телмәре? Таблицаға ҡарап һөйлә.



3. Һорауҙар ярҙамында «Уҡытыусым», «Класташым» тигән темаларға монолог төҙө.

1. Исеме нисек? 2. Ул ниндәй? 3. Ни өсөн уны хөрмәтләйһең, яратаһың? 4. Уға оҡшарға теләйһеңме?

3. Рәхим итегеҙ!

1. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Дауам итегеҙ. Кем менән кем һөйләшә?

– Һаумыһығыҙ! Инергә мөмкинме?
– Мөмкин! Рәхим итегеҙ! Һеҙ кем булаһығыҙ?
– Мин – Рәис Кәримов, хәбәрсе. Һеҙҙең мәктәп тураһында мәҡәлә яҙырға килдем.
– Бик яҡшы. Һеҙҙе нимә ҡыҙыҡһындыра?
– …

2. Уҡы. Тәржемә ит. Улар ниндәй һүҙҙәр тип атала? Был һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, иптәшең менән диалог ҡороғоҙ.

һаумы, хәйерле иртә, сәләмәт булығыҙ, рәхмәт, ғәфү итегеҙ, мөмкинме, таныш бул, хәлдәрең нисек, иртәгәгә тиклем, һау булығыҙ, зинһар

3. Нимә ул яҙма телмәр? Һөйлә.

Яҙма телмәр: күнегеүҙәр, диктант, изложение, телмәр, инша, хикәйә, шиғыр, хат.

4. Һүрәтте ҡара. Белешмә өсөн һүҙҙәрҙе ҡулланып, «Белем көнө» тигән темаға инша яҙ.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: 1 сентябрь, Белем көнө, яңы уҡыу йылы, бүләк итә, байрам, ҡотлай.

4. Һиңә нисә йәш?

1. Көләмәсте уҡы. Нисә кеше һөйләшә? Диалог нисек яҙыла?

– Рөстәм, һиңә нисә йәш?
– Ун биш.
– Булмаҫ.
– Ниңә, былтыр ете ине, быйыл – һигеҙ. Ҡушып ҡара һуң.

2. Тексты уҡы. Автор ҡайһы ваҡытты иҫенә төшөрә? Һөйлә.

Күҙ алдыма һәр саҡ Иҫке Монасип урта мәктәбендә 4–6-сы кластарҙа уҡыған йылдарым килә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә һәр миҙгел һайын урманға бара торған инек. Текә ҡаяларҙы, бейек тауҙарҙы артылып, тәбиғәтте күҙәттек. Ҡышын саңғы менән сығып китә инек. Усаҡ яғып, ҡар өҫтөндә сәй ҡайнатабыҙ. Йылынып алғас, сүгәләп, күргән-кисергәндәребеҙҙе яҙып алырға ашығабыҙ.

Ул ваҡытта мәктәп радиоһы эшләй ине. Тәнәфестә бәләкәй бүлмәгә йүгерәбеҙ. Микрофонға сират. Кем йырлай, кем шиғыр һөйләй. Күптәр йырсы йә шағир булып китте һуңынан.

(Тәнзилә Дәүләтбирҙинанан)

3. Нимә ул эске телмәр? Таблицаға ҡарап яуап бир.

Эске телмәр

уйлау хыялланыу ым-ишара йөҙ мимикаһы

4. Шиғырҙы уҡы.

Шаярмайбыҙ, тынғанбыҙ:
Беҙ әкиәт тыңлайбыҙ.
…Йәл бигерәк аҡ кәзә,
Бүрегә кәрәк яза.
Нисек ярҙам итергә? –
Эстән генә уйлайбыҙ.

(Айһылыу Йәғәфәрова)

Текст оҡшанымы? Балалар нимә тураһында уйлана?

5. Һандарға ялғау ҡушып уҡы. Ниндәй һандар барлыҡҡа килде?

Өлгө: бер – беренсе.

ике, биш, ете, һигеҙ, туғыҙ, ун ете, егерме ике, ҡырҡ алты, йөҙ ҙә алты, өҫ йөҙ дүрт

5. Ҡайҙа йәшәйһең?

1. Уҡығыҙ. Был ниндәй телмәр?

– Һаумы, Азамат! Һин ҡайҙа йәшәйһең?
– Сибайҙа. Өфөгә бөгөн килдем. Ә һин ҡайҙа йәшәйһең?
– Күмертауҙа.
– Өфөлә ҡайҙа туҡтаныҡ?
– Ленин урамында, апайымда.

2. Һүҙҙәргә **ҡайҙа?** һорауын ҡуй. Ялғауҙарҙа нимәгә иғтибар иттең? Иптәшең менән диалог ҡороғоҙ.

Рәсәй, Башҡортостан, ауыл, Шишмә, ҡала, мәктәп

3. Ҡайҙа? һорауына яуап бирерлек итеп, һүҙҙәрҙе парлап яҙ.

уртала	мәктәп	Мәскәү	Ҡытайҙа
уңда	дарыухана	Өфө	пеналда
һулда	ашхана	Пекин	Рәсәйҙә
өҫтә	машина	Телеүҙәк	класта
эстә	почта	ҡәләм	Башҡортостанда
алда	китапхана	китап	партала
алыҫта	ҡала	ултырғыс	Өфөлә

4. Уҡы. Телмәрҙең төрөн билдәлә. **Ҡайҙа?** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Ялғауҙарҙың аҫтына һыҙ.

Туғызынсы май көнө бөтә халыҡ тамаша залында йыйылды. Уҡыусылар байрамса кейенгән ветерандарға ҡарап һоҡланды. Түштәрендә ялтырап торған орден-миҙалдар уларҙы тағы ла олпатыраҡ күрһәтте. Һуғыш йылдарында яңғыраған йырҙар һәр кемдең күңелендә тәрән хистәр уятты.

(Зөһрә Ҡотлогилдинанан)

6. Һин ҡайҙан?

1. Уҡы.

Иптәштәрем күп минең,
Йәшәйҙәр төрлө яҡта,
Килегеҙ, тип, байрамға,
Саҡырғайным ҡунаҡҡа.
Аҡъярҙан Гүзәл килә,
Себерҙән – Айсыуаҡтар,
Ташкенттан – Көнсыуаҡтар,
Бөрйәндән – Сәлимәләр,
Инйәрҙән – Әминәләр,
Арғаяштан – Хәҙисә,
Тағы ла әллә нисә.
Дуҫтарым күп, күп минең,
Киң, матур булғас илем.

(Кәтибә Кинйәбулатова)

- Һинең дуҫтарың ҡайҙа йәшәй? Һин улар менән нисек аралашаһың?
- **Ҡайҙан?** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табып, күсереп яҙ.
- Ниндәй орфограммаға иғтибар иттең?

2. Һүҙҙәргә **ҡайҙан?** һорауына яуап бирерлек итеп ялғау ҡушып яҙ. Ни өсөн ҡалын йәки нәҙек ялғау яҙҙың? Аңлат.

Мәләүез, Туймазы, Белорет, Дүртөйлө, Күмертау, Баймаҡ, Ишембай, Сибай, Бөрө, Нефтекама, Ағиҙел, Мәскәү, Ырымбур, Учалы, Силәбе.

- Ни өсөн был һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙылған?
- Картанан был ҡалаларҙы тап.
- Ҡалаларҙың русса яҙылышын ҡара һәм сағыштыр.

3. Һүҙбәйләнештәрҙе уҡы. Ялғау ҡуш. Руссаға тәржемә ит.

Иван Мәскәү… , Ляо Пекин… , Марта Берлин… , Омар Бейрут… , Айтуған Салауат…

- Интернеттан был ҡалалар тураһында мәғлүмәт тап.

II бүлек. Минең мәктәбем

7. Белем байрамы

1. Шиғырҙы уҡы.

Байрам бөгөн,
байрам тиеп,
Матур кейендек.
Атайым, әсәйем менән
Мәктәпкә килдек.
Ҡаршыланы, ишек асып,
Иң матур мәктәп.
Беренсе сентябрь, һиңә
Сәскәле рәхмәт!

(Факиһа Туғыҙбаева)

- Беренсе сентябрь көнө мәктәп һине нисек ҡаршыланы?
- Шиғырҙа нисә һөйләм? Һана. Улар бер-береһенә бәйлеме?

2. Таблицаға ҡарап һөйлә.



3. Тексты уҡы. Ул нимә тураһында? Тексҡа исем бир.

Бына шатлыҡлы, тантаналы Белем көнө килеп етте. Урамдар матур кейенгән, ҡулдарына сәскә тотҡан балалар менән тулған. Беҙ ҙә төркөм-төркөм булып мәктәпкә юл алдыҡ. Бына ҡыңғырау шылтыраны. Уҡыусылар тигеҙ сафтарға теҙелде. Ҡул сабып, тәү тапҡыр мәктәпкә аяҡ баҫҡан беренсе класс уҡыусыларын сәләмләнек: «Рәхим итегеҙ, кескәйҙәр, белем донъяһына!»

- Был һөйләмдәрҙе текст тип атап буламы? Иҫбатла.
- Беренсе сентябрь ниндәй байрам?

4. Мәҡәлдәрҙе уҡы. Улар нимә тураһында?

1. Белемле кеше юғалмаҫ.
2. Белемһеҙ кеше – һуҡыр кеше.
3. Китап уҡыһаң, белемең артыр, уҡымаһаң, белгәнең дә онотолор.
4. Беләге бар берҙе йығыр, белеме бар меңде йығыр.

8. Мин дежур

1. Тексты уҡы. Исем бир. Телмәр төрөн билдәлә.

Сафа бөгөн класта дежур. Ул мәктәпкә бик иртә килде. Тәүҙә тәҙрәләрҙе асып, класты елләтте. Гөлдәргә һыу һипте. Шунан һуң аҡбур менән еүеш сепрәк әҙерләне. Дәфтәрҙәр таратты. Дәрестән һуң таҡтаны таҙа итеп һөрттө. Парталарҙы тигеҙләп сыҡты. Сафаны тырышлығы өсөн Гүзәл Айрат ҡыҙы маҡтаны.

- Текста кем тураһында һүҙ бара?
- Һинең дежур булғаның бармы? Ниндәй эштәр башҡарҙың?
- Иптәшең менән диалог төҙөгөҙ.

2. Нимә ул текст? Таблицаға ҡарап һөйлә.



3. Һөйләмдәрҙең урынын дөрөҫләп уҡы. Тексҡа исем бир. Һөйләргә әҙерләнә.

Август айында төрлө төҫтәге астралар, георгиндар, гладиолустар сәскә атты.

Балалар йәй көнө йәш үҫентеләрҙе тәрбиәләнеләр: һыу һиптеләр, ҡый үләндәрен утанылар.

Яҙ көнө ҡыҙҙар мәктәп баҡсаһына сәскә орлоҡтары сәстеләр. Малайҙар гладиолус һәм георгин сәскәләре ултыртты.

Уҡыусылар матур сәскәләр үҫтерергә һөйләштеләр.

- Текстың темаһын, төп фекерен билдәлә.
- Текстың өлөштәрен тап.
- Текст буйынса һорауҙар төҙө.

4. Ҡайҙа? Ҡайҙан? һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе ике бағанаға айырып яҙ.

мәктәптә, класта, таҡтанан, баҡсала, ҡаланан, дәрестән, дәфтәрҙән, Өфөнән, Африканан, сумканан, стенала, иҙәндә, пеналда, өҫтәлдән, Аҡъярҙан, ауылда, өләсәйҙән, сәскәнән, китаптан

9. Беҙҙең класс

1. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Һеҙҙең класта нисә кеше? 2. Нисә малай, нисә ҡыҙ? 3. Башҡорт теленән кем уҡыта? 4. Дәрестә нимәләр эшләйһегеҙ? 5. Һеҙҙең класс уҡыусылары үҙ-ара татыумы?

- Һөйләмдәрҙе бер-береһе менән бәйләп, хикәйә төҙө. Класс алдында һөйлә.

2. Тексты уҡы. Исем бир. Төп фекерен билдәлә. Планын төҙө һәм һөйләргә әҙерлән.

Ниғмәт насар уҡыусы түгел. Тик бына көндәлектә генә «өслө»ләр теҙелгән. Класташы Зөһрә уға бер ҙә тынғы бирмәй. «Һин һәләтле малай, тик ялҡауланаһың», – тип уны тәнҡитләне.

Уның «ялҡауланаһың» тигән һүҙе Ниғмәттең намыҫына тейҙе. Шуға күрә мәктәптән ҡайтыу менән дәресенә ултырҙы. Ләкин дәресте әҙерләп бөтөрөргә түҙемлеге етмәне. Футбол уйнарға сығып китте.

Иртәгәһенә Зөһрә Ниғмәтте, математиканан теманы аңламаным тип, дәрес әҙерләргә саҡырҙы. Был – Зөһрәнең хәйләһе ине. Шулай итеп, улар көн дә дәресте бергә әҙерләй башланылар.

Ниғмәттең көндәлегендә бер-бер артлы «дүртле» һәм «бишле» билдәләре күренә башланы.

Зөһрәнең шатлығы күкрәгенә һыймай ине.

(Зөфәр Хисмәтуллиндан)

- Ысын дуҫ ниндәй була?
- Дуҫтарыңа нисек ярҙам итәһең?

3. Ҡағыҙҙа уҡы. Рус теленә тәржемә ит.

Һөйләм бер йәки үҙ-ара бәйле бер нисә һүҙҙән тора. Ул тамамланған уйҙы белдерә.

4. Ребусты дөрөҫ сисһәң, халыҡ мәҡәлен уҡырһың.

1 Ҙ ’ ” Ә = Е ТӘ – КЗ

10. Мәктәбем

1. Тексты уҡы.

Мин Өфө ҡалаһында уҡыйым. Беҙҙең мәктәп дүрт ҡатлы, ҙур һәм яҡты. Мәктәптең беренсе ҡатында сисенеү урыны, табип һәм психолог бүлмәһе, китапхана, ашхана, хеҙмәт һәм ритмика кабинеттары урынлашҡан. Икенсе ҡатта директор, директор урынбаҫарҙары, уҡытыусылар кабинеттары, ике спорт залы, информатика кабинеттары бар. Тамаша залы өсөнсө ҡатта. Икенсе, өсөнсө һәм дүртенсе ҡатта кластар урынлашҡан. Беҙҙең класс икенсе ҡатта. Беҙҙе Гүзәл Айрат ҡыҙы уҡыта.

Мин бигерәк тә башҡорт теле һәм математика фәндәрен яратам. Мәктәптә уҡыуы миңә ныҡ оҡшай.

- Уҡыусы ҡайһы мәктәптә уҡый? Мәктәптә нимәләр бар?
- Уҡыусы мәктәбен яратамы? Уға ниндәй фәндәр оҡшай?
- Һинең мәктәбең ниндәй?

Һөйләмдә нимәлер тураһында хәбәр ителә, һорау бирелә, кешенең эске кисерештәре сағыла. Һөйләм аҙағында нөктә, һорау, өндәү билдәләре ҡуйыла.

2. Беренсе һөйләмде – хәбәр, икенсеһен – һорау, өсөнсөһөн өндәү һөйләм итеп яҙығыҙ һәм уҡығыҙ.

1. Бөгөн мәктәптә ярыш булды
   Бөгөн мәктәптә ярыш булдымы
   Бөгөн мәктәптә ҙур ярыш булды
2. Ярышта Булат еңде
   Ярышта Булат еңдеме
   Ярышта Булат еңде

3. Ниндәй һүҙҙәр йәшенгән? Тап. Был һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөп яҙ.



11. Аҙнала нисә көн?

1. Тексты уҡы. Аҙна көндәрен күсереп яҙ. Уларға состав буйынса анализ яһа. Улар менән һөйләм төҙө.

Аҙна көндәрен башҡортса дүшәмбе, шишәмбе, шаршамбы, кесаҙна, йома, шәмбе, йәкшәмбе тип атайҙар. Башҡорт теленә улар фарсы теленән ингән. Был һүҙҙәр нимә аңлата һуң? Бына уларҙың мәғәнәләре: йәк-, дү-, ши-, шар- ҡушымталары – бер, ике, өс, дүрт һандарын, ә «шәмбе» «көн» тигәнде аңлата икән. Фарсылар шул һандарға «шәмбе» һүҙен ҡушып, аҙна көндәренең исемдәрен яһаған. Шулай итеп, йәкшәмбе – беренсе көн, дүшәмбе – икенсе көн, шишәмбе – өсөнсө көн, шаршамбы – дүртенсе көн. «Кесаҙна» һүҙенә фарсылар дини мәғәнә һалған. Уны кесе йома тип тә әйтәләр. Ул намаҙға йыйылыу көнө тигәнде аңлата. «Йома» һүҙе «аҙна» мәғәнәһен бирә. «Аҙна» һүҙе фарсы телендә етене белдерә.

(«Башҡортостан календары»нан)

● Бер айҙа нисә аҙна, нисә көн?

Эйә менән хәбәр – һөйләмдең **баш киҫәктәре** (һөйләмдең нигеҙе). Улар һөйләмдең төп мәғәнәһен белдерә.

2. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен тап. Был һөйләмдәр текст төҙөймө?

Байрас бөгөн мәктәпкә бара. Йәкшәмбе көнө беҙ киноға барҙыҡ. Өләсәйем йома сәйенә ҡоймаҡ бешерҙе. Шаршамбы көнө апайым Мәскәүҙән ҡайтты. Шишәмбе беҙ театрға барҙыҡ.

3. Башватҡысты сис.

Аҙна көндәренең исемдәрен әйтмәйенсә биш көндө атап буламы?

12. Мәктәп хәтирәләре

1. Тексты уҡы.

Мин уҡырға барғанда «1 сентябрь» тигән төшөнсә булманы. Сөнки уҡыуҙар, ҡасан эш бөтә, шул саҡта башлана торғайны.

Мәсет эргәһендәге мәҙрәсәгә Оло инәйем етәкләп көҙ (әле ялан тәпәй) алып барҙы. Унда төрлө йәштәге балалар йыйылғайны: минең кеүек һигеҙ йәшлектәр ҙә, инде ун икегә аяҡ баҫҡандар ҙа. Бер-беребеҙҙе беләбеҙ, шуға тәүге көндәрҙән үк дуҫ йәшәнек. Араларында шаян балалар ҙа бар, әммә улар яуыз булманы, этлек ҡылмай торғайнылар. Мәхмүт Ғәлләмов һәйбәт уҡытыусы булды. Ул үҙебеҙгә ышаныс уятты, кешеләргә ихтирам тәрбиәләне.

(Мостай Кәримдән)

- Мәҙрәсәгә малайҙы кем алып барған? Ни өсөн төрлө йәштәге балалар бергә уҡыған?
- Кем ул Мостай Кәрим?
- Беренсе абзацты күсереп яҙ, эйә менән хәбәрҙең аҫтына һыҙ. Тағы ла ниндәй һөйләм киҫәктәре бар, бергәләп асыҡлағыҙ.

2. Таблицаға ҡарап, һорауҙарға яуап бир.

Һөйләм нимәне аңлата? Ул ниндәй киҫәктәрҙән тора? Рус телендә улар нисек атала? Һөйлә.

3. Һөйләмдәрҙе аҙна көндәре менән тулыландырып уҡы. Һуңынан дәфтәреңә яҙ.

1. Рәсем дәресе … көн була. 2. Хеҙмәт дәресе … көн була. 3. … көн мин киноға барам. 4. … көн ял итәм. 5. Футбол түңәрәгенә … көн барам. 6. Мин … көндө яратам.

13. Башҡорт теле дәресендә

1. Уҡы. Текст төрөн билдәлә. Һорауҙарға яуап бир.

Мин башҡорт теле дәресен яратам. Ул аҙнаһына ике тапҡыр: дүшәмбе һәм шаршамбы көндәре була. Дәрес ваҡытында беҙ бер-беребеҙ менән диалог ҡорабыҙ, һорауҙарға яуап бирәбеҙ, һүҙҙәрҙе тәржемә итәбеҙ, интернеттан төрлө өҫтәлмә материалдар эҙләйбеҙ. Шиғырҙарҙы тасуири уҡырға, яттан һөйләргә өйрәнәбеҙ. Әҙәби әҫәрҙәр уҡыйбыҙ. Төрлө күнегеүҙәр эшләйбеҙ. Бигерәк тә проект эштәре башҡарырға яратабыҙ, сөнки унда һәр кем зирәклеген, отҡорлоғон күрһәтә ала.

- Башҡорт телен өйрәнеү оҡшаймы?
- Дәрестә ниндәй эштәр башҡарырға яратаһың?
- Һөйләмдәрҙән әйә менән хәбәрҙе табып яҙ. Аҫтына һыҙ. Был һөйләмдәр нисек атала? Ҡағиҙәне уҡып, яуап бир.

Баш киҫәктәрҙән генә торған һөйләм **йыйнаҡ һөйләм** тип атала. Эйәрсән киҫәктәре булған һөйләм **тарҡау һөйләм** була.

2. Йыйнаҡ һөйләмдәрҙе эйәрсән киҫәктәр менән тулыландырып уҡы.

1. Ғәлиә Булат ҡыҙы уҡыта. 2. Төҙөүселәр төҙөнөләр. 3. Китапханасы бирҙе. 4. Тәнәфес тамамланды.

? **3.** Тарҡау һөйләмдәрҙән йыйнаҡ һөйләмдәр төҙө.

Мин Айсыуаҡ менән бер класта уҡыйым. Ул спорт менән шөғөлләнә. Дуҫым футбол уйнарға ярата. Ул яҡшы уҡый. Айсыуаҡ миңә математика һәм рус теленән өй эштәрен эшләргә ярҙам итә. Айсыуаҡ – ысын дуҫ.

- Һин ниндәй телмәр ҡулландың? Иҫеңә төшөр.

? **4.** Математик ғәмәлдәрҙе башҡар һәм һүҙҙәрҙе уҡы.

ҮЛ + САР + РА + ӘМ + ЛКИ – КИЛ =
РО + ЛИН – ОР + Е + ЙО + КЛА – ОЛ =
ТА + ҠУР + ПИК – ПРУ – КИ + ТА =
ЮСА + МИ + ҪЫЛ – АСЫ – ЮЛ + АЛ =

14. Хәйләкәр һандар

1. Шиғырҙы уҡы.

Ҡушам, алам, алам, ҡушам,
Ҡабатлайым, бүләмен.
Һандар улар хәйләкәрҙәр,
Холоҡтарын беләмен.
Иғтибарһыҙ торһаң әгәр,
Хәҙер алдап ҡасалар.

(Факиһа Туғыҙбаева)

- Уҡыусы ниндәй фәндән дәрес әҙерләй?
- Ни өсөн һандар хәйләкәр? Ниңә улар алдап ҡасалар?
- Текстан тиң киҫәктәрҙе тап. Улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә? Һорау ҡуй.

2. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Ул нимә тураһында?

– Линейка, юйғыс, ҡәләм, шаҡмаҡ дәфтәр ниндәй дәрес өсөн кәрәк?
– Математика дәресе өсөн.
– Һин ул дәрестә яратаһыңмы?
– Әлбиттә. Мин ул фәндән гел «бишле»ләр генә алам.
– Әйт әле, ете һигеҙең нисә була?
– Илле ете.

- Малайҙың яуабы дөрөҫмө? Математика дәресендә тағы ни эшләйҙәр? Белешмәләге һүҙҙәрҙе ҡулланып, диалог ҡороғоҙ.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: ҡушам, алам, бүләм, ҡабатлайым, һыҙам, мәсьәлә сисәм, уйлайым, һанайым, яҙам, юям, үлсәйем, сағыштырам.

Һөйләмдә баш киҫәктәр ҙә, эйәрсән киҫәктәр ҙә тиң була ала. Яҙыуҙа улар өтөр менән айырыла.

3. Һөйләмдәргә тиң киҫәктәр өҫтәп яҙ. Улар һөйләмдең ниндәй киҫәктәре булып килә?

1. Математика дәресенә …, …, …, … кәрәк. 2. Дүшәмбе көн мин …, …, …, … . 3. Физкультура дәресе …, …, … көндәре була. 4. Атайым магазиндан миңә …, …, …, … һатып алған.

15. Китап – беҙҙең дуҫ

1. Тексты уҡы. Исем бир.

Беҙҙең класс уҡыусылары китап уҡырға ярата. Әҙәби уҡыу дәрестәрендә беҙ башҡорт һәм рус яҙыусыларының балалар өсөн яҙған әҫәрҙәре менән таныша-быҙ. Беҙгә Мостай Кәримдең, Фәрит Иҫәнғоловтың, Самуил Маршактың, Константин Ушинскийҙың, Лев Толстойҙың әҫәрҙәре оҡшай. Уларҙы тасуири уҡыйбыҙ, бер-беребеҙгә текстың эстәлеге буйынса һорауҙар бирә-беҙ, шиғырҙарҙы яттан һөйләйбеҙ. Әҙәби әҫәрҙәр беҙҙе изгелеккә, ихтирамлы, кеселекле, ярҙамсыл булырға өйрәтә.

- Ниндәй рус яҙыусыларын, шағирҙарын беләһең? Һанап сыҡ, әҫәрҙәрен әйт. Башҡорт яҙыусыларынан кемдәрҙе беләһең?
- Интернетты ҡулланып, яратҡан яҙыусың тураһында мәғлүмәт әҙерлә.
- Тиң киҫәктәрҙе табып уҡы. Улар һөйләмдә ниндәй киҫәк булып килә?
- Китап беҙҙе нимәгә өйрәтә?

2. Таблицаға ҡарап һөйлә, үтелгәнде иҫеңә төшөр.

кешеләрҙе әйберҙәрҙе хайуандарҙы үҫемлектәрҙе

Һүҙҙәр аңлата

хәрәкәтте тойғоно билдәне һандарҙы

3. Уҡы. Шиғырҙағы һүҙҙәр нимә аңлата?

Бар татлы һүҙ – кәнфит,
Бар шаян һүҙ – кәмит,
Бар әсе һүҙ – лимон,
Тәҙрәле һүҙ – вагон.

Бар еүеш һүҙ – ямғыр,
Бар яғымлы һүҙ – ҡояш.
Бар ныҡыш һүҙ – маҡсат,
Уҡыһаң китап ҡат-ҡат.

(Михаил Пляцковский буйынса)

16. Кем физкультура ярата?

1. Тексты уҡы.

Мин физкультура дәресен яратам. Ул аҙнаһына өс тапҡыр була: шишәмбе, шаршамбы һәм йома. Дәрестә беҙ физик күнекмәләр яһайбыҙ, йүгерәбеҙ, оҙонлоҡҡа һәм бейеклеккә һикерәбеҙ, төрлө уйындар уйнайбыҙ. Ҡыш көнө саңғыла, коньки иҙа шыуабыҙ.

Төштән һуң мин волейбол түңәрәгенә йөрөйөм. Волейболдан төрлө ярыштарҙа ҡатнашып, беҙҙең мәктәп уҡыусылары һәр саҡ призлы урындар яулайҙар.

- Һеҙҙең мәктәптә ниндәй спорт түңәрәктәре эшләй?
- Спорт менән шөғөлләнеү уҡыуҙа ярҙам итәме?
- Текстан тиң киҫәктәрҙе табып, күсереп яҙ. **Түңәрәк** һүҙе ниндәй мәғәнәләр аңлата? Аңлатмалы һүҙлектән ҡара.

Бер генә мәғәнәне аңлатҡан һүҙҙәр **бер мәғәнәле һүҙҙәр** тип атала: ҡайын, бәпембә. Бер нисә мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәр **күп мәғәнәле һүҙҙәр** була: йөҙ, баш.

2. Бирелгән һүҙҙәр араһынан тәүҙә бер, һуңынан күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе тап. Ике һөйләм төҙөп яҙ.

мәктәп, мәсьәлә, пальто, юйғыс, еләк, портфель, дауахана, сентябрь, башлыҡ, ултырғыс, карта, һыйыр, май, барабан, баҫма, картуф, ҡала, ауыл, завод, тел, алма, ҡарбуз, атай, байрам, сәскә, тартма

17. Ҡайсы йырлай

1. Шиғырҙы уҡы.

Беҙ киҫәбеҙ түңәрәк,
Өсмөйөштәр ҙә кәрәк.
Остарын матурлайбыҙ,
Урталарын һырлайбыҙ.
Етеҙ ҡайсы ялтырап,
Үҙ йырын йырлап киҫә,
Ҡағыҙ күгәрсен елпенеп,
Ҡулдарҙан осоп китә.



(Айһылыу Йәғәфәрова)

Айһылыу Йәғәфәрова – яҙыусы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ мәғарифы һәм мәҙәниәт хеҙмәткәре. Балалар өсөн «Муйынса», «Сәнскеле күлдәк», «Һайыҫкан – почтальон», «Алтын тараҡ», «Ҡурай», «Һандуғас моңо», «Тирмәкәй» китаптарын яҙған.

2. Тексты уҡы. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, күсереп яҙ. Орфограммаларҙы табып аңлат.

Өфөлә уҡыусылар төшөргән һүрәттәрҙән башҡарған ҡул эштәренән күргәҙмә үткәрелде тимур исемле малай дуҫлыҡ монументын төшөргән иҫәнғолдан зифа селтәрле шәл бәйләгән дүртөйлө ҡалаһынан мансур менән илдар үҙ йөрөшлө робот алып килгәндәр

3. Таблицаны уҡып өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Күп мәғәнәле һүҙ

тура мәғәнәле	күсмә мәғәнәле
предметтың үҙенә төбәлә	тура мәғәнәне бүтән предметҡа күсерә
карап йөҙә	болоттар йөҙә

4. Хеҙмәт дәресендә кәрәкле ҡорамалдарҙы һайлап яҙ. Күсмә мәғәнәле һүҙҙәр бармы?

ҡайсы, ултырғыс, ҡағыҙ, ҡатырға, елем, таҡта, ҡәләм, еп, энә, карауат, шөрөп, пластилин, алъяпҡыс, төҫлө ҡәләмдәр, сөй, гайка, мулине ебе, төймә, сүкеш, сынаяҡ, бумала, туҡыма, тимер сым, конструктор

18. Рәсем төшөрәбеҙ

1. Тексты уҡы.

Айрат һүрәт төшөрөргә ярата. Әсәһе уға төҫлө ҡәләмдәр, атаһы буяу, дәфтәр, альбомдар алып ҡайтҡан. Айрат һүрәтте аныһат ҡына эшләй. Ул һүрәт төшөрә башлаһа, өй эсе мылтыҡ, пушка атҡан тауыштарға күмелә, самолёт геүләүе, трактор тырылдауы, ат кешнәүе – барыһы ла ишетелеп тора.

Бына әле лә ул тырышып рәсем төшөрә. Бүре килә шикелле – бик яман олой. Ҡуян сығып ҡасты: аяҡтары ергә теймәй сабып үтте. Һунарсы ла барҙыр: мылтыҡ тауышы һәм бүрегә үсәү ишетелә. Айрат әсәһенә:

– Әсәй, һүрәтемде ҡара әле. Бына ҡуян бүренән ҡасып бара. Һунарсы, ҡуянды ҡотҡарам тип, бүрене атырға тора.

– Ә бүре ҡайҙа һуң? – тип һорай әсәһе. Малай аптырап әсәһенә ҡараны:

– Ана һалам өйөмө. Бүре шул һалам аҫтында ҡасып ята ла инде.

(Гөлфиә Юнысова)

- Текст оҡшанымы? Малай киләсәктә рәссам булырмы икән?
- Тексҡа исем бир. Планын төҙөп, һөйләргә әҙерлән.
- Синонимдарҙы табып, күсереп яҙ.

2. Рәсем төшөрөүҙе аңлатҡан һүҙҙәрҙе һайлап, тиң киҫәкле һөйләмдәр төҙө.

буяйым, атлайым, һыҙам, ашайым, һайлайым, штрихлайым, ҡарайым, сағыштырам, эшләйем, торам, һүрәтен төшөрәм, йоҡлайым, уйнайым, тәржемә итәм, йүгерәм, алам, бирәм, эсәм, йәшәйем, буяп ҡарайым, уйлайым

Мәғәнәләре бер, әйтелеше һәм яҙылышы төрлө булған һүҙҙәр **синоним һүҙҙәр** тип атала: матур, һылыу, сибәр.

3. Уҡы. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен табып әйт. Мәғәнәләре буйынса яҡын һүҙҙәр осранымы?

Рәсем дәресе булһа,
Рәсим һәр саҡ шатлана.
Әйтерһең дә, күптән көткән
Күк толпарға атлана.
Аҡ ҡағыҙ битенә төшә
Өй алдындағы сирень.
Ботағындағы ҡошсоғо
Талпынып һөйләй серен.

(Айһылыу Йәғәфәрова)

- Һин һүрәт төшөрөргә яратаһыңмы?

19. Музыка донъяһында

1. Тексты уҡы.

Әминбәк ишекте асып ебәргән. Өй эсендә бер ҡарт дейеү аңҡы-тиңке килеп сайҡалып ултыра икән. Әминбәк өйгә ингән. Дейеү бер һүҙ ҙә өндәшмәгән. Шул ваҡыт Әминбәк стенала элеүле торған скрипканы күреп ҡалған. Ымлап, дейеүҙән уйнарға рөхсәт һораған. Дейеү, ымлап, рөхсәт биргән. Әминбәк скрипкала яңғыратып уйнап ебәргән. Шулай ул уйнаған да уйнаған. Ә ҡарт дейеү, был уйнаған һайын, йәнләнә бара икән. Тора-бара сайҡалыуҙан туҡтаған, аҙаҡ бөтөнләйгә йүнгә ингән. Шунан ул егеттең кем булыуын, ни

эшләп бында килеп төшөүен һорашҡан. Егет йәшермәй барыһы тураһында һөйләп биргән. Ҡырҡ силәк алтын сығарыуын да әйткән. Дейеү бик ҡайғырған.

– Һин мине бөлдөргәнһең. Шулай ҙа мин һине ғәфү итәм. Улым үлгәс, ҡайғынан үҙем үлеп бара инем. Һин скрипкала уйнап, миңә йән индерҙең. Нимә теләйһең – шуны үтәйем, – тигән.

Әминбәк бик шатланған, үҙен яҡтыға сығарып, каруанға алып барып еткереүҙе һораған.

(«Әминбәк» әкиәтенән)

- Әминбәк дейеүгә нисек ярҙам иткән? Музыка ысынлап көс бирәме? «Йән индерҙең» тигәнде нисек аңлайһың? Һеҙ музыка дәресендә ни эшләйһегеҙ?
- Текстан ҡапма-ҡаршы мәғәнә аңлатҡан һүҙҙәрҙе табып уҡы.

Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр **антонимдар** була: ҙур – бәләкәй, аҡ – ҡара.

2. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе табып, парлап яҙ. Өс һөйләм төҙө.

ҙур, аҡ, оҙон, кис, бирә, бармай, төн, ҡыш, яҙ, бәләкәй, ҡара, ҡыҫҡа, көҙ, йәй, көн, бара, иртә, ала

? **3.** Башватҡыстан музыка ҡоралдары атамаларын тап.

у	д	н	б	ҡ	а	й	т	у	в
м	п	и	а	у	р	а	т	й	е
б	а	я	н	м	ы	к	п	и	л
ы	р	у	и	н	ҙ	с	к	р	ф
н	а	б	х	о	с	т	о	г	а

20. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Тексты уҡы.

Мәктәптән ҡайтҡас, математиканан өйгә эште эшләргә ултырҙым. Мәсьәләне бер ҡат уҡыным. Икенсегә яйлап ҡына ҡарап сыҡтым. Һис тә төшөнөп булмай бит. Төрлөсә сисеп ҡараным, китап артындағы яуап сыҡмай ҙа ҡуя. Башым ҡайнап, уҡыу китабына тотондом.

Рус теленән бирелгән күнегеүҙе «һә» тигәнсе эшләп бөттөм. Шунан баяғы математиканы ҡабат астым. Эй маташтым, эй маташтым. Яуапты сығарҙым. Булды былай булғас, иртәгә ҡолаҡ ҡыҙармаҫ.

(Ноғман Мусиндан)

- Хикәйә кем исеменән һөйләнелә?
- Телмәр төрөн билдәлә. Текстың өлөштәрен: башын, төп өлөшөн, аҙағын тап. Текстың темаһын, төп фекерен әйт.



Ноғман Мусин – Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев премияһы лауреаты. Әҫәрҙәренең төп темаһы — урман, уны һаҡлау. Балаларға бағышлап «Беҙ ауылдаш малайҙар», «Аҡ юл һиңә», «Зәңгәр тауҙа аҡ болан», «Еҙ ҡыңғырау» китаптарын яҙған.

? **2.** Йыйнаҡ һөйләмдәрҙе тулыландырып яҙ.

Әминбәк уйнаған. Хөсәйен Әхмәтов тыуған. Артур уҡый. Мостай Кәрим – яҙыусы. Ҡайын шаулай. Ҡоштар китә. Балалар бара. Ҡояш йылыта.

3. Белешмәнән һүҙҙәр ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Билдәләнгән һүҙҙәргә антонимдар яҙ.

Аҙнала бөтәһе … **көн**. Беҙ … ял итәбеҙ. Ул көндә беҙ … ҡарайбыҙ, … уҡыйбыҙ, … барабыҙ. **Йәй** көнө … **ял итергә** яратабыҙ.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: ете, йәкшәмбе, китап, паркка, телевизор, баҡсала.

4. Уҡы. Хәтереңдә ҡалдыр.

Шиғыр, әкиәт, хикәйә, повесть, роман… Уларҙың барыһын да текст тип атап була. Мәҡәл, әйтем, йомаҡ та текст була ала. Сөнки ҙур текслы шиғыр, әкиәт, хикәйәнең мәғәнәһен мәҡәл, әйтем менән ҡыҫҡа ғына итеп аңлатып була.

5. Таныш булығыҙ! Нихәл? Рәхим итегеҙ! һүҙҙәрен ҡулланып диалог ҡороғоҙ.

III бүлек. Минең республикам

21. Башҡортостаным – илем

1. Тексты уҡы.

Башҡортостан Республикаһы Көньяҡ Урал тауҙары итәгендә урынлашҡан. Уның майҙаны 143 мең 600 квадрат километр тәшкил итә. Башҡортостанда 21 ҡала, 54 район бар. Баш ҡалаһы – Өфө. Ҙур ҡалаларҙан Стәрлетамаҡ, Салауат, Нефтекама һәм Октябрьский һанала.

Башҡортостан – күп милләтле республика. Халыҡ һаны 4 миллиондан ашыу. Улар араһында башҡорттар,

рустар, татарҙар, сыуаштар, удмурттар һәм башҡа халыҡ вәкилдәре бар.

(«Аманат» журналынан)

- Башҡортостан ҡайҙа урынлашҡан? Майҙаны күпме? Ҙур ҡалаларын һанап сыҡ?
- Текстан тиң киҫәктәрҙе табып уҡы. **Ҡала** һүҙе ниндәй мәғәнәләрҙе аңлата? Һүҙлектән табып әйт.

2. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ, дауам итегеҙ. Ошоға оҡшатып үҙегеҙ диалог төҙөгөҙ.

– Хәйерле көн! Мин – Әсмә Әхмәтова, Өфөнән.
– Мин – Артур Аҡъюлов, Белореттан.
– …

Белешмә өсөн һүҙҙәр: Учалы, Баймаҡ, Сибай, Силәбе, Мәскәү, Польша.

Мәғәнәләре төрлө, әйтелеше һәм яҙылышы бер иш булған һүҙҙәр **омоним һүҙҙәр** тип атала: алма – алма.

3. Омонимдарҙы тап, мәғәнәләрен аңлат.

«Йөҙ» тип тә әйтәләр миңә,
Булам кешелә, башта.
Буламын дәфтәр, журналда,
Хатта һәр бер китапта.

Мин – яҙ айы, табып ҡара,
Хәҙер мин аш, ҡабып ҡара.



Өҫтәлдә ике алма,
Бер(е)нен ал, бер(е)нен алма.

(«Уйнат, уйлат баланы» китабынан)

22. Башҡортостан – бай яҡ

1. Тексты уҡы.

Башҡортостан тәбиғәте бик бай. Уның иң ҙур байлыҡтарының береһе – урман. Урмандарҙа ҡайын, уҫаҡ, йүкә, ҡарағай, имән, саған ағастары үҫә. Үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһы ла күп төрлө.

Башҡортостанда ҡаҙылма байлыҡтар бик күп. Нефть, газ, баҡыр, тимер, хатта алтын бар беҙҙә.

Башҡортостан – минең тыуған илем. Мин уның менән ғорурланам.

- Тиң киҫәктәрҙе табып уҡы. Улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?
- **Бай, байлыҡтарының, байлыҡтар** һүҙҙәрен составы буйынса тикшер.

2. Тиң киҫәктәрҙең аҫтына һыҙ, һорау ҡуй.

Сәскәләрҙең алдары,
Алмалары, сейәһе,
Еләктәре, баландары,
Ҡуҙғалаҡлы яланы,
Күп балыҡлы йылғаһы,
Бейек-бейек тауҙары,
Бөҙрә сәсле талдары –
Барыһы Тыуған еремдә,
Башҡортостан илемдә.

(Кәтибә Кинйәбулатова)

- **Ҡуҙғалаҡлы, балыҡлы, еләктәре, илемдә** һүҙҙәрен составы буйынса тикшер. Уларға ниндәй ялғауҙар ҡушылған?

Бер тамырҙан яһалған, бер лексик мәғәнә аңлатҡан һүҙҙәр **тамырҙаш һүҙҙәр** була: күҙ – күҙлек, күҙле.

3. Ялғауҙар ҡушып, һүҙҙәр яһа.

тал (-лыҡ, -лы); йәй (-ләү, -ен); ауыл (-даш, -са); ҡолаҡ (-сын, -лы, -һыҙ); балыҡ (-лы, -сы)

23. Гүзәл баш ҡалам

1. Уҡы.

Радионан һәр көн иртән
Сәләмләй беҙҙе Өфө.
Өфө – тыуған баш ҡалабыҙ,
Тыуған йортобоҙ төҫлө.

Телевизорҙан ҡарайбыҙ,
Өфөбөҙ шундай матур,
Тау башында суйын һәйкәл,
Ул бит – Салауат батыр!

Дуҫлыҡ монументы бейек –
Ҡарап торҙоҡ яҡындан,
Һөйләй беҙгә башҡорт, рустың
Ҙур дуҫлығы хаҡында.

(Факиһа Туғыҙбаева)

- Салауат Юлаев кем булған? Уның тураһында нимәләр беләһең?
- Дуҫлыҡ монументын күргәнең бармы? Ул ниндәй ваҡиғаға бағышлап ҡуйылған?
- **Сәләмләй, дуҫлыҡ** һүҙҙәренең тамырын һәм ялғауын билдәлә. Ниндәй ялғауҙар ҡушылған?

Яһаусы ялғау ҡушып яһалған һүҙ **яһалма һүҙ** була: йәш – йәшлек.

2. Һүҙҙәрҙең тамырын һәм ялғауын тап.

1. Йәм, йәмле, йәмлелек. 2. Бел, белем, белемле. 3. Йүкә, йүкәле, йүкәлек.

3. Яһалма һүҙҙең тамырын айырып яҙ.

ҡайынлы, елкәй, шәкәрле, алмаҡай, сәйнүк, күлдәклек, яғалыҡ, ҡышын, ҙурлау, ололау, баҡсасы, тимерсе, берлек, еләклек, дуҫлыҡ

24. Өфөлә экскурсияла

1. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

– Һаумы, Ләйсән!
– Сәләм, Гөлнара!
– Беҙ иртәгә Өфөгә экскурсияға барабыҙ. Әйҙә һин дә беҙҙең менән!
– Ярай, атай-әсәйем рөхсәт бирһә, барам.
– Улайһа, кисен миңә шылтырат. Мин Рәмзиә Сабит ҡыҙына әйтермен.
– Һөйләштек.

Һүҙ – ижектәрҙән, ижек өндәрҙән тора. Һуҙынҡы өн ижек яһай. Һүҙҙә нисә һуҙынҡы өн, шунса ижек.

2. Өфөнөң иҫтәлекле урындары тураһында һөйлә.

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры

Дуҫлыҡ монументы

Еңеү паркы

«Аҡбуҙат» ипподромы

3. Һүҙҙәрҙә ижек, хәреф, өн һанын билдәлә.

Аҡбуҙат, монумент, еңеү, Өфө, ваҡыт, Ағиҙел

4. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп уҡы.

ипподром, малай, тар, һәйкәл, һеңле, ярыш, көҙ, тәрилкә, башлыҡ, һарымһаҡ, Ағиҙел, йәшелсә, һәйбәт, ун, өсөнсө

25. Дуҫлыҡ монументы

1. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен билдәлә. Тамырҙаш һүҙҙәр бармы?

Баш ҡалабыҙ Өфөгә ингәс тә, беҙҙе Дуҫлыҡ монументы ҡаршы ала. Был һәйкәл оло тарих тураһында һөйләй. Уға нигеҙ 1957 йылда һалына. Һәйкәлдә лавр тажы тотҡан башҡорт һәм рус ҡатындары, ҡоластарын йәйеп, башҡорт һәм рус халҡының берләшеүен, дуҫлығын данлай.

2. Тейешле ялғауҙарҙы ҡуй. Һүҙҙәргә баҫым ҡуйып сыҡ.

Беҙ баш ҡалабыҙ Өфө…(ҡайҙа?) кил…(ни эшләнек?). Ул Ағиҙел буйын…(ҡайҙа?), бейек тау башын…(ҡайҙа?) урынлашҡан. Йылға…(ҡайҙа?) аҡ теплоходтар тирбәлә. Яр башын …(ҡайҙа?) ике һәйкәл күренә. Береһе – Салауат Юлаев…(кемгә?), икенсеһе башҡорт менән рус халыҡтары дуҫлығы хөрмәтенә ҡуйылған.

(Йыһат Солтановтан)

Ижек баҫымлы һәм баҫымһыҙ була. Төп башҡорт һүҙҙәрендә баҫым күбеһенсә һуңғы ижеккә төшә: ҡала́, ҡалала́р, ҡалаларҙы́.

3. Шиғырҙы уҡы. Синонимдарҙы тап. **Ғүмер кисергән** һүҙбәйләнешен аңлат.

Ватан ул, ҡыҙым, Тыуған ил,
Бына һин торған урын.
Был ерҙә ғүмер кисергән
Ата-бабалар борон.

(Рәшит Ниғмәти)

26. Салауат Юлаев һәйкәле

1. Тексты уҡы.

Балалар! «Баш ҡалабыҙ Өфөгә килгән ҡунаҡ тәүҙә ҡайҙа бара?» – тип һорайһам, «Салауат һәйкәленә!» – тип яуап бирәсәкһегеҙ. Ана, Ағиҙелдең бейек ярынан, ҡунаҡсыл хужа кеүек, Салауат һәр юлсыны сәләмләп ҡаршы ала, оҙатып ҡала. Шағирҙар был һәйкәлгә арнап шиғыр яҙа, композиторҙар көй сығара.

Был һәйкәлдең авторы – осетин халҡының улы, скульптор Сосланбәк Дафаевич Тавасиев. Ул Бөйөк Ватан һуғышы барған осорҙа Башҡортостанда йәшәй. Башҡорт халҡына һоҡланып, уның тарихы менән ҡыҙыҡһына. Һуғыштан һуңғы егерме йыл ғүмерен Салауат Юлаев һәйкәлен ижад итеүгә арнай.

1967 йылдың 17 ноябрендә һыбайлы Салауаттың бронза һыны Ағиҙелдең иң бейек ярында урын ала. Уның бейеклеге 9,8 метр, ә нигеҙе 10 метр.

Салауат һәйкәле баш ҡалабыҙҙың иң күркәм урынына әүерелде.

(Рауил Бикбаевтан)

- Һәйкәлдең авторы тураһында нимә белдең? Һәйкәл ҡасан ҡуйылған?
- Салауат Юлаев тураһында ниндәй шиғыр беләһең? Һөйлә.
- **Бейек** һүҙенә – антоним, **йәшәй, күркәм** һүҙҙәренә синоним уйла.
- Ҙур хәрефтән яҙылған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Орфограмманы аңлат.

Бер ижекле һүҙҙәр юлдан юлға күсерелмәй: сер, ҡаш, таш. Һүҙҙең тәүге ижеге бер генә һуҙынҡынан торһа, ул юлда ҡалдырылмай, икенсе юлға күсерелмәй: Аза-мат, уҡый.

Башҡорт һүҙҙәрендә бер ижектә ике тартынҡы бер рәттән килмәй: рәх-мәт, ҡар-лу-ғас.

2. Тексты, юлдан юлға күсерерлек итеп, ижеккә бүлеп яҙ. Һуңғы һөйләмдәге һүҙҙәргә баҫым ҡуй.

Салауат Юлаев – башҡорт халҡының данлыҡлы батыры булған. Ул азатлыҡ өсөн көрәшкән. Өфөлә Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйылған. Батырҙың исемен мәңгеләштереү өсөн күп эштәр башҡарыла. Һәр йыл һайын уның тыуған көнөндә Салауат йыйыны уҙғарыла.

- Салауат Юлаев исеменә бәйле нимәләрҙе беләһең?

27. Тыуған яҡты өйрәнеү музейы

1. Тексты уҡы.

Өфөлә бер нисә музей бар. Шулар араһында миңә иң оҡшағаны – Тыуған яҡты өйрәнеү музейы. Үткән аҙнала беҙ унда экскурсияла булдыҡ.

Экскурсовод беҙгә музейҙың экспозицияларын күрһәтте. Беҙ залда экспонаттар ҡуйылған стендтарҙы ҡараныҡ. Унда боронғо вазалар, тимер аҡсалар, табаҡ-һауыттар, эш һәм һуғыш ҡоралдары бар ине. Экскурсовод экспонаттарға нисә йыл икәнен, уларҙың ҡайҙан табылғанын һөйләне. Ҡыҙҙар – милли кейемдәр, ә малайҙар һуғыш ҡоралдары менән ҡыҙыҡһынды.

Киләһе залда хайуан һәм ҡош һындарын күрҙек. Шулай уҡ балыҡтар, гөбөргәйелдәр, ҡабырсаҡтар менән тулы аквариумдарҙы ла ҡараныҡ. Минералдар коллекцияһын күреү файҙалы булды.

Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа арналған зал да бик ҡыҙыҡлы. Унда байтаҡ ҡына тарихи документтар, экспонаттар бар ине.

- Һинең ниндәй музейҙарҙа булғаның бар?
- **Экскурсовод, экспонат, экспозиция** һүҙҙәренең мәғәнәһен һүҙлектән ҡара.
- Музейҙа үҙеңде нисек тоторға кәрәк?
- Текст буйынса план төҙөп, һөйләргә әҙерлән.

2. Тексты уҡы. Нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың һәм рус яҙыусыһы Сергей Тимофеевич Аксаковтың йорт-музейҙары, Михаил Васильевич Нестеров исемен йөрөткән сәнғәт музейы, Урман музейы бар.

- Текстағы орфограммаларҙы аңлат.

Өндө әйтәм, ишетәм. Хәрефте күрәм, яҙам.

3. Һүҙҙәрҙе уҡы, тәржемә ит. Ижек, хәреф, өн һанын әйт.

музей, һәйкәл, йылға, ҡала, ауыл, юҡ, таҙа, ваза, троллейбус, аквариум, ҡабырсаҡтар, хайуан

28. Өфөлә транспорт төрҙәре

1. Тексты уҡы. Төп фекерен әйт.

Мин беҙҙең күрше Рәшит ағайға оҡшарға тырышам. Ул – шофёр. Йөк машинаһында ҙурлыҡ-түлек ташый. Машинаһын һәр ваҡыт **таҙа** тота. Рәшит ағай юл ҡағиҙәләрен **яҡшы** белә.

Кешеләр менән һәр саҡ йылмайып, яғымлы һөйләшә. Балалар менән дә аралашырға ваҡыт таба.

Рәшит ағай ярҙамсыл, йүнсел кеше. Уны ғаиләһендә яраталар, эшендә хөрмәт итәләр.

- Билдәләнгән һүҙҙәрҙең антонимдарын тап.
- **Йүнсел, ярҙамсыл** һүҙҙәренең мәғәнәһен башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән табып уҡы. Тамырын, ялғауын билдәлә.

2. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

– Ғәфү итегеҙ! Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына нисек барырға була?

– Унда бынан автобус һәм троллейбус менән барып була.

– Ниндәй автобусҡа ултырайым икән?

– 255-се, 266-сы, 75-се автобустар бара.

– Рәхмәт!

- Һин йәшәгән төбәктә ниндәй транспорт төрҙәре йөрөй?

Ҡалын һуҙынҡылар: *а, о, у, ы, ё, ю, я.*
Нәҙек һуҙынҡылар: *ә, ө, ү, и, е, э.*
Яңғырау тартынҡылар: *б, в, г, ғ, д, ж, з, ҙ, й, л, м, н, ң, р.*
Һаңғырау тартынҡылар: *п, ф, к, ҡ, т, ш, с, ҫ, х, һ, ц, ч, щ.*

3. Һүҙҙәргә баҫым ҡуйып уҡы. Ижектәргә бүл. Тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең һанын әйт.

такси, Өфөлә, поезд, метро, эскалатор, Мәскәүҙән, аэропорт, тимер юл вокзалы, автовокзал, теплоход, пассажирҙар, трамвай, троллейбус, автобус

29. Өфө урамдары буйлап

1. Тексты уҡы.

Сәғит урамда боҙ тибеп йөрөй ине. Әле генә туҡтаған трамвайҙан ауылса кейенгән, таяҡ таянған бер бабай төштө. Ул Сәғиттән:

– Улым, Минһажев урамы ҡайҙа? – тип һораны.

– Шуны ла белмәйһеңме? Туп-тура бар ҙа уңға борол. Шунан тағы тура бар. Шунан һулға борол. Яп-яҡын, – тип, Сәғит китә башланы.

– Улым, мин ҡалала йөрөй белмәйем. Башым әйләнә, әллә оҙатып ҡуяһыңмы?

– Ауылдан килгән һәр бер кешене оҙата башлаһаң, аяғың ҡалмаҫ, – тине Сәғит.

– Улым, зинһар, һүҙемде тыңла! Аҡса бирермен, – тип бабай кеҫәһенән аҡса сығара башланы.

– Бынығы икенсе эш.

Сәғит аҡсаны тиҙ генә кеҫәһенә тыҡты ла:

– Әйҙә, атла минең арттан. Тиҙ бул! – тип, бабайҙы ашыҡтырҙы.

(Фәрит Иҫәнғоловтан)

- Хикәйәлә нимә оҡшаны, нимә оҡшаманы? Тексҡа исем бир, һөйләргә әҙерлән.
- Әгәр малай бабайға юл күрһәтмәһә, уның ниндәй хәлгә осрауы бар?

Фәрит Иҫәнғолов – билдәле яҙыусы, Салауат Юлаев премияһы лауреаты. Балалар өсөн яҙған «Тәүге һынау», «Баҫҡыс», «Хәмит күпере», «Сабирҙың дуҫтары», «Нәҙекәйбил», «Быйыл йәй» һәм башҡа хикәйә, повестары донъя күргән.

2. Һөйләмдәрҙә эйә менән хәбәрҙе табып, аҫтына һыҙ.

Урамдағы хәрәкәт светофорға буйһона. Һары төҫ иғтибарлы булырға саҡыра. Йәшел төҫ урамды аша сығырға күрһәтә. Ә ҡыҙыл төҫ үтергә ярамай икәнде белдерә. Ҡалала йөрөгәндә иғтибарлы булыу кәрәк.

- Һин мәктәпкә йәйәү йөрөйһөңмө, әллә транспорт менәнме?
- Ниндәй һүҙ рус теле аша ингән?
- **Светофор, йәшел, төҫ** һүҙҙәрендә ижек, хәреф, өн һанын билдәлә.

Төп башҡорт һүҙҙәре: атай, сәскә, баш, аяҡ, болот, ағас, ямғыр, япраҡ, йүгереү, һыйыр, йылға һ. б.
Фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр: таҫтамал, аҙна, дөрөҫ, сөгөлдөр, шәкәр, ҡыяр, һабын һ. б.
Ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр: ҡала, китап, әлифба, ғаилә, табип, нөктә һ. б.
Рус теленән һәм рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәр: мискә, эшләпә, йәшник, трамвай, пароход, самолёт, альбом, ручка һ. б.

30. Йәйәү йөрөү файҙалымы?

1. Тексты уҡы. Исем бир.

Хәҙер күп эштәрҙе машиналар башҡарғас, кеше әҙ хәрәкәт итә. Шуға күрә лә төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килә.

«Хәрәкәттә – бәрәкәт» ти халыҡ мәҡәле. Аҙнаһына кәмендә өс тапҡыр йәйәү йөрөү ҙә кешенең һаулығына ыңғай тәьҫир итә.

Йәйәү йөрөгәндә ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк:

– Ашағандан һуң 30 минут үткәс кенә йөрөргә мөмкин.

– Йөрөү ваҡыты ярты сәғәттән кәм булмаһын.

– Йөрөгәндә атлау ритмын һаҡларға кәрәк.

Йәйәү йөрөгөҙ, сәләмәт булырһығыҙ!

(«Мәктәп календары»нан)

- Һин йәйәү йөрөргә яратаһыңмы?
- Рус теленән ингән һүҙҙәрҙе табып уҡы.

Төп башҡорт һүҙҙәре тик ҡалын йәки тик нәҙек ижектәрҙән генә тора: **а-тай-ҙар-ҙа, сәс-кә-ләр-гә.** Ҡалын һуҙынҡыларҙан торған һүҙҙәрҙә тартынҡылар ҡалын, ә нәҙек һуҙынҡыларҙан торған һүҙҙәрҙә тартынҡылар нәҙек була.

2. Һүҙҙәр араһынан төп башҡорт һүҙҙәрен тап. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән тикшер.

әлифба, имән, ҡарағай, ҡағиҙә, тәбиғәт, бөркөт, ҡарлуғас, апрель, сабаҡ, укроп, халыҡ, театр, йәшник, эскәмйә, ғаилә, шәмбе, ҡымыҙ, сөгөлдөр

3. Һүҙбәйләнештәрҙе уҡы. Уларҙың ҡайһыныһы тура, ҡайһыныһы күсмә мәғәнәлә килгәнлеген әйт.

йомшаҡ мендәр, йомшаҡ ҡар, йомшаҡ һүҙ; халҡын һыу, халҡын ҡараш; алтын көҙ, алтын ҡул, алтын сәғәт; йылы һүҙ, йылы кейем, йылы көн

31. Сәйәхәт ниндәй була?

1. Схеманы ҡара. Һиңә нимә менән сәйәхәт итеү оҡшай? Һөйләмдәр төҙө.

Өлгө: Миңә автобуста сәйәхәт итеү оҡшай.



2. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Һөйләшеү нимә тураһында бара?

– Сәләм, Азат!
– Сәләм, Айбулат!
– Ҡайҙа китеп бараһың?
– Вокзалға. Санкт-Петербургка билет алам.
– Беҙҙең ғаилә Асылыкүлгә йыйына.

Бер һүҙҙә ҡалын да, нәҙек тә һуҙынҡы булырға мөмкин. Улар, ғәҙәттә, ғәрәп, фарсы, рус телдәренән ингән һүҙҙәр.

3. Һин ял көндәре сәйәхәткә йыйынаһың, ти. Үҙең менән нимәләр алыр инең? Шул һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

сумка, юрған, теш пастаһы, теш щёткаһы, сәйнүк, велосипед, шорты, китап, мендәр, футболка, күҙлек, эшләпә, туфли, салбар, куртка, туп, рюкзак, фонарь, халат, палатка, һыу инеү костюмы, таҫтамал, кроссовка, ҡармаҡ, һабын, итек, свитер

- Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән уларҙың ниндәй телдән ингәнен асыҡла.

4. Ялғауҙарҙы дөрөҫ ҡушып уҡы. Башҡорт теленең орфография һүҙлегенән ҡарап тикшер.

ғаилә (-ны, -не) (-ға, -гә)
әлифба (-ны, -не) (-ла, -лә)
табип (-ты, -те) (-ҡа, -кә)
сүмес (-ты, -те), (-ҡа, -кә)
ғинуар (-ҙа, -ҙә) (-ға, -гә)
ғалим (-ға, -гә) (-ды, -де)

32. Мәскәү – Рәсәйҙең баш ҡалаһы

1. Тексты уҡы.

Мәскәү – Рәсәйҙең баш ҡалаһы. Ҡалаға Юрий Долгорукий нигеҙ һалған.

Баш ҡалала тарихи урындар күп: Ҡыҙыл майҙан, Мәскәү кремле, П. Третьяков галереяһы, А. С. Пушкин исемендәге сәнғәт музейы һәм башҡалар.

Мәскәү Ҙур һәм Бәләкәй театрҙары менән билдәле.

Мәскәү – донъялағы иң ҙур ҡалаларҙың береһе. Унда 13 миллионға яҡын кеше йәшәй һәм эшләй.

- Мәскәү ҡалаһына кем нигеҙ һалған? Мәскәүҙә күпме халыҡ йәшәй?
- Театрҙар тураһында нимә әйтә аласың?

- Мәскәүҙә булғаның бармы? Унда нимәләр күрҙең?
- Рус теленән ингән һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

2. Белешмәнән һүҙҙәр өҫтәп, күсереп яҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе ижектәргә бүл.

Мәскәү … һуға,
Ваҡыт **ҡәҙерле** уға.
Бер … юғалтмай,
Бер кемде лә …
Алтын ғына уҡтары,
Семәрләнгән суҡтары.

(Рәсимә Ураҡсина)

Белешмә өсөн һүҙҙәр: сәғәте, минутын, һуңлатмай.

3. Һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙө.

Дуҫлыҡ монументы		
Ҙур театр		
Ҡыҙыл майҙан	Мәскәүҙә	
Салауат Юлаев һәйкәле		урынлашҡан.
П.Третьяков галереяһы	Өфөлә	
М.В.Нестеров музейы		
Еңеү паркы		

4. Бирелгән һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушып яҙ. Орфография һүҙлегенән ҡарап тикшер. Был һүҙҙәр ниндәй тел аша ингән?

радио(-ның, -нең), газ(-ды, -де), журнал(-дар, -дәр), бокс(-ҡа, -кә), планета(-лар, -ләр), хоккей(-ға, -гә), календарь(-ҙән, -ҙан), тайға(-ла, -лә), слесарь(-ға, -гә), диплом(-ды, -де), галерея(-he, -hы), монумент(-то, -ты)

33. Диңгеҙҙә ял итеү хыялы

1. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

– Быйыл йәй ҡайҙа бараһығыҙ?
– Сочиға, диңгеҙ буйына. Күптән хыялланабыҙ.
– Нисә көнгә?
– Ике аҙнаға. Ә һеҙ ҡайҙа йыйынаһығыҙ?
– Беҙ «Яҡтыкүл» санаторийына барабыҙ. Былтыр ҙа шунда ял иттек.
– Оҡшанымы?
– Эйе, бик оҡшаны. Шуға быйыл да уны һайланыҡ.

● Башҡортостанда тағы ла ҡайҙа ял итергә була?

2. Белешмәләге һүҙҙәрҙе ҡулланып, иптәшең менән диалог ҡороғоҙ.

– Каникулда мин …

Белешмә өсөн һүҙҙәр: сит илгә барам, балыҡ тотам, еләк йыям, бәшмәк йыям, диңгеҙгә барам, шахмат уйнайым, кәмәлә йөрөйөм, күргәҙмәгә барам, һыу инәм, тауға менәм, бесән сабам, лагерҙа ял итәм.

Төп башҡорт һүҙенең тамырында **о** йәки **ө** хәрефе булһа, ялғауында ла **о** йәки **ө** хәрефе яҙыла: боролошоноң.

3. Түбәндәге һүҙҙәргә ялғау ҡушып уҡы. Тәржемә ит.

ҡорот(-тө, -ты, -то)
дөгө(-но,-нө,-не) → ашаным
йөҙөм(-де, -дө, -до)

төлкө(-нөң, -ноң, -нең)
ҡолон(-доң,-дың, -дөң) → ҡойроғо
өкө(-нөң, -нең, -ноң)

34. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Тексты уҡы.

Башҡортостан – **бай** ил. Унда нимәләр генә юҡ! **Аҡ** бүрекле тауҙар ҙа, **киң** яландар ҙа, көмөш йылғалар ҙа, зәңгәр күлдәр ҙә, йәшел урмандар ҙа **күп**.

Ер аҫты байлыҡтарын да һанап бөткөһөҙ. Нефть һәм газ тиһеңме, күмер һәм металл тиһеңме, алтын һәм баҡыр тиһеңме – бөтәһе лә **бар**.

Шулай уҡ ҡиммәтле тиреле хайуандары, иҫ киткес балы менән дан ҡаҙанған Башҡортостан.

(Ғилемдар Рамазановтан)

- Тексҡа исем бир. Төп фекерен әйт.
- **Бай, байлыҡ** һүҙҙәре тамырҙашмы? Уларҙың синонимдарын тап.
- **Аҡ** һүҙе бер мәғәнәлеме әллә күп мәғәнәлеме? Билдәләнгән һүҙҙәргә антонимдар тап.
- Һуңғы абзацтағы һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеп яҙ. Ҡайһыларын юлдан юлға күсереп була?

2. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе тап, төркөмләп яҙ.

белем, белемле, беләк, бел, беләҙек, белгес, белеш, белдереү, белешмә

3. Был һүҙҙәрҙе кирегә уҡып ҡара. Ни өсөн һүҙҙәр тик ҡалын йә тик нәҙек ижектәрҙән генә тороуын аңлат.

табаҡ, көйөк, шат, ҡойо, кәрәк, ҡыйыш, сәс, әсә

4. Башҡорт теленең омонимдар һүҙлеген ҡулланып, түбәндәге һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлат.

ат, ят, йәш, өй, һал, яҙ, йөҙ, ярыш, баҫма, һалам

5. Һүҙҙәрҙе уҡы. Улар араһынан тәүҙә башҡорт һүҙҙәрен, аҙаҡ рус теле аша ингән һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

ылыҫ, сыр, ышыҡ, посылка, ҡыш, косынка, ҡымыҙ, брынза, ҡамыш, вышка, ысыҡ, штык, музыка, ҡырын

6. Һүҙҙәрҙе күсереп яҙ, баҫым ҡуй. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе билдәлә.

завод, эшләпә, уҡытыусы, каникул, музей, экспонат, һәйкәл, хоккей, ғаилә, планетарий, хайуандар, балалар, металл, синоним

IV бүлек. Мин һәм минең ғаиләм

35. Олатайым кәңәштәре

1. Тексты уҡы.

«Хеҙмәткә – хөрмәт» ти халыҡ мәҡәле. Кешегә баһаны эшенә күрә бирәләр. Уны хеҙмәтенә ҡарап хөрмәтләйҙәр. Шуға ололар:

– Ҡояштан алда тор. Тупһаңды һепер, тәҙрә пәрҙәләрен асып ҡуй. Ҡояштың тәүге нурҙары менән ырыҫ килер. Ырыҫ – ул бәхет, һаулыҡ, муллыҡ, түллек, йәшәйеш, – тип өйрәтә балаларҙы.

- «Ҡояштан алда тор» тигәнде нисек аңлайһың? Нимә ул ырыҫ?

2. Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен аңлат.

1. Ни сәсһәң, шуны урырһың. 2. Эше барҙың, ашы бар. 3. Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.

- Был мәҡәлдәрҙе ишеткәнең бармы?
- Мәҡәлдәрҙән антонимдарҙы тап.

3. Таблицаны ҡарап, [ә] , [э] өндәрен сағыштыр. Улар һүҙҙең ҡайһы өлөшөндә килә? Өн һәм хәреф билдәләнеше бер төрлөмө? Нығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
әтәс	бәләкәй	сәскә
әфлисун	рәт	сейә
эт	тегеүсе	терпе
эшләй	тейен	китте

[ә], [э] өндәре – нәҙек һуҙынҡылар. [ә] өнөн әйткәндә: ауыҙ киң асыла, тел аҫҡы тештәргә терәлә, һауа иркен сыға, ҡаршылыҡ юҡ.
[э] өнөн әйткәндә: ауыҙ уртаса асыла, тел ауыҙ эсендә урта өлөштә тора, тел осо аҫҡы тештәргә терәлә.

4. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуйып яҙ.

мәкт_п, тей_н, тег_үсе, сей_, _шсе, к_ше, эл_к, б_йәл_й, б_сәй, _шләй, әс_й, сәск_

5. Тамырҙаш һүҙҙәр уйлап яҙ.

йәш, бала, эш, йылы, аҡ

6. Башватҡысты сис. Беренсе һүҙ **ә** хәрефенән башлана. Киләһе һүҙ алдағы һүҙҙең һуңғы хәрефенән башлана. Һәр һүҙҙә **ә** хәрефе булырға тейеш.

ЭСӘЙӨРӘКӘЗӘТӘСӘСКӘЙТӘМЛЕЛӘКӘМӘРЕМӘКӘНФИТ

36. Өләсәйем кәңәштәре

1. Тексты уҡы.

Өләсәйем ебәргән
Беҙгә кәнфит, шоколад,
Бейәләй, буяу, ҡәләм
Һәм матур уйынсыҡ ат.
Тағы ла өләсәйем
Ебәргән ҡайнар сәләм…
Бына кәнфит, шоколад,
Бына ат, бына ҡәләм…
Ә ҡайҙа ҡайнар сәләм?
Күрәйемсе тиҙерәк!
Әсәй йәшерҙеме әллә,
Һыуынһын тип әҙерәк?

(Овсей Дриздан ирекле тәржемә)

- Өләсәй ниндәй күстәнәстәр ебәргән? Күсереп яҙ.
- Был һүҙҙәр ниндәй телдән ингән. Һүҙлектән ҡара.
- **Ҡайнар** һүҙе ниндәй мәғәнәлә ҡулланылған?

2. Тексты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

Өләсәһе менән Фәриҙә диванда ултыралар. Өләсәһе уның ҡара сәстәренән һыйпай, ҡыҙ быға иҙрәп ултыра. Шунан ҡыҙыҡай ҙа өләсәһен ҡосаҡлап алды һәм уның сәсен һыйпарға тотондо.

– Өләсәй, һиңә рәхәтме? – тип һораны.

– Ҡулың бигерәк йомшаҡ, балам.

– Йә әйт, сәсеңде һыйпағас, һиңә рәхәтме?

– Бигерәк һәйбәт һинең менән бергә ултырыуы, балам.

– Һиңә рәхәт бит, өләсәй. Күреп торам инде…

– Ни эшләп шулай уйлайһың?

– Беләм, өләсәй. Беләм инде. Беҙҙең бесәйҙең башын һыйпаһам, ул күҙҙәрен йома. Шунан мыр ҙа мыр итә. Уға рәхәт була. Ана, һин дә күҙеңде йомдоң.

Өләсәһе был һүҙҙәргә көлөп ебәрҙе.

– Эй, ҡыҙым, тауышың матур һинең. Һайрап ҡына тораһың шул.

(Рәис Низамовтан)

- Өләсәй менән ейәнсәр бер-береһен яраталармы? Ниндәй һүҙҙәр быны иҫбатлай? Уҡып күрһәт.
- Текстан **э, е** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе тап. Улар ниндәй өндәрҙе аңлата?

[йә], [э] өндәре – нәҙек һуҙынҡылар. Һүҙ башында [йә] өнө **е** хәрефе менән яҙыла.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
эйәк	т**е**л	сирл**е**
элгес	б**е**й**е**к	тимерс**е**
ебәк	дәр**е**сл**е**к	егерм**е**
ейән	м**е**й**е**с	кеш**е**

37. Олоно оло ит, кесене кесе ит

1. Тексты уҡы. Исемлә. Планын төҙө һәм һөйлә.

Бесәндә олатаһы Йәмилгә Йомабай Иҫәнбаев тураһында ентекләп һөйләп бирҙе:

– Хәйбулла ерҙәрендә 1891 йылда Йомабай исемле малай тыуа. Алты-ете йәшенән ҡулына ҡурай алып,

уйнай башлаған. Ун биш йәшендә Йомабай йөҙ илленән артыҡ көйҙө бик оҫта итеп башҡарған, уларҙың тарихын да һөйләгән.

Парижда ҡурайҙа уйнап, бар халыҡты хайран ҡалдыра. Йомабай бер нисә ҡурайҙы тамыры менән ҡаҙып алып, урап, Парижға алып бара. Сәхнәгә Урал тәбиғәте төшөрөлгән декорация эленә. Йомабай ҡурайҙы үҫкән кеүек итеп ултыртып ҡуя. Сәхнәгә сығып, бәке менән ҡурайҙы ҡырҡып ала, биш тишек яһай ҙа «Урал»ды һыҙҙырып уйнап ебәрә. Үҙ күҙҙәренә ышанмай, бер француз сәхнәгә менеп, ҡурайҙың эсен ҡарай. Йәнәһе, көпшә эсендә бер хикмәт ҡуйылмаған микән? Ә бер һылыу француз ҡатыны Йомабай бармағына бик ҡиммәт ташлы алтын балдаҡ кейҙереп, үҙенең рәхмәтен белдерә. Бына шулай, улым!

Мин үҙем дә Йомабай Иҫәнбаев конкурсы лауреаты булдым былтыр. Әйҙә һин дә ҡурайҙа уйнарға өйрән. Һәр нәмәлә ололарҙан үрнәк ал, – тине олатай.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинанан)

● **Ы** хәрефе булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Ул һүҙҙең ҡайһы урынында килгән?

2. Антонимдарҙы табып, аҫтына һыҙ.

1. Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе. 2. Кеселәрҙе кеселәү – кеселектең билдәһе. 3. Ололарға кесе бул, кеселәргә оло бул!

4. Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ;
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!

(«Урал батыр» эпосынан өҙөк)

- Ололар нимәгә өйрәтә? Яҡшы кеше булыуы ҡыйынмы әллә еңелме?
- **Ы** хәрефе булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ, һүҙлектән ҡарап, мәғәнәһен аңлат.

3. Таблицаны ҡара. **Ы** хәрефе һүҙҙең ҡайһы өлөшөндә килә һәм ниндәй өндө белдерә? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
ысыҡ	һыйыр	шыршы
ынйы	ҡыяр	ҡышҡы
ылыҫ	ҡырҡ	баллы

38. Минең шәжәрәм

1. Тексты уҡы.

Туған – иң яҡын кеше. Бер ғаилә кешеләрен, ағай-энене, ҡәрҙәштәрҙе, ырыуҙаштарҙы, нәҫел-нәсәпте туған тип йөрөтәләр.

Элек-электән халҡыбыҙ туғанлыҡтың ни тиклем мөһим икәнен яҡшы белгән. Был турала йырҙар, әкиәттәр, мәҡәлдәр сығарған, шәжәрәләр төҙөгән.

Шәжәрә – нәҫел тарихы тигәнде аңлата. Кеше нәҫеленең ете быуынын белергә тейеш.

- Кем ул туған? Һинең туғандарың күпме? Улар ҡайҙа йәшәй?
- Өйҙә шәжәрәңде төҙө.
- Туғандарыңдың исемдәрен яҙ.

2. Таблицаны ҡара. **У, ү** һуҙынҡы хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Улар ниндәй өндәрҙе белдерә? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында
урам	турғай
ултырғыс	ауыл
үтек	күркә
үлән	кеүек

3. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуйып яҙ.

Минең бер т_ған апайҙарым, ағайҙарым, ҡ_стыларым, һеңлеләрем бик к_п. Улар а_ылда ла, ҡ_лала ла йәшәйҙәр. Й_йен бергә йый_лһаҡ, өләсәйемдең өйө туп-тулы ҡ_наҡ була.

Һөйләмдәрҙә әйә менән хәбәрҙе табып, аҫтына һыҙ. Тиң киҫәктәр нисек яҙыла? Орфограмманы иҫеңә төшөр.

39. Ғаилә байрамы

Гүзәл Ситдиҡова – шағирә, прозаик, публицист, тәржемәсе һәм йәмәғәт эшмәкәре. Балалар өсөн «Текетек», «Бүрене еңгән бәрәс», «Үҙ Ҡояшым, үҙ Айым», «Ҡыштарҙың да бар бит үҙ ҡоштары», «Машина ниңә «дүрт-дүрт» ти», «Ҡолонсаҡ – арғымаҡ булыр бер саҡ» тигән китаптарын ижад иткән.

1. Тексты уҡы. Һорауҙарға яуап бир.

Гөрләп тора өйөбөҙ,
Беҙ күмәкбеҙ, татыубыҙ.
Атай, әсәй, өләсәй,
Дүрт малай ҙа алты ҡыҙ.

– Күршеләргә хөрмәтле,
Кешеләргә хөрмәтле
Булығыҙ, – ти олатай, –
Беҙ – Мөхәммәт өммәте!

(Гүзәл Ситдиҡованан)

● Һиңә шундай ғаилә оҡшаймы? Һеҙҙең ғаилә татыумы? Ниндәй байрамдарҙы бергә үткәрәһегеҙ?

2. Һорауҙар ярҙамында «Беҙҙең ғаилә» тигән темаға инша яҙ.

1. Һеҙҙең ғаиләлә нисә кеше?
2. Һәр бер ғаилә ағзаһы тураһында ҡыҫҡаса һөйлә.
3. Өйҙә кем ниндәй эш башҡара?
4. Ниндәй эштәрҙе бергәләп эшләйһегеҙ?
5. Ял көндәрен нисек үткәрәһегеҙ?

3. Таблицаны ҡара. **Ё, ю, я** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Улар ниндәй өндәрҙе белдерә? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
ёлка	шофёр	мумиё
ял	ҡуян	буя
юлбарыҫ	бюст	меню
юйғыс	салют	авеню

4. Һүҙҙәрҙә нисә хәреф, нисә өн? Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөп яҙ.

япраҡ, ёлка, юлдаш, оя, костёр, баян, бюро

40. Ҡунаҡтар килде

1. Әҙәп ҡағиҙәләрен уҡы. Улар менән килешәһеңме?

1. Ҡунаҡтар менән мөләйем йөҙ менән иҫәнләш.
2. Һиңә бүләк бирһәләр, рәхмәт әйтеп ҡабул ит.
3. Ололар һөйләшкәндә, уларҙың һүҙен бүлдермә.
4. Үҙеңде тәртипле тот. Ҡысҡырып һөйләшмә, ҡысҡырып көлмә, йүгермә.
5. Әгәр музыка ҡоралында уйнай беләһең икән, һинән уйнарға һораналар, баш тартма.

2. Әкиәтте уҡы. Төп фекерен әйт.

Төлкө менән торна

Төлкө торна менән дуҫлашҡан. Төлкө торнаны ҡунаҡҡа саҡырған. Ул бутҡа бешергән. Бутҡаны тәрилкәгә һалып, һылап ҡуйған.

– Аша, торна дуҫ, – тип, үҙе һыйлай икән. Торна тәрилкәне суҡышы менән туҡылдата-туҡылдата, ти, бер нәмә лә эләкмәй, ти. Шул арала төлкө бутҡаны ялап та ҡуйған.

Торна төлкөнө үҙенә ҡунаҡҡа саҡырып ҡайтҡан. Торна бутҡа бешереп, тар муйынлы көршәккә һалған.

– Аша, төлкө дуҫ, – ти, икән. Төлкө күпме тырышмаһын, тар сүлмәктән ашай алмаған.

Шулай шул ул, һыйлаһаң – һый күрерһең.

(Рус халыҡ әкиәтенән)

● Беренсе абзацты күсереп яҙ. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙың аҫтына һыҙ. Уларҙың пары бармы?

Тартынҡы өндәр **яңғырау** һәм **һаңғырау**, **парлы** һәм **парһыҙ** булалар.

3. Әйтемдәрҙе, мәҡәлдәрҙе уҡы. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тартынҡы өндәренә характеристика бир.

1. Һөттә – **һаулыҡ**, майҙа – **бәрәкәт**, иттә – ҡеүәт. 2. Һарандың ашы бешмәҫ. 3. Өй күрке – аш, **әҙәм** күрке – баш. 4. **Ҡунаҡ** булһаң, **тыйнаҡ** бул.

? **4.** Шаян һорауҙарға яуап бир.

1. Яҙ менән көҙ нимә менән бөтә? 2. Тәҙрә башында ни тора?

5. Б – п, в – ф, г – к, д – т, ҙ – ҫ, ж – ш, з – с – парлы тартынҡылар. Уларҙы ни өсөн шулай атайҙар? Аңлат. Бирелгән һүҙҙәргә тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып яҙ.

япра.., ..аҡса, ..асоль, ..арта, ба..ана, сәйнү.., икмә.., ..агон, шыр..ы, ..лаг, ҡы.., ҡы..ала, бе..әй

41. Әсәйемә ярҙам итәм

1. Тексты уҡы.

Әсәйемде йәлләп китәм. Иртәнән кискә тиклем билен яҙмай, бал ҡорто һымаҡ эшләй. Мин йоҡлап китәм – ул ятмаған әле. Уянам – ул әллә ҡасан торған.

Ниңә ул ғына эшләргә тейеш? Батырға ла ял кәрәк, тиҙәр бит. Ә беҙ? Балалары? Кәңәш ҡорҙоҡ та эштәрҙе бүлешеп алдыҡ. Мин иҙән йыуам, туҙанды һөртәм, гөлдәргә һыу һибәм. Ағайым малдарҙы ҡараша, кәртәгә бикләй, ашата, эсерә. Апайым ашарға әҙерләшә.

(Ынйыҡай Исламғолова)

- Һин әсәйеңә нисек ярҙам итәһең?
- Эште бергәләп эшләһәң, күңелле була, тиҙәр. Һин килешәһеңме?
- **Ғ, г** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

2. Ярҙамсыларыбыҙҙан һүҙенең хәрефтәренән кем күберәк яңы һүҙҙәр төҙөр?

3. Яңғырау тартынҡыларҙың аҫтына һыҙ.

Беҙҙең ғаиләлә ике малай һәм өс ҡыҙ. Малайҙар атайға мал ҡарашырға ярҙам итәләр. Ҡыҙҙар өй эшен оҫта башҡаралар.

4. Таблицаны ҡара. **Г, ғ** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Улар ниндәй өндәрҙе белдерә? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
ғәфү ит	тоғро	олуғ
ғаилә	шиғыр	–
гөл	егерме	диалог
гөрләй	өлгө	флаг

42. Атайыма ярҙам итәм

1. Тексты уҡы. Исем бир. Планын төҙөп, һөйләргә әҙерлән.

Атайымды күрше Хәсән ағай мейес сығарырға саҡырҙы.

Атайымдың ҡулына күҙ эйәрмәй. Оҙаҡламай ул кирбестәрҙе түшәмгә саҡлы теҙеп тә ҡуйҙы. Шунан өйҙөң ҡыйығына торба ултыртты һәм мейескә ут яғырға ҡушты. Беҙ түҙемһеҙләнеп торбанан төтөн сыҡҡанын көтәбеҙ. Күп тә үтмәне, уралып-уралып төтөн өҫкә ағыла башланы.

Мейестә дөрләп ут яныуын күреп, хужалар ҡыуана ине.

Хәсән ағай:

– Рәхмәт, Ғәбит ағай! Алтын ҡулдарың мең йәшәһен, – тип атайымдың балсыҡҡа буялған ҡулдарын ҡыҫты.

(Раил Байбулатовтан)

● «Алтын ҡулдарың мең йәшәһен» тигәнде нисек аңлайһың? Текстан **ҡ, к** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Улар ниндәй һуҙынҡылар менән яҙыла?

2. Тексты уҡы.

Донъяла һөнәрҙәр күп. Бөтәһе лә яҡшы, бөтәһе лә маҡтаулы. Ләкин миңә атайымдың һөнәре бигерәк тә яҡын. Атайым – механизатор.

– Ерҙе кем һөрә?
– Атайым.
– Игенде кем сәсә?
– Атайым.
– Кем сүп утай?
– Атайым.
– Ә кем ура, һуға?
– Атайым.

(Ынйыҡай Исламғолова)

● Атайҙар ниндәй булырға тейеш? Улар беҙҙе нимәгә өйрәтә?

3. Таблицаны ҡара. **К, ҡ** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Улар ниндәй өндәрҙе белдерә һәм ниндәй һуҙынҡылар менән ҡулланыла? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
ҡалаҡ	ҡурҡаҡ	балыҡ
көрәк	кәкүк	тирәк

4. Ҡулына, кирбестәрҙе һүҙҙәрендә нисә тартынҡы һәм һуҙынҡы өн, нисә ижек бар? Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.

? **5.** Ялғауҙар ҡушып, яңы һүҙҙәр яһа. Тамырын билдәлә. Ниндәй ялғауҙар ҡуштың?

көҙ, эш, аҡыл, яҙ, төн, баҡса, уйын, ял, йәш, ярҙам, һөнәр, һөт, болот, ҡояш

43. Минең хыялым

1. Тексты уҡы.

Кем булырға? Был һорау Тәлғәтте оҙаҡ борсоно, бер ҙә тынғы бирмәне. Әллә шофёр булырғамы? Йәй буйына рәхәтләнеп машинала еләһең!

Тәлғәттең осоусы булғыһы ла килә. Диңгеҙселәр, танкистар тураһында ла уйлап ҡараны ул. Малай саҡта кем генә булғы килмәй инде ул!

Кем булырға һуң? Ул Тәнзилә биргән китапты уҡырға тотондо. Унда космонавтарҙың тормошо, батырлыҡтары тураһында яҙылғайны. Бигерәк тә Юрий Гагариндың бала сағы, тормош юлы уны ҡыҙыҡһындырҙы. Тәлғәт космонавт булырға ҡарар итте.

(Вәзих Исхаҡовтан)

- Малайҙы ниндәй һөнәрҙәр ҡыҙыҡһындыра? Уҡып ишеттер.
- Һинең киләсәктә кем булғың килә? Нимә менән ҡыҙыҡһынаһың?
- **З, ҙ** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Аҫтына ныҙ. Был ниндәй өндәр?

? **2.** Үҙеңә һөнәр һайлап, өлгө буйынса яҙ. Һүҙ яһаусы ялғауҙарҙы табып, аҫтына ныҙ.

Өлгө: Мин үҫкәс, тәрбиәсе булам. Мин үҫкәс, архитектор булырға теләйем (хыялланам).

юрист, банкир, инженер, экономист, архитектор, агроном, артист, баҡсасы, тәржемәсе, төҙөүсе, тәрбиәсе, йырсы, бейеүсе, тракторсы, уҡытыусы, хәбәрсе, ашнаҡсы, осоусы, һатыусы, игенсе

3. Таблицала **з, ҙ** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Ниндәй өндәрҙе белдерә һәм ниндәй һуҙынҡылар менән ҡулланыла? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
зирәк	кә**з**ә	Гөлна**з**
заман	ҡа**з**а	оста**з**
ҙур	а**ҙ**аҡ	бе**ҙ**
ҙурайтыла	ә**ҙ**ер	ҡумы**ҙ**

4. З, ҙ хәрефтәренең аҫтына һыҙ. Ялғауҙар ҡушып, 5 һүҙ яһа. Һөйләмдәр төҙө.

? **5.** Ребусты сисһәң, халыҡ мәҡәлен уҡырһың.



44. Йөҙ юл

1. Шиғырҙы уҡы. Ниндәй һөнәр кешеләре тураһында әйтелә?

Капитан ағайым,
Киттек, ти, диңгеҙгә!
Осоусы ағайым,
Килерһең, ти, беҙгә.
Агроном апайым
Саҡыра киң ҡырға.
Нефтсе һөнәрен
Һайла, ти олатай.

Ә йырсы күршебеҙ
Ҡабатлай һәр саҡ:
– Һай, ҡустым, һинән бик
Шәп артист сығасаҡ!..
Ҡаршымда саҡырып
Йөҙ төрлө юл ята...
Ҡайһыһын һайларға?
Һай, малай, баш ҡата.

(Фәүзиә Рәхимғолова)

● Һөнәрҙе атаған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Тамырын, ялғауҙарын билдәлә. **Йөҙ, баш ҡата** һүҙҙәре ниндәй мәғәнәне аңлата?

2. Уҡы. Һөйләргә әҙерлән. Тексҡа исем бир, темаһын, төп фекерен әйт.

Уҡытыусы буласаҡ эшселәрҙе, игенселәрҙе, талантлы инженерҙарҙы, табиптарҙы тәрбиәләй. Оҫта ҡурайсы, бейеүсе һәм йырсы ла тәүге аҙымын мәктәптән башлай. Төрлө һөнәрселәрҙе, тегенселәрҙе, итекселәрҙе лә уҡытыусы әҙерләй. Шуға уҡытыусыны халыҡ хөрмәтләй.

● Һиңә уҡытыусы һөнәре оҡшаймы? Текстан һөнәр атамаларын күсереп яҙ. Уларҙың тамырын, ялғауын билдәлә.

3. Тейешле ялғауҙар ҡушып, күсереп яҙ. Барлыҡҡа килгән һүҙҙәр нисек атала?

ашатыу..., йәшәтеү..., көс биреү..., иген үҫтереү...

4. Таблицала **х, h** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Ниндәй өндәрҙе белдерә һәм ниндәй һуҙынҡылар менән дуҫ?

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
hауынсы	бурhыҡ	гонаh
хәбәрсе	рәхмәт	Сәлих

45. Ниндәй китап оҡшай?

1. Тексты уҡы. Планын төҙө. Исем бир.

Әминә апай китапханала эшләй. Китапханала иркен, яҡты, йылы. Китаптар һәр береһе үҙ урынында тора. Китапханасы апай кәрәкле китапты тиҙ таба, етеҙ эшләй.

Әминә апайҙың йөҙө алсаҡ, гел йылмайып ҡаршы ала. Компьютерҙан электрон китаптар менән дә танышырға рөхсәт итә.

Мин уны яратам, ҡушҡан эшен ҙур теләк менән үтәйем. Мин Әминә апайға оҡшарға тырышам.

● **Китапханасы, үтәйем** һүҙҙәрен юлдан юлға күсерерлек итеп ижектәргә бүлеп яҙ. Орфограмманы аңлат.

2. Таблицала **н, ң** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Ниндәй өндәрҙе белдерә?

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
нәҙек	hинең	урман
–	саңғы	минең

3. Уҡы. Ҡылымдарҙы күсереп яҙ. Уларҙа өн, хәреф һанын билдәлә.

Ҡулыма алһам китап,
Күңелем була бик шат.
Ул өйрәтә яҡшыға,
Ул саҡыра яҡтыға.

Бысратмайым биттәрен,
Йыртмайым һүрәттәрен,
Таҙа булһын китабым,
Дуҫтарым уҡыр тағы.

(Әлфинур Вахитова)

Һин ниндәй китаптар уҡырға яратаһың? Китап – беҙҙең дуҫ, ә дуҫты ҡәҙерләргә, һаҡларға, яратырға кәрәк! Һин был фекер менән килешәһеңме?

4. Тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, күсереп яҙ.

Китапх..на – аҡыл эйәләре яҙған китаптар тупланмаһы, үткән быуындарҙы.. аманат һүҙе, аҡыл, ғилем й..лъяҙмаһы. Китапхана – ул бел..м усағы, рухи байлыҡтар хази..аһы.

(Ғайса Хөсәйенов)

5. Мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен аңлат.

1. Китап – белем шишмәһе.
2. Күп уҡыһаң, күп белерһең.
3. Китап – хазина.

46. Минең шөғөлөм

1. Тексты уҡы.

Мин тегенергә яратам. Ҡурсаҡтарыма төрлө кейемдәр тегәм. Тәүҙә ҡағыҙҙан өлгө ҡырҡып ҡарайым. Аҙаҡ туҡыманан ҡырҡып тегәм. Әлегә бик үк һәйбәт килеп сыҡмай. Һеңлемә еңһеҙ, яғаһыҙ йәйге күлдәктәр тегәм.

- Тегенсе булыуы ауырмы? Нимәләр эшләй белеү кәрәк?
- **Тегеү, тегенсе, тегеүле** һүҙҙәре ниндәй тамырҙан яһалған?

2. «Минең буш ваҡытым» тигән темаға ҡыҫҡа хикәйә төҙө.

Буш ваҡытымда мин …

Белешмә өсөн һүҙҙәр: интернетта гиҙәм, китап уҡыйым, музыка тыңлайым, спорт менән шөғөлләнәм, сигеү сигәм, һүрәт төшөрәм, телевизор ҡарайым, футбол уйнайым.

3. Таблицала **с, ç** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килә? Ниндәй өндәрҙе белдерә? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
самауыр	баҡса	кис
–	өҫтәл	балаç

4. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуй.

1. Ағастарҙы бә.. ҡаплаған. 2. Баҡ..а еренә атайым тире.. түкте. 3. ..амауырҙы ҡайната алмай, арыным.

- Был һөйләмдәрҙән текст төҙөлдө тип әйтеп буламы?

5. Һүрәттәргә ҡарап, һөнәр оҫталары тураһында һөйлә.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: тегенсе, тегеү машинкаһы, ташсы, балта оҫтаһы, кирбестәр һала, тәҙрә рамдары, ҡулдары алтын, ысын оҫта.

47. Спорт һәм мин

1. Тексты уҡы.

Ер йөҙөндәге бөтә кеше спорт йәки спорт уйындары менән ҡыҙыҡһына. Спорт кешене һау-сәләмәт итә, йәшәүҙе **матурлай.**

Һәр ҡалала стадиондар, спорт майҙансыҡтары, бассейндар, футбол яландары **бар.** Унда кешеләр спорт менән шөғөлләнәләр.

Мәктәптә лә спортҡа **ҙур** иғтибар бирелә. Физкультура дәресе аҙнаһына өс тапҡыр үткәрелә. Дәрестәрҙә күнекмәләр эшләйбеҙ, баскетбол, волейбол, футбол уйнайбыҙ. Дәрестән һуң спорт секциялары эшләй. **Ҡыҙҙар** – гимнастика, аэробика, малайҙар тхэквондо, көрәш менән шөғөлләнәләр.

- Текстан тиң киҫәктәрҙе тап. Улар һөйләмдең ниндәй киҫәге? Ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла?
- **У, ү** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Был хәрефтәр һүҙҙең ҡайһы урынында килә?
- Билдәләнгән һүҙҙәрҙе күсереп яҙ, антонимдарын тап. Ҡайһы һүҙҙәр рус теле аша ингән?

2. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Өлгөгә ҡарап, үҙегеҙ диалог ҡороғоҙ.

– Атай, миңә бокс бирсәткәһе кәрәк.
– Ни өсөн?
– Минең бокс секцияһына йөрөгөм килә.
– Ниңә бокс? Башҡа спорт төрөн һайла.
– Мәктәптә танылған тренер төркөм йыя.
– Теләгең булғас, йөрөрһөң.

? **3.** Һүҙҙәрҙе уҡы, тәржемә ит. [уы], [үә] өндәре нисек әйтелә? Улар һуҙынҡымы, тартынҡымы?

саңғыла — шыуыу	оҙонлоҡҡа — ҡикереү
санала	бейеклеккә
штанга күтәреү	йүгереү йөҙөү

У, ү хәрефтәре һуҙынҡылар араһында һәм һүҙ аҙағында [уы], [үә] өндәре булып уҡыла, тартынҡы өндө белдерә.

4. [У], [ү] өндәре тартынҡы булып килгән һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

ауырый, бау, бүләк, һауа, көлөү, күркә, уҡый, үҫә, ҙур, килеү, ауыл, бәүелсәк, сәйнүк, уҡыу

48. Ялым күңелле үтә

1. Тексты уҡы.

Йәкшәмбе – ял көнө. Был көндө мин оҙағыраҡ **йоҡлайым.**

Йоҡонан торғас, һәр ваҡыт музыка ҡуям, тәҙрәне асып, бүлмәне елләтәм, урынымды йыйыштырам. Иртәнге аштан һуң өйгә эштәрҙе эшләйем.

Төштән һуң дуҫтарым менән осрашам. Беҙ саф һауала волейбол, футбол уйнайбыҙ йәки паркка барабыҙ. Көндәр **ямғырлы**, **һыуыҡ** булғанда өйҙә музыка тыңлайбыҙ, компьютерҙа уйнайбыҙ йәки киноға барабыҙ.

Киске ашҡа бөтә ғаилә бергә йыйыла. Һуңынан телевизор ҡарайбыҙ, өҫтәл уйындары уйнайбыҙ.

- Һинең ялың нисек үтә? Иптәштәреңә һөйлә.
- Текстан **в** хәрефе булған һүҙҙе тап.
- Тиң киҫәктәрҙе табып уҡы.

2. Уҡығыҙ. Өлгө буйынса үҙегеҙ диалог төҙөгөҙ.

– Алло! Сәләм, Вәсилә!
– Һаумы, Вера!
– Вәсилә, әйҙә кискеһен театрға барайыҡ.
– Әйҙә. Ҡайҙа осрашабыҙ? Туҡталыштамы?
– Ярай. Сәғәт биштә.
– Осрашҡанға тиклем!

В хәрефе рус һүҙҙәрендә **[в]** өнө булып уҡыла. Башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башында ҡалын һуҙынҡылы һүҙҙә лә, нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙә лә **[w]** тип уҡыла.

3. Шиғырҙы уҡы. Нимә белдең? Һөйлә.

«В» хәрефе бик мәрәкә,
Холҡо уның шуҡ ҡына,
Һүҙ башында килгәндә ул
«Уы», «үе» тиеп уҡыла.
Рус һүҙендә килгәндә, «в»
Саҡ ҡына ла үҙгәрмәй:
«Велосипедта елдерә
Вожатый ағай Гәрәй».

(Факиһа Туғыҙбаева)

4. Дөрөç әйтергә өйрән. **В** хәрефенең аçтына һыç.

[үәғәçә] – вәғәçә, [уатан] – Ватан, [уатық] – ватық, [үәли] – Вәли, [уыжлай] – выжлай, [уақиға] – ваҡиға

5. Ребусты дөрөç сисһәң, мәҡәлде уҡырһың.

1 = ы
с = н
+ дың

е 2′ әү

49. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Уҡы. Икмәк үçтереүçә ниндәй һөнәр кешеләре ҡатнаша?

Икмәк – илдең ҙур байлығы. Уны үçтереүгә игенселәр күп көс һалалар. Баçыуҙарҙы көҙөн ашлайҙар, ерҙе һөрәләр, тырматалар. Яҙын баçыуға бойҙай сәсәләр. Августа игенде уралар һәм ашлыҡты келәткә ташыйҙар. Игенде таҙартып, тирмәндә он яһайҙар. Заводтарҙа был ондан хуш еçле, тәмле икмәк бешерәләр. Икмәкте беҙ магазиндан, баҙарҙан, кибеттән һатып алабыç.

- Һуңғы һөйләмдән тиң киçәктәрҙе тап. Улар һөйләмдең ниндәй киçәге булып киләләр?

2. Әйтемдәрҙең мәғәнәһен аңлат.

1. Икмәк – ил байлығы. 2. Икмәктән оло булма!

3. Уҡы. Ниндәй халыҡтар тураһында яҙылған? Уларҙың исемдәрен күсереп яҙ, рус теленә тәржемә ит.

«Шәжәрә» һүҙе ғәрәп теленән «нәҫел», йәғни «ырыу тарихы» тигәнде аңлата. Төрки халыҡтарында уны телдән телгә күсә килгән эпостар дәлилләй. Башҡорттарҙа «Урал батыр», төркмәндәрҙә, төрөктәрҙә, әзербайжандарҙа «Уғыҙнамә», ҡырғыҙҙарҙа «Манас», ҡалмыҡтарҙа «Джангар» эпостары был халыҡтарҙың сығышы хаҡындағы сығанаҡтар булып тора.

(Фирҙәүес Хисаметдинованан)

4. Туғандарың араһында ниндәй һөнәр эйәләре бар?

5. Кем күберәк спорт төрҙәрен һанар? Ярыш ойоштороғоҙ.

? **6.** Һүҙҙәр уйлап яҙ.

– – – у –
– – – ү –

– ү – – – – –
у – – –

у – – – – – – –
– – ү – –

V бүлек. Мин һәм минең дуҫтарым

50. Тыуған көн

1. Й хәрефе һүҙҙең ҡайһы урынында килгән? Ҡушымсаларҙы һыҙ.

йәйге көн, йома сәйе, сейәле тау, йүгәнле ат, йоҙаҡлы ишек, класс йыйылышы, изәнде йыу, тейен

Й хәрефе һүҙ башында, уртаһында **йо, йө, йү, йы, йә** рәүешендә ҡулланыла. **Йе** ҡушымсаһы һүҙ уртаһында ғына яҙыла: кейем, тейен.

2. Уҡы. **Й** хәрефе булған һүҙҙәрҙе тап, яҙылышын аңлат.

Зәлифә тыуған көндө
Өҫтәл һый менән тулды.
Уйынсыҡтар күтәреп,
Иптәштәре йыйылды.
Уйнанылар, көлдөләр,
Ашанылар, эстеләр,
Зәлифә менән бергә
Бер ҡарышҡа үҫтеләр.

(Әлфинур Вахитова)

3. Һорауҙарға яуап бир.

1. Һинең тыуған көнөң ҡасан? 2. Был байрамға кемдәрҙе саҡырҙың? 3. Уларҙы ниндәй һыйҙар менән ҡунаҡ иттең? 4. Байрамда нимәләр эшләнегеҙ? 5. Ҡунаҡтар һиңә ниндәй теләктәр әйтте, ниндәй бүләктәр бирҙе?

? **4.** Бағаналағы һүҙҙәрҙе дауам ит. Кем күберәк һүҙ табыр?

[йә]	[йө]	[йү]	[йә]	[йо]	[йы]
йәй	йөн	йүкә	тейен	йома	йыу
…	…	…	…	…	…

51. Байрамға әҙерлек

1. Уҡы. Тағы нимә өҫтәр инең?

Байрамға әҙерләнеү планы:

1. Атайым һәм әсәйем менән кәңәшләшеп план ҡорам. 2. Яҡын туғандарымды, дуҫтарымды байрамға саҡырам. 3. Бүләктәр әҙерләйем, аҙыҡ-түлек һатып алырға ярҙамлашам. 4. Өй йыйыштырам. 5. Әсәйемә өҫтәл әҙерләргә ярҙам итәм. 6. Ҡыҙыҡлы уйындар һайлайым. 7. Бейеү көйҙәре әҙерләйем. 8. Матур күлдәгемде үтекләйем.

★★ **2.** Диалогтарҙы ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. **Ц, ч, щ** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

1. – Гүзәл, һаумы! Әйҙә иртәгә циркка барайыҡ!

– Ярай, мин риза. Ҡустымды ла алырмын. Өҫтөңә плащ кейәһеңме, әллә пальтомы?

– Мин куртка кейәм, плащым бысраған.

2. – Мин щи яратам. Ә өләсәйем гел бишбармаҡ бешерә.

– Үҙең бешер. Рецебын интернеттан ҡара. Бик аныһат бешерелә. Мин шулай борщ бешерҙем. Әсәйемә оҡшаны.

– Рәхмәт кәңәшеңә.

[Ц], [ч], [щ] өндәре рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә осрай. [Ц] өнө һәр саҡ ҡаты, [ч], [щ] өндәре нәҙек әйтелә.

3. Шиғырҙы уҡы. Циркта булғаның бармы?

Циркка барҙыҡ күмәкләп,
Циркта күпме ҡыҙыҡ!
Цилиндр кейгән бер маймыл
Цифрҙы йөрөй ҡыуып!

(Әнисә Таһирова)

● **Ц** хәрефенә бәйле рус телендә ниндәй орфограмма беләһең? Ул башҡорт телендә лә һаҡлана.

4. Ц, ч, щ хәрефтәрен тейешле урынға ҡуйып, күсереп яҙ. Иҫеңдә ҡалдыр. Һүҙлек диктанты яҙырға әҙерлән.

_и, _абан, _ирк, бор_, _инк, _ех, _ётка, по_та, табли_а, _иркуль, _емпион, пла_, лампо_ка, ру_ка, У_алы, _емент, _илиндр

52. Үҙеңде нисек тоторға?

1. Уҡы. Кәңәштәргә тағы ла нимә өҫтәп әйтерһең?

Тыуған көнгә саҡырһалар, ваҡытына бар. Бүләкте матур теләктәр әйтеп тапшыр. Өҫтәл артында тыйнаҡ бул. Ҡысҡырып һөйләшмә, көлмә. Алдыңа салфетка йәй. Ашағанда ауыҙыңды йомоп, ашыҡмай сәйнә. Өҫтәл аша йыраҡҡа һонолма. Кәрәкле ашамлыҡты эргәһендә ултырыусынан һорап ал. Ниндәйҙер аҙыҡ һиңә оҡшамай икән, уны насарлама. Өҫтәл артынан рәхмәт әйтеп тор.

● Текстан исемдәрҙе күсереп яҙ. Тартынҡыларҙың аҫтына һыҙ.

2. Байрам табынына нимәләр әҙерләп була?

ҡоймаҡ, бәлеш, сәксәк, шоколад, сәй, салат, һут, компот, билмән, былау, туңдырма, аш, котлет, кәнфит, балыҡ, торт

Әгәр һүҙгә һуҙынҡы өн менән башланған ялғау ҡушылһа, һүҙ аҙағындағы [ҡ]–[ғ], [к]–[г], [п]–[б] өндәре сиратлаша.

3. Һүҙҙәрҙе өлгө буйынса үҙгәртеп яҙ.

	ҡ → ғ	к → г	п → б
	минең	һинең	уның
ҡоймаҡ	ҡоймағым	ҡоймағың	ҡоймағы

беләк, тауыҡ, китап, карап, ҡолаҡ, йөрәк

? **4.** Йомаҡтың яуабын тап. Билдәләнгән һүҙҙәргә ялғау ҡушып, үҙгәрт.

Ҡыҫҡа **ҡойроҡ**, оҙон **ҡолаҡ**, йәйен һоро, ҡышын **аҡ**.

53. Әҙәп ҡағиҙәләре

1. Тексты уҡы. Ниндәй хаталар киткән? Төҙәтеп һөйлә.

Дуҫым сәғәт етегә саҡырһа ла, һуңлап килдем. Мин ингәндә, барыһы ла өҫтәл артына ултырған ине. Дуҫыма өҫ кейемдәремде тоторҙом да, ҡулымды ла йыуып тормай, буш урынға барып ултырҙым. Мин яратҡан «эклер» пирожныйы алыҫыраҡ булһа ла, һонолоп алдым. Һонолғанда күлдәгемдең осо сейә

ҡайнатмаһына буялды. Ауыҙымды шапылдата-шапылдата пирожныйҙы ашап ҡуйҙым. Ҡулға буялған кремды яланым. Бүләк тапшырғанда: «Иң шәп бүләкте мин алып килдем», – тинем.

2. Тексты уҡы.

Өләсәйем миңә бәләкәй саҡтан уҡ: «Иң изге һүҙ – «рәхмәт» һүҙе. Яңы көндө күреүгә, йылы ҡояш нурына, ябалаҡлап яуған ҡарлы иртәләргә, беҙҙе ҡыуандырып, шатландырып торған туғандарға, ҡыҫҡаһы, беҙҙе шатландырған һәр нәмәгә рәхмәт уҡыу кәрәк. Ни тиклем тирә-яҡтағы матурлыҡҡа, яҡтылыҡҡа, изгелеккә һоҡланып, ысын күңелдән рәхмәт әйтәһең, ул үҙеңә икеләтә, өслә әйләнеп ҡайта», – тип, рәхмәтле булырға өйрәтә ине.

- «Рәхмәт» һүҙе тураһында нимә уйлайһың?
- Халыҡта шундай әйтем бар: «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр». Уны һин нисек аңлайһың?

3. Уҡы. Һүҙҙәрҙе өлгө буйынса үҙгәртеп яҙ. Ниндәй тартынҡылар сиратлашты?

Өлгө: ҡурсаҡ – ҡурсағым.

йөҙөк, уйынсыҡ, көрәк, ҡалаҡ, яулыҡ, күлдәк, итек, бүрек, көсөк

4. Дуҫыңа тыуған көнгә ниндәй бүләк алып барыр инең?

5. Хаталарын төҙәтеп яҙ.

ҡалаһым, китапым, карапыбыҙ, бармаҡың, күлдәке

54. Дуҫтарым менән күңелле

1. Уҡы. Бәләкәс Булатҡа дуҫтарын һанарға ярҙам ит.

Булат тыуған көнөнә
Саҡырмаҡсы дуҫтарын,
Әле иҫәпләп ултыра
Нисә йән дуҫы барын.
Күрше ҡыҙы Кәримә,
Уны яҡын дуҫ күрә.
Тыуған көнөн ҡотларға
Аҡтырнағы ла инә.
Килә Сәлим һәм Ғәлим,
Ишмулла менән Кәрим.
«Мыяубикәм дә ҡалмай
Үҙемдән», – тине Әлим.
Йә, әйтегеҙ, дуҫтарым,
Һанап, нисә дуҫ барын.

(Зөһрә Кашапова)

Булат кемдәрҙе ҡунаҡҡа саҡырған? Орфограмманы иҫкә төшөр.

2. Һүҙҙәрҙе уҡы. Сағыштыр. Ни өсөн **ъ** һәм **ь** билдәләре яҙыла?

аръяҡ	алъяпҡыс	Аҡъял	альбом
бирьяҡ	мәсьәлә	Моьминә	коньки

Төп башҡорт һүҙҙәрендә **ъ** һәм **ь** билдәләре өн белдермәй. Әгәр һүҙҙең беренсе өлөшө ҡалын булһа – **ъ** билдәһе, нәҙек булһа **ь** билдәһе яҙыла.

3. Ике һүҙҙе ҡушып, яңы һүҙ яһап яҙ.

аҡ, ял; ҡул, яулыҡ; ал, япҡыс; аҡ, юл; йыл, яҙма; Хәбиб, Ямал; аш, яулыҡ; ҡул, яҙма; там, ян; аҡ, Юныс

4. Орфограммаға ярашлы һүҙҙе тап, аҫтына һыҙ.

алъяпҡыс, баҡсасы, Гөлйемеш, Аҡъяр, көньяҡ, мәсьәлә, ҡулъяулыҡ, Яхъя, Ильяс

55. Ҡәҙерле бүләк

1. Тексты уҡы. Кәңәштәр менән килешәһеңме?

Бүләктең ҙуры-бәләкәйе юҡ. Бүләкте ысын йөрәктән, **изге** теләктәр теләп бирергә кәрәк. Берәй **яҡшы** китап йә сувенир алырға була. Сәскә лә бик **һәйбәт** бүләк. Әгәр ҙә үҙ ҡулдарығыҙ менән тегеп, сигеп берәй әйбер бүләк итһәгеҙ, уның баһаһы айырыуса **ҙур**.

(«Мәктәп календары»нан)

- Билдәләнгән һүҙҙәргә синонимдар уйла.
- **Күлдәк, хушбуй, сувенир** һүҙҙәрендә ижек, хәреф, өн һанын, нисә тартынҡы һәм һуҙынҡы булыуын әйт.

2. Тексты уҡы. Тәржемә ит.

У меня сегодня день рождения. Я на день рождения позвала друзей. Мы пили чай с праздничным тортом, играли в настольные игры. Я показала гостям свой фотоальбом. Потом посмотрели интересный мультфильм.

3. Башҡорт алфавитын беләһеңме? Яттан һөйлә. Ул ни өсөн кәрәк?

1. Башҡорт алфавитында нисә хәреф? 2. Нисә һуҙынҡы? Ниндәй төрҙәргә бүленәләр? 3. Нисә тартынҡы?

Улар ниндәй төрҙәргә бүленәләр? 4. Ниндәй хәрефтәр өн белдермәй? 5. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре тураһында һөйлә.

4. Алфавитҡа ҡарап, башватҡысты сис.

2, 1, 34, 15, 20, 23, 26, 20, 24, 26, 1, 18

Үҙең дә башватҡыс төҙөп ҡара.

5. Уҡы. Һандарҙы һүҙҙәр менән яҙ.

Ер шарында төрлө алфавиттар бар. Башҡорт теленең алфавитында – 42, татар телендә – 39, рус телендә – 33, инглиз телендә 28 хәреф. Ҡайһы бер халыҡтар иероглифтар менән яҙалар. Япон телендә 15 мең иероглиф бар.

56. Минең дуҫтарым

1. Уҡы. Малайҙарҙың исемдәрен күсереп яҙ, составы буйынса тикшер.

Ултыра ине Ишбирҙе
Эскәмйәлә бер үҙе,
Йүгереп килде Илдар –
Улар ике булдылар.
Килеп ултырғас Илдус –
Малайҙар булдылар өс.
Килеп етте Абдулла –
Улар хәҙер дүрт була.
Бына килде Ишбулды –
Улар инде биш булды.
Алтау булды малайҙар –
Уйнарға сыҡҡас Айҙар.

Сағырҙылар Хәмитте –
Малайҙар булды ете.
Сыҡты өйөнән Илгиз –
Хәҙер малайҙар һигеҙ.
Килеп ҡушылды Урал –
Туғыҙ булдылар улар.
Юлай килгәс, булды ун,
Шунан башланды уйын!

(Хәтижә Ризуанова)

- Күмәк йыйылғанда ниндәй уйындар уйнайһығыҙ?
- Яңғыҙлыҡ исемдәр нисек яҙыла?

2. Уҡы. Бергәләп уйынды уйнарға өйрәнегеҙ.

«Һәпәләк» уйыны тұңәрәк эсендә бара. Берәү ҙә тұңәрәктән сығырға тейеш түгел. Һанашмаҡ әйтеп, «көтөүсе» һайлана. Уның күҙен яулыҡ менән бәйләйҙәр. Көтөүсегә һамаҡ әйтәләр:

Һуҡыр ағай, көтөп тор,
Ишек бауын тотоп тор,
Әбей бутҡа бешерә,
Бабай ашап бөтөрә,
Һыйырҙары баҡыра,
Бығауҡайын саҡыра.

Көтөүсе һыйыр булып баҡыра, ә ҡалғандар төрлө яҡҡа ҡаса. Көтөүсе уларҙы эҙләй. Тұңәрәктән сыҡһа: «Соҡорға төшәһең», – тип иҫкәртәләр. Ул кире борола. Көтөүсе кемде тота, шул яңы көтөүсе була.

- Текстан исемдәрҙе күсереп яҙ. Һорау ҡуй.

3. Һүҙҙәрҙе уҡы. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуй.

а..ас, б..ре, тур..ай, ру..ка, а..бур, ..айын, б..леш

4. Юлдағы һүҙҙәрҙе бер һүҙ менән әйт. Һорау ҡуй.

Айыу, бүре, тейен, терпе – …
Батмус, тәрилкә, сынаяҡ, сәнскә – …
Диван, карауат, өҫтәл, ултырғыс – …
Гладиолус, мәк, астра, георгин – …

57. Сәләм Өфөнән!

1. Һүрәттәрҙе һүҙҙәр менән алмаштырып, тексты тултырып уҡы.

Хат нисек сәйәхәт итә?

Ғәли өләсәһенә яҙҙы ла төшөрҙө. Уны хат ташыусы алып барҙы. Бында ҙур тоҡҡа һалдылар. уны килтерҙе. уны ауылға алып китте. Почтальон хаттарҙы таратты. Хатты алғас, ҡыуанды. Ейәненә посылка һалды.

- Посылка нисек килеп етер? Һөйлә.

2. Уҡы. Алыҫта йәшәгән туғандарыңа хат яҙ.

Һаумыһығыҙ, минең ҡәҙерле өләсәйем һәм олатайым! Һеҙгә күп сәләмдәр ебәреп хат яҙа ейәнегеҙ Самат. Атайым менән әсәйемдән, һеңлемдән дә һеҙгә ҙур сәләм. Вафа ағайыма, Фәйрүзә еңгәмә, Филүс менән Илдус ҡустыларыма ла сәләм.

Мин мәктәптә яҡшы ғына уҡыйым. Һеңлем балалар баҡсаһына йөрөй. Атайым менән әсәйем дә иҫән-һау эшләйҙәр.

Һеҙҙең хәлдәрегеҙ нисек? Ауырымайһығыҙмы? Ауылда ниндәй яңылыҡтар бар? Вафа ағайымдар ни хәлдә? Һеҙҙән хат көтәм.

Сәләм менән Самат ейәнегеҙ.

Ниндәй орфограммалар осраны? Аңлат.

3. Кем күберәк әйтер?

1. Кеше исемдәрен әйт. 2. Хайуан ҡушаматтарын әйт. 3. Йылға исемдәрен һана.

Исем – һүҙ төркөмө. **Кем? нимә?** һорауҙарына яуап бирә.
Кешенең исеме, фамилияһы, хайуан ҡушаматтары, тау, йылға, күл, ауыл, район, ҡала, ил атамалары – **яңғыҙлыҡ исемдәр**. Улар ҙур хәрефтән яҙыла.
Газета-журнал һәм уйын исемдәре ҙур хәреф менән тырнаҡтар эсендә яҙыла. Улар ҙа яңғыҙлыҡ исемдәр.
Хайуан, ҡош, предмет, үҫемлек, миҙгел, эш ҡоралдары, тәбиғәт күренештәре – **уртаҡлыҡ исемдәр**. Улар бәләкәй хәрефтән яҙыла.

58. Яратҡан уйынсығым

1. Шиғырҙы уҡы.

Йә Фәнилдә, йә миндә,
Йә изҙәндә, йә ерҙә.
Әй һикерә зәңгәр тубым,
Тик тора белмәй бер ҙә.
Беҙ арыһаҡ та, арымай,
Уйнап үткәрә көнөн.
Бер ырғытһаң, ун һикерә
Йылғыр тупҡайым минең.



(Гөлфиә Юнысова)

- Туп менән ниндәй уйындар уйнап була? Һанап сыҡ.
- Һин ниндәй уйынды яратып уйнайһың?

2. «Йәшерәм яулыҡ» уйынын уйнап ҡарағыҙ.

Балалар йыр йырлап түңәрәктә йөрөйҙәр. Ҡулдарын артҡа ҡуйғандар. Устары өҫкә табан асыҡ. Йырҙың һүҙҙәре:

Йәшерәм, йәшерәм яулығым
Йәшел ҡайын артына.
Һиҙҙермәйсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.

Тәүҙә һанашмаҡ әйтеп, «көтөүсе»не һайлайҙар. Көтөүсе түңәрәктең тышында яулыҡ тотоп йөрөй. Йыр башланғас, ул бер баланың ҡулына һиҙҙермәй генә яулыҡты һала һәм түңәрәккә тора. Кемдә яулыҡ ҡалған, көтөүсене баҫтыра һәм ҡулы менән уға тейергә тырыша. Тейһә, көтөүсе уйынды дауам итә. Теймәһә, кемдә яулыҡ, шул көтөүсе була.

- Уйын оҡшанымы?

3. Тексты уҡы. Төп фекер нимәлә? Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе тап.

Булат бөгөн бик шат. Был шатлыҡты уға «Йәншишмә» газетаһы килтерҙе. Газетала Булатты маҡтап яҙғандар, фотографияһын биргәндәр. Әсәһе бик ҡыуанды.

4. Уйынсыҡтар һүҙенең хәрефтәренән яңы һүҙҙәр төҙөп яҙ.

59. Дуҫым компьютер

1. Шиғырҙы уҡы. Фекереңде әйт.

Эй, компьютер, компьютер,
Һинән ҡыҙыҡлы юҡтыр!
Һиндә бар күпме уйын,
Тороп китеүе ҡыйын.
Кәрәкһә, мультик ҡара,
Иҫәплә, төшөр һүрәт.
Һине аңлап бөтөр өсөн,
Бик күп уҡырға кәрәк.

(Ғәлиә Ғәлиәскәрова)

2. Компьютерҙа эшләгәндә түбәндәге ҡағиҙәләргә иғтибар бир.

1. Бүлмәлә ныҡ яҡты ла, ҡараңғы ла булмаһын.
2. Тәҙрәгә ҡаршы ултырма.
3. Мониторҙы таҙа тот.
4. Күҙ менән экран араһы 50–60 сантиметр тирәһе булһын.
5. 15–20 минут һайын тәнәфес ойоштор.
6. Физик күнекмәләр яһа.

- Компьютерҙы нимә өсөн ҡулланаһың?
- Компьютер артында оҙаҡ ултырырға яраймы?

3. Таблицаны ҡара. Нимәне иҫеңә төшөрҙөң? Һөйлә.



4. Күплектә ниндәй ялғауҙар ҡушыла? Аҫтына һыҙ.

компьютер – компьютерҙар, ҡурсаҡ – ҡурсаҡтар, барабан – барабандар, ҡала – ҡалалар, бесәй – бесәйҙәр, көрәк – көрәктәр, биҙрә – биҙрәләр, имән – имәндәр

60. Дуҫым Аҡбай

1. Уҡы. Тексҡа исем бир. Ул нимә тураһында?

Ҡышын Булат мәктәпкә китте. Мәктәп күрше ауылда. Уның артынан Аҡбай эйәрҙе.

Көтмәгәндә буран башланды. Булат юлды юғалтты. Улар, оҙаҡ аҙашып йөрөгәндән һуң, урманға килеп инделәр. Арыған Булат ағас төбөнә ултырҙы. Аҡбай өрә башланы. Уның тауышы йыраҡҡа яңғыраны.

Утынға килгән Биктимер бабай атын эт өргән яҡҡа борҙо. Арыған Булатты ул ауылына алып ҡайтты. Тоғро дуҫы Булатты бәләнән ҡотҡарҙы.

Текстан яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе тап.

2. Таблицаны ҡара. Ниндәй һығымта яһап була?

Исемдәрҙең күплек ялғауҙары		
һүҙ аҙағында килгән хәрефтәр	ҡалын нигеҙгә (а, о, у, ы)	нәҙек нигеҙгә (ә, ө, ү, э(е), и)
л, м, н, ң, з, ж	-дар урамдар	-дәр илдәр
р, й, ҙ, у, ү, и	-ҙар шарҙар	-ҙәр көҙҙәр

3. Уҡы. Һүҙҙәргә күплек ялғауы ҡушып яҙ. Ниндәй һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙылған?

урман, урам, бесәй, Аҡбай, тел, ҡар, Дүрткүҙ, тау, ҡурай, ауыл, Алабай, күҙ

4. Көләмәсте уҡы.

– Ришат, һин яҙған эт тураһындағы инша тап апайыңдыҡы кеүек, – ти уҡытыусы. – Быны нисек аңларға?

– Ә һеҙ аптырамағыҙ, беҙҙең эт берәү генә.

61. Дуҫым Аҡйондоҙ

1. Тексты уҡы.

Ҡайһы бер аттарҙың маңлайында аҡ тамға була. Шуға кешеләр уларға Ҡашҡа, Йондоҙ, Аҡйондоҙ тигән ҡушамат бирәләр.

Минең атымдың ҡушаматы Аҡйондоҙ. Мин уға бесән, һоло бирәм. Һыу эсерергә йылғаға алып барам. Ялын тарайым.

- Күплектәге исемдәрҙе тап. Күсереп яҙ. Ялғауҙар аҫтына һыҙ.
- **Маңлай, һоло, тамға** һүҙҙәренә һорау ҡуй, күплек ялғауҙары ҡуш.

2. Уҡы. Ошо тексҡа оҡшатып үҙеңдең яратҡан йорт хайуаны тураһында һөйлә.

Бесәйем

Минең бесәйем һоро төҫтә. Уның ҡолаҡтары һаҡ, **оҙон** мыйыҡтары тырпайып тора. Бесәйемдең **йомшаҡ** туны ебәк кеүек йылҡылдай. Уның тырнаҡтары ҡоростай **үткер**, күҙҙәре **ут** кеүек янып тора.

Бесәйем иркә һәм хәйләкәр. Ул иркәләнеп мырылдай, күҙҙәрен **йома**, ҡойроғон болғай, һыртын көмрәйтә.

Көндөҙ бесәйем ҡояшта ҡыҙына, туйғансы йоҡлай, ә кисен һунарға сыға. Ул **төн** буйына сысҡандар ҡарауыллай.

(Константин Ушинский буйынса)

- Билдәләнгән һүҙҙәргә антонимдар уйла.
- Текстан күплектә торған исемдәрҙе табып, ялғауҙарын әйт.

3. Бирелгән һүҙҙәрҙе күплектә үҙгәртеп яҙ. Һүҙҙәргә һорау ҡуй.

дуҫ, ат, эт, бесәй, иптәш, ҡомаҡ, тутыйғош, себеш, алйырҙан, гөбөргәйел, балыҡ, бәрәс

? **4.** Һүҙҙәрҙә хәрефтәр аҙашҡан. Уларҙы урындарына ҡуй.

ЙЕӘСБ, ҺЫЫЙР, ООЛҠН, БЫУҘА, БӘӘРС, КӨӨКС

5. Таблицаны иғтибар менән өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Исемдәрҙең күплек ялғауҙары		
һүҙ аҙағында килгән хәрефтәр	ҡалын нигеҙгә (а, о, у, ы)	нәҙек нигеҙгә (ә, ө, ү, э(е), и)
а, я, ә, ы, э, е, о, ө	-лар оялар	-ләр өкөләр
б, в, г, д, к, ҡ, п, ҫ, с, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ	-тар китаптар	-тәр бәрәстәр

62. Ысын дуҫ ниндәй була?

1. Тексты уҡы.

Урман буйлап ике иптәш китеп барған. Уларҙың алдына ҡапыл **айыу** килеп сыҡҡан. Иптәштәрҙең береһе ағас башына менеп киткән. Икенсеһе **юл** уртаһында ҡалған. Ул ергә ятып, үлгәнгә һалышҡан. Айыу уның янына килгән. Битен, сәсен еҫкәгән дә кире киткән.

Айыу киткәс, иптәше ағас башынан төшкән дә көлөп һорай икән:

– Айыу һинең ҡолағыңа ни тине?

– Ҡурҡыныс килгәндә иптәшен ташлап киткән кеше – насар кеше, тип әйтте айыу миңә, – тигән икенсе иптәш.

(Лев Толстойҙан)

- Текст һине нимәгә өйрәтә?
- Билдәләнгән һүҙҙәргә күплек ялғауҙары ҡушып яҙ. Таблицаға ҡарап, тикшер.
- Тексҡа ниндәй мәҡәл тап килә:

1. Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.
2. Дуҫлыҡ бәлә килгәндә һынала.

2. Медаль, автомобиль, класс һүҙҙәренә күплек ялғауы ҡуш. Нимәгә иғтибар иттең? Ҡағиҙәне уҡы.

> **Ҡуш тартынҡыға** бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда бер тартынҡы төшөп ҡала: металл – металдар.
> **Нәҙеклек билдәһенә** бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда нәҙеклек билдәһе төшөп ҡала: педаль – педалдәр.

? **3.** Һүҙҙәргә күплек ялғауы ҡушып яҙ. Башҡорт теленең орфография һүҙлегенән үҙеңде тикшер.

двигатель, кросс, слесарь, якорь, грипп, грамм, октябрь, июль, класс, балл, апрель

? **4.** Дуҫлыҡ тураһында мәҡәлде уҡыр өсөн, алфавитты иҫеңә төшөр. Һандар хәрефтәрҙең алфавиттағы урыны менән тап килә.

6, 27, 25, 31, 37, 7 | 14, 8, 34, 8 –
15, 1, 18, 1, 26, 31, 37, 7 | 15, 20, 34.

- Дуҫлыҡ тураһында тағы ниндәй мәҡәлдәр беләһең?

63. Атайҙар байрамы

1. Тексты уҡы.

23 Февраль – Ватанды һаҡлаусылар көнө. Был байрам 1922 йылдан башлап билдәләнә. Байрам менән олатайҙарҙы, атайҙарҙы, ағайҙарҙы, ҡустыларҙы ҡотлайҙар.

- Күплектә килгән исемдәрҙе күсереп яҙ. Ялғауҙарҙың аҫтына һыҙ.
- Һин был байрам менән кемдәрҙе ҡотлайһың? Ҡотлау открыткаһы яҙ.

2. Шиғырҙы уҡы.

Атайымдың ғүмерендә тотонмаған,
Эшләмәгән эше ҡалманы.
Ат дағаһы һынһа – ул тимерсе,
Мейес емерелһә – мейессе,
Өҫтә кейем туҙһа – ул тегенсе,
Кәрәк икән, булды итексе.
Әммә уның иң яратҡан
Төп кәсебе булды игенсе.
Оло эргәһендә оло булды,
Кесе эргәһендә ул кесе.

(Нәжип Иҙелбай)

- Ниндәй һөнәрҙәр тураһында уҡының?
- **Кәсеп** һүҙенең синонимын әйт.
- Атайҙар байрамы тип ниндәй байрамды әйтәбеҙ?
- Ниңә автор атаһы тураһында «булды» тип һөйләй?

Һүҙҙең нигеҙе **ҙ** хәрефенә бөткән исемдәргә **-ҙар, -ҙәр, т** хәрефенә бөткән исемдәргә **-тар, -тәр** күплек ялғауҙары ҡушыла. Һүҙҙә ҡуш тартынҡы барлыҡҡа килә: ҡыҙ – ҡы**ҙҙ**ар, ат – а**тт**ар.

3. Һүҙҙәргә күплек ялғауҙары ҡушып яҙ, ҡуш тартынҡылар аҫтына һыҙ.

ҡанат, ҡаҙ, күҙ, ваҡыт, ауыҙ, бит, йорт, болот, үгеҙ

? **4.** Мәҡәлдәрҙе уҡы. Мәғәнәһен аңлат.

1. Атанан күргән уҡ юнған. 2. Атай булмай, атайҙың ҡәҙерен белмәҫһең.

64. Әсәйҙәр байрамы

1. Уҡы.

Малай әйтә, беҙҙең әсәй
Тиҙҙән осорға китә.
Әсәй беҙҙең, лётчик булғас,
Гел осоп хеҙмәт итә.
Бына, әйтәйек, Коляның
Милиционер әсәһе.
Инженерҙар – Толяның да,
Вераның да әсәһе.
Доктор апай – дауалаусы,
Мәктәптә бар уҡытыусы.
Төрлө әсәләр кәрәк!
Әсәләр булһын күберәк!

(Сергей Михалковтан)

- Ниндәй һөнәр оҫталары тураһында уҡының?
- 8 Март байрамы менән кемдәрҙе ҡотлар инең?

Исемдәр килеш менән үҙгәрәләр. Башҡорт телендә алты килеш бар: **төп, эйәлек, төбәү, төшөм, урын-ваҡыт, сығанаҡ.** Төп килеш **кем? нимә?** һорауына яуап бирә. Уның ялғауы булмай.

2. Күсереп яҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе эйәлек килештә үҙгәрт.

Һигеҙенсе март –
Әсәйҙәр байрамы.
Бүләк итермен
Сәскә бәйләме.
Нисек табырға,
Ҡайҙа сәскә бар?

Бөтә **ерҙе** лә
Ҡаплаған аҡ **ҡар.**
Әсәйгә **шиғыр**
Яҙҙым бүләккә.
«Ғүмергә, – тине, –
Ҡалыр йөрәктә»

(Флорида Нуруллина)

3. Таблицаны өйрән. Нимәләр белдең? Һөйлә.

Эйәлек килеш	кемдең? нимәнең?	
	ҡушыла	
исемдәрҙең аҙағында килгән хәрефтәр	ҡалын тамырға (а, о, у, ы)	нәҙек тамырға (ә, ө, ү, э(е), и)
а, я, ә, ы, э, е, о, ө	-ның ҡаланың -ноң ҡойоноң	-нең терпенең -нөң төлкөнөң
б, в, г, д, к, ҡ, п, ҫ, с, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ	-тың аяҡтың -тоң боттоң	-тең әтәстең -төң төптөң
л, м, н, ң, з, ж	-дың томандың -доң болондоң	-дең елдең -дөң көндөң
р, й, ҙ, у, ү, и	-ҙың шарҙың -ҙоң тоҙҙоң	-ҙең сирҙең -ҙөң көйҙөң

4. 8 Март менән ҡотлап открытка яҙ. Уны өлгөгә ҡарап яҙырға була.

Һөйөклө әсәйем!

Һине яҙҙың матур байрамы – 8 Март менән ҡотлайым (тәбрик итәм, тәбрикләйем)!

Әсәйем! Һиңә оҙон ғүмер, ҡыуаныс-һөйөнөстәр теләйем! Эштәрең уң, йөҙөң көләс, күңелең көр булһын! Ауырыма!

Ә мин һине гел шатландырырға тырышырмын.

Улың Алмас.

5. Таблицаға ҡарап, исемдәрҙе эйәлек килештә ҡуйып яҙ.

ҡайын, йүкә, ҡош, оя, шәкәр, ил, төлкө, ҡолон, сәскә, трактор

65. Сақырыу ҡағыҙы

1. Сақырыу нисек яҙыла? Уҡы, үҙең дә сақырыу яҙып ҡара.

Ҡәҙерле әсәкәйем!

Һине 8 Март – ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә арналған байрамға сақырам.

Байрам 7 март, иртәнге 10-да башлана.

Улың Ринат.

- Сақырыу ҡағыҙын ниндәй байрамдарға яҙырға мөмкин?

2. Уҡы. Тексҡа исем бир. План төҙө һәм һөйлә.

Бөгөн 8 Март байрамы. Фәрит йоҡонан иртә торҙо. Кистән ул әсәһенә бүләккә сәскә әҙерләп ҡуйған ине.

– Хәйерле иртә, әсәй! Һине байрам менән ҡотлайым. Һаулыҡ һәм шатлыҡтар теләйем, – тип, ул әсәһенә сәскә бүләк итте. Унан көндәлеген асып, әсәһенә үҙенең билдәләрен күрһәтте. Көндәлектә тик «бишле»ләр генә теҙелеп тора ине.

Әсәһе сикһеҙ шатланды. Ул улын ҡосаҡлап:

– Рәхмәт, балаҡайым! Мине бик нык ҡыуандырҙың! Үҙеңә лә һаулыҡ, бәхет теләйем, – тине.

- **Кемгә? нимәгә?** һорауҙарына яуап булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

3. Һүҙҙәрҙе төбәү килештә ҡуйып яҙ.

Өфө, әсәй, вокзал, бүләк, сәскә, ҡунаҡ, магазин, атай, ҡусты, ауыл

4. Таблицаны өйрән. Нимәләр белдең? Һөйлә.

Төбәү килеш	кемгә? нимәгә?	
	ҡушыла	
исемдәрҙең аҙағында килгән хәрефтәр	ҡалын тамырға (а, о, у, ы)	нәҙек тамырға (ә, ө, ү, э(е), и)
а, я, ә, ы, э, е, о, ө	-ға ҡалаға	-гә терпегә
б, в, г, д, к, ҡ, п, ҫ, с, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ	-ҡа шарфҡа	-кә һөткә
л, м, н, ң, з, ж	-ға гаражға	-гә имәнгә
р, й, ҙ, у, ү, и	-ға тауға	-гә көтөүгә

5. Исемдәргә һорау ҡуй. Килештәрҙе билдәлә.

Бөгөн мәктәптә ҙур байрам үтте. Байрамға әсәйҙәр килде. Беҙ уларға матур бүләктәр әҙерләнек. Әсәйҙәргә арнап йырҙар йырланыҡ, шиғырҙар һөйләнек. Ҡыҙҙарҙың бейеүе әсәйҙәргә бик нығ оҡшаны.

66. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Уҡы. Исем бир. Текстың планын төҙөп, һөйләргә әҙерлән.

Атаһы улының насар иптәштәр менән йөрөгәнен һиҙеп ҡала.

– Улым, – ти, – улар менән дуҫлашма: улар һине аламалыҡҡа өйрәтер!

– Дөрөҫ, – ти улы, – улар насар кешеләр, ләкин минең арҡала төҙәлһендәр өсөн, юрамал улар менән йөрөйөм.

Шул саҡ атаһы бер нисә серек алма ятҡан кәрзинде ала, улар араһына бер алһыу алма менән таҙа таш һала.

Өс көн үтә. Таҙа алма ярты һына тиклем серегән, ә таш үҙгәрмәгән.

– Күрҙеңме? Әгәр һин ошо таш кеүек ныҡ булһаң, үҙ теләгеңде тормошҡа ашыра алырһың. Әгәр ҙә инде алма кеүек йомшаҡ булһаң, үҙең насар иптәштәр араһында боҙолорһоң, – ти атаһы улына.

(Лев Толстойҙан)

● Дуҫлыҡ тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһең? Текстан синонимдарҙы, антонимдарҙы, омонимдарҙы тап.

2. Тексты уҡы. Заманса бәйләнеш сараларын ҡулланғанда нимәне белергә кәрәк? Һөйлә.

Кеҫә телефоны, электрон почта, скайп ҡулланғанда ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк:

1. Һәр һөйләшеүҙе иҫәнләшеүҙән башла.
2. «Һеҙ» тип аралашырға өйрән.
3. СМС алһаң, яуапты тиҙ ҡайтар.
4. Хатаһыҙ яҙ.

● Хат яҙыу ҡағиҙәләрен иҫеңә төшөр. Хатты нимәнән башлайҙар?

? **3. Аҡ** һүҙенән башланған хайуан ҡушаматтарын иҫеңә төшөр. Кем күберәк табыр?

4. Үҙеңдең яратҡан йорт хайуаны тураһында һөйлә.

5. Ғаиләгеҙ тураһында һөйлә.

1. Ғаиләгеҙҙә нисә кеше? 2. Уларҙың исемдәре нисек? 3. Нимә менән шөғөлләнәләр? 4. Өйҙә нимә эшләргә яраталар? 5. Уларға нимә теләйһең?

VI бүлек. Мине уратып алған донъя

67. Нимә ул тәбиғәт?

1. Уҡы.

Донъяла төрлө илдәр бар. Бер ил – үҙенең тауҙары, икенсеһе – далалары, өсөнсөһө – һыуҙары, дүртенсеһе урмандары менән дан тота. Ә Башҡортостанда шуларҙың барыһы ла бар.

Урал... Күҙ алдына **бейек** ҡаялар, йәшел урмандар, **һалҡын** шишмәләр, сәскәле аҡландар килеп баҫа.

Урал... Данлы Ағиҙелебеҙ, **етеҙ** Ҡариҙелебеҙ **киң** далаларға ҡарай ашыға. Ашҡаҙар, Дим, Һаҡмар, Сәрмәсән, Танып, Еҙем, Эйек кеүек йылғалар тыуған яҡтың йәмен тыуҙыра.

(Мостай Кәримдән)

- Текстан күплек һанда торған һүҙҙәрҙе табып, уҡы.
- Билдәләнгән һүҙҙәрҙең синонимдарын тап.
- Текстан яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ.

2. Схема буйынса тәбиғәт тураһында һөйлә?



3. Таблицаны өйрән. Нимәләр белдең? Һөйлә.

Төшөм килеш	кемде? нимәне?	
	ҡушыла	
исемдәрҙең аҙағында килгән хәрефтәр	ҡалын тамырға (а, о, у, ы)	нәҙек тамырға (ә, ө, ү, э(е), и)
а, я, ә, ы, э, е, о, ө	-ны ҡаланы -но ҡойоно	-не терпене -нө төлкөнө
б, в, г, д, к, ҡ, п, ҫ, с, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ	-ты аяҡты -то ботто	-те әтәсте -тө төптө
л, м, н, ң, з, ж	-ды томанды -до болондо	-де елде -дө көндө
р, й, ҙ, у, ү, и	-ҙы шарҙы -ҙо тоҙҙо	-ҙе сирҙе -ҙө көйҙө

4. Һүҙҙәрҙе төшөм килештә үҙгәртеп яҙ.

тау, йылға, күл, алтын, баҡыр, Танып, Сәрмәсән, ҡош, балыҡ, үҫемлек, үлән, урман, тәбиғәт

5. Уҡы.

Күл кемдеке?
Күл кемдеке?
Ҡанатлы елдекеме?
Наҙлы томбойоҡтоҡомо?
Һулымаҫ гөлдөкөмө?

Күл кемдеке?
Күл кемдеке?
Шаян ҡолондоҡомо?
Ҡарсығалы тауҙыҡымы?
Хәтфә болондоҡомо?

(Абдулхаҡ Игебаев)

- Шиғырҙа бирелгән һорауҙарға яуап бир.
- Бөтә ижектәрендә лә **о—ө** хәрефе яҙылған һүҙҙәрҙе тап. Уларҙа нисә ижек? Был ниндәй ҡағиҙә? Иҫеңә төшөр.

68. Тауҙар илендә

1. Тексты уҡы.

Урал – мөһабәт тауҙар, текә ҡаялар, көмөш йылғалар, саф һыулы шишмәләр, һайрар ҡоштар иле.

Уралтау һыртының көнбайышында бейек-бейек түбәләр күрербеҙ. Уларҙың иң ҙурҙары – Ямантау, Ирәмәл, Баштау. Иң әре һырттар инһә Машаҡ, Әүәләк, Өрөнгө менән Тағанай, Елмерҙәк. Тауҙарҙың башында йәй урталарына тиклем ағарып ҡар ята.

(«Тормош һабаҡтары» китабынан)

- Тау исемдәрен күсереп яҙ. Юлдан юлға күсерерлек итеп ижектәргә бүл.
- Текстан күплектә торған исемдәрҙе табып, уҡы.

2. Таблицаны өйрән. Нимәләр белдең? Һөйлә.

Урын-ваҡыт килеш	кемдә? нимәлә?	
	ҡушыла	
исемдәрҙең аҙағында килгән хәрефтәр	ҡалын тамырға (а, о, у, ы)	нәҙек тамырға (ә, ө, ү, э(е), и)
а, я, ә, ы, э, е, о, ө	-ла балала	-лә сейәлә
б, в, г, д, к, ҡ, п, ҫ, с, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ	-та тупта	-тә көрәктә
л, м, н, ң, з, ж	-да яланда	-дә күлдә
р, й, ҙ, у, ү, и	-ҙа айыуҙа	-ҙә күҙҙә

? **3.** Йомаҡтарҙы сис. Урын-ваҡыт килештә торған һүҙҙәрҙе тап.

1. Һиндә бар, миндә бар, миңдә юҡ. 2. Урманда бар, ҡырҙа юҡ, мунсала бар, өйҙә юҡ.

4. Ҡобайырҙы уҡы. Тағы ла Уралтауҙа нимә күп? Дауам ит.

Ай Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым.
Сыңыр-сыңыр сыңраған
Йылҡыһы күп Уралтау;
Мөңөр-мөңөр мөңрәгән
Һыйыры күп Уралтау;
Кәкре ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Уралтау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау…

● **Йылҡы, һыйыр, бүре, ҡуян** һүҙҙәрен урын-ваҡыт килештә үҙгәрт, ижек, хәреф, өн һандарын билдәлә.

69. Төйәгемдә йылғалар күп

1. Уҡы.

Башҡортостандың иң ҙур йылғаһы – Ағиҙел. Уның оҙонлоғо 1420 километр. Ул Ирәмәл тауынан башланып, Кама йылғаһына тиклем етә.

Ағиҙелгә уң яҡтан Нөгөш, Эҫем, Ҡариҙел, Бөрө, Танып ҡоя. Ә һул яҡтан Ашҡаҙар, Өршәк, Дим, Ҡармасан, Сәрмәсән, Баҙы, Сөн йылғалары килеп ҡушыла.

● Башҡортостан картаһынан был йылғаларҙы тап.
● Йылға атамалары нисек яҙыла?
● Һеҙҙең ауыл (ҡала) янынан ниндәй йылғалар аға?

2. Таблицаны өйрән. Нимәләр белдең? Һөйлә.

Сығанаҡ килеш	кемдән? нимәнән? ҡайҙан?	
	ҡушыла	
исемдәрҙең аҙағында килгән хәрефтәр	ҡалын тамырға (а, о, у, ы)	нәҙек тамырға (ә, ө, ү, э(е), и)
а, я, ә, ы, э, е, о, ө	-нан йоманан	-нән кәмәнән
б, в, г, д, к, ҡ, п, ҫ, с, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ	-тан туптан	-тән көрәктән
л, м, н, ң, з, ж	-дан яландан	-дән күлдән
р, й, ҙ, у, ү, и	-ҙан айыуҙан	-ҙән күҙҙән

3. Тексты уҡы. Ниндәй файҙалы мәғлүмәт белдең?

Ағиҙел – республикабыҙҙың иң ҙур йылғаһы. **Халыҡ** уны яратып Иҙел тип кенә йөрөтә. «Иҙел бит ул тәрән бит ул, Иҙел бит ул киң бит ул», – тип йырлайҙар. «Иҙел» һүҙе боронғо төрки телендә «һыу, йылға» тигәнде аңлата. Был һүҙ башҡа йылғаларҙың атамаларында ла нәҡ ланған: Ҡариҙел, Күгиҙел (Димдең боронғо атамаһы), Күгәҙел, Иҙел (Волга), Сулман Иҙел (Каманың башҡорттар ҡушҡан атамаһы).

(«Мәктәп календары»нан)

- Күплектә бирелгән исемдәрҙе күсереп яҙ, ялғауҙар аҫтына һыҙ.
- **Ағиҙел, Ҡариҙел, Күгиҙел** һүҙҙәре ниндәй тамырҙарҙан яһалған?

4. Һүҙҙәрҙе сығанаҡ килештә үҙгәрт. Ике һөйләм төҙө.

Инйәр, Урал, Әй, Уй, Һаҡмар, Таналыҡ, Ҡыҙыл, Эйек, Йүрүҙән, Эҫем, Дим, Танып

5. Уҡы. Яттан яҙырға әҙерлән.

Төйәгемдә йылғалар күп,
Төп йылғабыҙ – Ағиҙел.
Халҡым өсөн – йәншишмә һин,
Көмөш һыуың аҡһын гел!

(Нияз Сәлимов)

70. Түңәрәк күл туғайҙа

1. Тексты уҡы.

Баймаҡ районында Талҡаҫ, Күлтабан күлдәре бар. Әбйәлил – Яҡтыкүл, Сыбаркүл, Ҡарабалыҡлы күлдәре менән дан тота. **Йылҡысыҡҡан** күлен Бөрйән **районында** күрергә була. Бөрө районында **Шәмсетдин** күле **ҡурсалауға** алынған. Ғафури районында Аҡкүл, Дәүләкәндә Асылыкүл, Ҡырмыҫҡалыла Ҡыйышҡы исемле күлдәр бар. **Ишембайҙағы** Туғар-Салған күле районда иң матуры. Иң ҙур күлдәрҙең береһе – Ҡандракүл – Туймазы районында **урынлашҡан.**

- Күл исемдәрен күсереп яҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙе табып, тамырҙарын билдәлә.
- Билдәләнгән һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп яҙ, баҫым ҡуй.

2. Таблицаға ҡарап, **кәрәҙ, бит, көрт, Азат, ҡаҙ, эт, болот** һүҙҙәрен килештәрҙә үҙгәрт.

Эйәлек килеш	Төшөм килеш	Ур.-ваҡ. килеш	Сығанаҡ килеш	Төп килеш күплектә
кемдең?	кемде?	кемдә?	кемдән?	кемдәр?
ҡыҙҙың	ҡыҙҙы	ҡыҙҙа	ҡыҙҙан	ҡыҙҙар
Сәғиттең	Сәғитте	Сәғиттә	Сәғиттән	Сәғиттәр
нимәнең?	нимәне?	нимәлә?	нимәнән?	нимәләр?
ҡаҙҙың	ҡаҙҙы	ҡаҙҙа	ҡаҙҙан	ҡаҙҙар
сәғәттең	сәғәтте	сәғәттә	сәғәттән	сәғәттәр

3. Уҡы.

Түңәрәк күл

Түңәрәк күл, түңәрәк күл,
Түңәрәк күл туғайҙа.
Ебәк ҡамыш, һыуы көмөш –
Ундай күлдәй күл ҡайҙа?

Күл өҫтөндә тәңкә-тәңкә
Томбойоҡ сәскәләнә.
Алтын балыҡ, һик(е)реп-
һик(е)реп,
Ҡояшта иркәләнә.

(Халыҡ йыры)

● Йыр нимә тураһында? Йырҙы йырларға өйрән. **Нимә? ниндәй?** һорауҙарына яуап булған һүҙҙәрҙе табып уҡы.

71. Йәшел алтын

1. Уҡы.

Урман – тирә-яҡҡа йәм бирә, һауаны саф һәм шифалы итә. Ул кешеләрҙе еләк-емештәр, бәшмәктәр менән туйындыра. Хайуандар ҙа бында үҙҙәренә төйәк һәм аҙыҡ таба.

Урманды янғындан, ҡоротҡостарҙан һаҡлайыҡ. Урманда йөрөгәндә ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк: усаҡ яғырға, сүпләргә, ағастарҙы һындырырға ярамай.

Ауылдарҙа, ҡалаларҙа һәр яҙ һайын ағастар, сәскәләр ултырталар. Был эштә балалар ҙа ҡатнашалар.

- Урманда ниндәй ҡағиҙәләрҙе үтәргә кәрәк? Күсереп яҙ.
- **Тирә-яҡ, еләк, бәшмәк, аҙыҡ, төйәк, усаҡ** һүҙҙәрен **нимәгә?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәрт. Орфограмманы әйт.

2. Уҡы. Исемдәрҙе табып, һорау бир.

Матур һин, Урал,
Юҡ ерҙә тиңең,
Йондоҙҙарың да
Аҫыл таш һинең.
Тауҙарың бейек,
Урманың йәмле,
Шишмәләреңдең
Һыуҙары тәмле.

(Кәтибә Кинйәбулатова)

3. Һүҙҙәрҙе **нимәгә?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәрт.

күлдәк, ҡармаҡ, һандыҡ, усаҡ, көрәк, аяҡ, ҡолаҡ, бармаҡ, икмәк, тирәк, тоҡ, ҡоймаҡ

72. Йәйге йәмле болонда

1. Тексты уҡы.

Башҡортостан үҫемлектәргә бай. Унда ағастар, ҡыуаҡтар, үләндәр, сәскәләр үҫә.

Ниндәй үләндәрҙе беләһең? Йорт алдына сыҡ. Һин тәүҙә баҫҡан үлән – ул бәпкә үләне. Ҡойма буйында кесерткән уңған. Картуф баҡсаһында сүп үләндәре – алабута менән билсәнде осратырһың.

● Ниндәй үлән исемдәрен белдең?

★★ ● Ағас, ҡыуаҡ, сәскә исемдәрен кем күберәк белә?

Парталашың менән ярыш ойоштор.

2. Һүҙҙәрҙе күплектә ҡуй, төбәү килештә үҙгәрт.

ҡайын, йүкә, гөлйемеш, мәтрүшкә, ағас, үлән, ҡарағай, баҡса, сәскә

! **3.** Күплектәге исемдәргә ниндәй ялғауҙар ҡушыла? Ялғау ниндәй хәрефтән башлана?

Эйәлек к.	хайуандарҙың	үҫемлектәрҙең	сәскәләрҙең
Төбәү к.	хайуандарға	үҫемлектәргә	сәскәләргә
Төшөм к.	хайуандарҙы	үҫемлектәрҙе	сәскәләрҙе
Урын-ваҡыт к.	хайуандарҙа	үҫемлектәрҙә	сәскәләрҙә
Сығанаҡ килеш	хайуандарҙан	үҫемлектәрҙән	сәскәләрҙән

4. Күплектәге исемдәрҙе табып, ялғауҙарының аҫтына һыҙ.

Роза сәскәле үҫемлектәрҙең йөҙҙән ашыу сорты бар. Төҫтәре лә төрлө-төрлө: аҡ, ҡыҙыл, ҡыҙғылт, көрән ҡыҙыл, һары, һарғылт…

Ул ябай үҫемлектән – гөлйемештән таралып киткән. Уны әлморон тип тә йөрөтәләр.

Гөлйемеш Башҡортостандың бөтә райондарында ла үҫә. Ул бик шифалы. Гөлйемештән төрлө дарыу, витаминдар эшләйҙәр.

(Сәфәрғәли Йәнтүриндән)

73. Дарыу үләндәре

1. Һүрәттәрҙе ҡара. Был ниндәй үләндәр?

юл япрағы



мәтрүшкә

һары мәтрүшкә

меңьяпраҡ

әрем

аҡ сәскә

- Был үләндәр тураһында нимә беләһең? Һөйлә.
- Өйҙә интернеттан ҡарап йәки ололарҙан һорашып был үҫемлектәрҙең файҙаһы тураһында белеп кил.

2. Тексты уҡы. Һөйләргә әҙерлән.

Меңьяпраҡ беҙҙә бөтә ерҙә лә үҫә. Уның һабағы оҙон, төҙ. Япраҡтары бик күп өлөшсәләргә бүленгән. Исеме ошонан алынған. Уның сәскәләре аҡ йәки алһыу төҫтә. Улар ваҡ ҡына булалар. Меңьяпраҡ төнәтмәһе **ашҡаҙан** ауырыуҙарын дауалай.

- Билдәләнгән һүҙҙәр ниндәй тамырҙарҙан яһалған?
- **Оҙон, төҙ, аҡ, ваҡ** һүҙҙәренә антонимдар тап.

3. Уҡығыҙ. Нимә ул дарыу үләне?

– Был ниндәй үлән?
– Был – күк сәй (мәтрүшкә). Ул дарыу үләне.
– Үлән дарыу буламы?
– Эйе. Уны һыуыҡ тейгәндә сәй итеп эсәләр.

4. Һорауҙарға яуап яҙ.

1. Мәтрүшкәне ҡасан йыялар?
2. Уҡыу йылы ҡасан башлана?
3. Китаптарҙы ҡайҙа һалдың?

Һүҙ **-ль, -нь, -брь** хәрефтәренә бөтһә – нәҙек, **-рь** хәрефенә бөтһә ҡалын ялғау ҡушыла, нәҙеклек билдәһе (ь) төшөп ҡала: июлдә, сентябрҙә, лагерға.

5. Һүҙҙәргә күплек һәм төбәү килеш ялғауҙары ҡушып яҙ. Өс һөйләм төҙө.

календарь, циркуль, автомобиль, токарь, слесарь, фонарь, лагерь, мебель, июнь, нуль, шампунь

74. Йәшел аптека

1. Тексты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

– Әйҙә, мин һине йәшел аптекаға алып барам, – тине миңә өләсәйем.

– Ә ҡайҙа ул йәшел аптека?

– Урманда, яланда. Ул аптека һәр ваҡыт асыҡ, дарыуҙары күп.

Беҙ урманға килеп еттек. Ҡайын еләге бешкән саҡ. Күп итеп еләк йыйҙыҡ.

– Ҡайын еләге бик файҙалы, туйғансы аша! – тине өләсәйем. – Ул С витаминына бик бай, кеше организмын ауырыуҙарҙан һаҡлай. Бөйөрҙәрең дә таҙарыр.

Силәктәр тулды. Ҡайтыр алдынан һары, күк мәтрүшкәләр йыйып алдыҡ. Өләсәйем ҡайын еләгән генә түгел, уның япрағын да йыйған икән.

– Хәҙер өйгә ҡайтып, урман сәйе ҡайнатып эсербеҙ, – тине ул.

(«Мәктәп календары»нан)

- Нимә ул йәшел аптека?
- Ҡылымдарҙы күсереп яҙ. Уларға һорау ҡуй.
- Ҡылымдар нимә аңлата? Рус теле менән сағыштыр.

2. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуйып яҙ.

Микро..ҡа ҡаршы дары..
Табылмаҫ унан арыу.
..арымһаҡ менән ..уған
Һиңә ҡулдарын һу..ған.
Бер ниндәй ҙә сирҙәр йоҡмаҫ,
Улар менән дуҫ булһаң.

(Зөһрә Ҡотлогилдина)

● **Дарыу, сир, йоҡмаҫ, табылмаҫ** һүҙҙәренең мәғәнәһен башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән табып уҡы. **Йоҡмаҫ, табылмаҫ** һүҙҙәренең тамырын, ялғауын билдәлә.

3. Таблица буйынса ҡылым тураһында һөйлә.



4. Тексты уҡы. Ҡылымдарҙы тап. Һорау ҡуй. Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?

Һары мәтрүшкәнең төнәтмәһен халҡын тейгәндә ҡайнатып эсәләр. Тамаҡ шешкәндә, ауыҙ эсе боҙолғанда йылымыс төнәтмә менән тамаҡты, ауыҙҙы сайҡаталар. Янған, шешкән урындарҙы был төнәтмә яҡшы дауалай. Һары мәтрүшкә яраны тиҙ уңалта.

75. Ҡыр хайуандары

1. Тексты уҡы. Ҡылымдарҙы тап. Һорау ҡуй.

Ҡоралайҙы ҡыр кәзәһе тип тә йөрөтәләр. Улар урманда, тигеҙ һәм таулы урындарҙа йәшәйҙәр. Ҡоралайҙар бик һаҡ һәм ҡурҡаҡтар. Ләкин кешегә бик тиҙ эйәләшәләр.

Ҡоралай – бик һөйкөмлө хайуан. Уның күҙҙәре ҙур, матур. Йөнө асыҡ көрән төҫтә, арҡаһында эреле-ваҡлы аҡ таптар бар, ҡойроғо ҡыҫҡа.

Ял иткәндә лә ҡоралайҙың ҡолағы тыңғылыҡ бел-мәй. Ул төрлө яҡҡа боролоп тора. Ят тауыш ишеткәндә ҡолаҡтары тиҙ-тиҙ ҡыбырлай. Дошмандарынан ҡора-лайҙы оҙон, етеҙ аяҡтары ҡотҡара.

Ҡоралайҙарҙы һаҡла. Улар тәбиғәттә матурлай.

(Иван Заянчковскийҙан)

Ни эшлә? һорауы үтенесте, берәй хәрәкәтте, эште үтәргә ҡуша, бойора: бар, кил.

Тамыр (нигеҙ) һүҙгә **-ма, -мә** ялғауҙары ҡушы-лып, **ҡылымдың юҡлыҡ формаһы** барлыҡҡа килә: бар – барма, кил – килмә.

2. Ҡылымдарға ялғау ҡушып яҙ.

Мин (ни эшләйем?) уҡый…, шаяр…, рәсем төшөр…, футбол уйнай…, йүгер… .

Һин (ни эшлә?) уҡы, …

3. Ҡылымдарҙы юҡлыҡ формала ҡуйып яҙ. Юҡлыҡты белдергән ялғауҙар аҫтына һыҙ.

Ни эшлә? – йый, аша, һаҡла, йолҡ, тор, бар, ҡара, ултыр, уҡы.

Ни эшләмә? – йыйма, …

4. Башватҡыстан хайуан атамаларын табып, улар менән һөйләмдәр төҙө.

у	б	ү	р	е	д	ж	и
ы	т	е	й	ф	ө	а	р
й	ө	н	е	и	й	т	а
а	л	к	ө	л	ә	е	ф

76. Ат – кешенең дуҫы

1. Тексты уҡы. Исемдәрҙе, ҡылымдарҙы табып, уларға һорау бир.

Ҡамыр батыр йүгәнен шылтыратҡан. Был юлы ла шул уҡ тай боролоп ҡараған.

«Миңә яҙғаны ошолор инде», – тип уйлаған Ҡамыр батыр һәм тайға теләмәй генә йүгән кейҙергән. Тай бик ныҡ һелкенгән дә һылыу ҡонанға әйләнгән. Әйәр һалғас, дүнәнгә әйләнгән. Ҡамыр батыр әйәр өҫтөнә атланып ултырғас, дүнән – толпарға, ә егет батырға әйләнгән.

(Зәйнәб Биишеванан)

2. Тексты уҡы. Һәр һөйләмдә әйә менән хәбәрҙе тап һәм аҫтына һыҙ. Ҡылымдарға һорау ҡуй.

Башҡорттар аттарҙы дөйөм атамаһы менән йылҡы тип йөрөтәләр. Аттарҙы йәше буйынса айыралар. Бер йәшкә тиклем – ҡолон, икенсе йәшкә киткәне тай тип атала. Аттарҙы башҡорттар төҫтәре буйынса ла айыралар: аҡбуҙ, буҙ, ерән, күк.

(Аҫылғужа Баһумановтан)

Ат, ҡолон, тай һүҙҙәрен килештәрҙә үҙгәрт.

3. Тамыр (нигеҙ) ҡылымдарҙы өлгө буйынса үҙгәрт.

Өлгө: Ул (ни эшләй?) – бара.
Мин (ни эшләйем?) – барам.

бар, йоҡла, ултыр, уйна, һөйлә, эшлә, ят, яҙ, әйт, һана, уҡы, һыҙ, йөҙ, тап, ҡайт

4. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Ҡылымдың хәҙерге заман берлек һаны			
һорау	һүҙ	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
		а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э(е)
ул ни эшләй?	тарт. бөтһә һуҙ. бөтһә	ал+а аша+й	бир+ә йөрө+й
мин ни эшләйем?	тарт. бөтһә һуҙ. бөтһә	ҡарай+ым ала+м	һөйләй+ем бирә+м

5. Бирелгән ҡылымдарға **-ма, -мә** ялғауҙары ҡушып яҙ. Ниндәй форма барлыҡҡа килде? Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә ит. Өс һөйләм төҙө.

йүгер, аша, эс, ят, йөрө, йөҙ, көл, бар, кил, ҡайт, ал, баҫ, ултыр, йөрөт, айыр, уйна, эшлә, яҙ

6. Ниндәй ат ҡушаматтарын беләһең? Яҙ.

77. Ҡымыҙ – файҙалы эсемлек

1. Уҡы.

Башҡорттар борон-борондан ҡымыҙ яһаған. Башҡорт ҡымыҙының даны бөтә донъяға таралған.

Ҡымыҙ бик файҙалы эсемлек. Ул аппетитты күтәрә, ҡан составын яҡшыртa, нервы системаһын нығыта.

Башҡортостанда Йоматау, Шафран, Аксаков, Чехов исемендәге шифаханаларҙа ҡымыҙ менән төрлө ауырыуҙарҙы дауалайҙар.

- Ҡымыҙ эскәнең бармы? Оҡшанымы? Уның ниндәй файҙаһы бар?
- **Ни эшләй?** һорауына яуап биргән ҡылымдарҙы табып яҙ.

2. Эйә менән хәбәрҙең аҫтына һыҙ. Ҡылымдың ялғауҙарын билдәлә.

1. Мин бөгөн паркта ял итәм (ни эшләйем?). 2. Беҙ һәр саҡ йәкшәмбе шулай паркта ял итәбеҙ (ни эшләйбеҙ?). 3. Һин компьютерҙа уйнайһың (ни эшләйһең?). 4. Һеҙ спорт майҙансығында футбол уйнайһығыҙ (ни эшләйһегеҙ?)

3. Таблицаға анализ яһа. Ҡылым ялғауҙары ҡасан ҡалын, ҡасан нәҙек киләләр?

Ҡылымдың хәҙерге заман берлек һаны		
һорау	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
	а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э(е)
һин ни эшләйһең?	ҡарай+**һың**	бирә+**һең**
Ҡылымдың хәҙерге заман күплек һаны		
беҙ ни эшләйбеҙ?	ҡарай+**быҙ**	бирә+**беҙ**
һеҙ ни эшләйһегеҙ?	ҡарай+**һығыҙ**	бирә+**һегеҙ**

4. Таблицаға ҡарап, түбәндәге һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушып яҙ. Һанын әйт.

Мин ни эшләйем? эсә..., йыуа..., уйнай...

Һин ни эшләйһең? ултыра..., йыуа..., һорай..., ярата..., ҡатнаша...

Беҙ ни эшләйбеҙ? уҡый..., күтәрә..., яһай..., йоҡлай..., күрә...

Һеҙ ни эшләйһегеҙ? дауалай..., килә..., эсә..., бара..., ял итә...

78. Ҡанатлы дуҫтар

1. Тексты уҡы. Ҡоштар ни өсөн йылы яҡҡа китә?

Сентябрь етеү менән, күсмә ҡоштар алыҫ юлға йыйына башлайҙар. Яр ҡарлуғастары, һарығоштар беренсе булып китәләр. Ай аҙағында ҡыр ҡаҙҙары, өйрәктәр көньяҡҡа юл тоталар. Өсмөйөш булып торналар оса. Ә вағыраҡ ҡоштар һиҙҙермәй генә юҡ була. Ни өсөн? Сөнки улар төнөн генә осалар. Көндөҙ ял итәләр.

Октябрҙә Башҡортостандан йылы яҡта ҡышлаусы һуңғы ҡоштар осоп китә. Киткән ҡоштарға алмашҡа ҡыҙылтүш, бүрекле турғай килә. Ҡарабаш турғайҙар йорт тирәһендә йышыраҡ күренә. Йәйен улар бөжәктәр менән туҡлана. Октябрҙә үк ҡанатлы дуҫтарҙы ашата башларға кәрәк.

(Евгений Кучеров буйынса)

2. Хикәйәне уҡы. Һөйлә.

Һин дөйәғош тураһында ишеткәнең бармы? Дөйәғош Африкала йәшәй. Ул донъялағы иң **ҙур** ҡош. Дөйәғоштоң **бейек**леге 3 метрға, **оҙон**лоғо 2 метрға етә. Ә **ауыр**лығы 75 килограмм тарта. Йоморткаһы кило ярымға етә.

Дөйәғоштоң ҡанаттары бик бәләкәй. Шуға күрә ул **оса** алмай. Дөйәғош шәп **йүгерә**. Был ҡош сәғәтенә 120 километр үтә ала.

Дөйәғош ҡулға **тиҙ** эйәләшә. Уға **йыш** ҡына һарыҡ көтөргә ҡушалар. Ҡош аттан да нығыраҡ тибә.

(«Мәктәп календары»нан)

- Ҡылымдарҙы күсереп яҙ. Һорау ҡуй. Һанын әйт.
- Билдәләнгән һүҙҙәргә антонимдар уйла.

3. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Ҡылымдың хәҙерге заман күплек һаны			
һорау	һүҙ	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
улар ни эшләйҙәр?		а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э(е)
	тарт. бөтһә һуҙ. бөтһә	уйлай+ҙар бара+лар	көрәй+ҙәр йөҙә+ләр

4. Ҡылымдарҙы таблица буйынса үҙгәрт.

оса, сүплә́й, ҡағына, саҡыра, суҡый, ҡора, сығара, ҡарҡылдай, ҡаңғылдай, һыҙыра

79. Ҡап, балығым, ҡармаҡҡа!

1. Тексты уҡы.

Малайҙар ҡармаҡ һала башланылар. Тәүҙә балыҡ арыу сиртте. Айҙар менән Ғабдулла байтаҡ балыҡ тоттолар. Яҡуп ҡына берҙе лә тота алманы. Сөнки ул, балыҡ емде ҡымтығас та, ҡармағын ҡапыл тарта.

Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгән һайын, балыҡ һирәгерәк сиртә башланы. Балыҡсылар бер нисә тапҡыр күсеп тә ҡаранылар, ләкин балыҡтар, һүҙ бирешкәндәй, ҡапманы.

(Мостай Кәрим буйынса)

- Текстан ҡылымдарҙы тап, уларға һорау бир.
- Исемдәрҙе табып, һанын, килешен билдәлә.

2. Һүрәттәрҙе ҡара. Һин был балыҡтарҙы беләһеңме? Һүҙлектән уларҙың руссаға тәржемәһен тап.



алабуға



ҡорман



йәйен



табан

суртан

● Был һүҙҙәрҙә ижек, хәреф, өн һандарын билдәлә.

ⓘ **3.** Таблицаны ҡара, орфограмманы иҫеңә төшөр. Тамырында **о—ө** өндәре булған һүҙҙәр уйлап, өлгө буйынса үҙгәрт.

ни эшлә?	төҙө	соҡо
ни эшләй?	төҙөй	соҡой
ни эшләйем?	төҙөйөм	соҡойом
ни эшләйһең?	төҙөйһөң	соҡойһоң
ни эшләйбеҙ?	төҙөйбөҙ	соҡойбоҙ
ни эшләйһегеҙ?	төҙөйһөгөҙ	соҡойһоғоҙ
ни эшләйҙәр?	төҙөйҙәр	соҡойҙар

80. Бөжәктәр файҙалымы?

1. Уҡы. Тексҡа исем бир. Һөйлә.

Ҡырмыҫҡалар зарарлы бөжәктәрҙе юҡ итәләр. Тупраҡты йомшарталар, унда органик матдәләр индерәләр. Ҡырмыҫҡа иләүе янында ағастар яҡшыраҡ үҫә. Бер иләү ҡырмыҫҡа йәй буйы дүрт-биш миллион бөжәкте үлтерә.

● Ҡылымдарҙы күсереп яҙ, һорау ҡуй.

2. Тексты уҡы. Исемдәрҙең һанын, килешен билдәлә.

Бал ҡорто, 100 грамм бал йыйыу өсөн, бер миллион сәскәне осоп әйләнеп сыға. Ул сәғәтенә 65 километр юл үтә. Бал ҡортоноң тиҙлеген шәп йөрөүсе поезға тиңләргә була. Бал татлы аҙыҡ ҡына түгел, унда алтмыштан артыҡ шифалы матдә бар.

(«Мәктәп календары»нан)

3. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Ҡылымдың хәҙерге заман берлек һаны			
һорау	һүҙ	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
		а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э(е)
улар ни эшләгән?	һуҙ. бөтһә яңғ. тарт. бөтһә наң. тарт. бөтһә	уйла+ған яҙ+ған ҡайт+ҡан	телә+гән күр+гән кит+кән

4. Ҡылымдарға **-ған, -гән, -ҡан, -кән** ялғауҙары ҡушып яҙ.

нат, үлсә, ал, кил, ҡара, тарат, бешер, ҡыҙҙыр, ҡайнат, атлама, ишетмә, ҡой, тек, кит

5. Ниндәй бөжәк атамалары йәшенгән? Килеп сыҡҡан һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә ит. Был һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөп яҙ.

ҺАҒЫҘАҠЫРМЫҪҠАМҠА

81. Ағастар – урман йәме

1. Тексты уҡы.

Бына урман. Ниндәй генә ағастар юҡ бында! Урман ситендә ап-аҡ ҡайындар, йәшел уҫаҡтар, хуш еҫле йүкәләр, мөһабәт имәндәр үҫә. Эскә ингән һайын, тотош стена булып ҡуйы шыршылар китә.

Йәйен урман шаулай һәм тирбәлә. Ҡоштар һайрауы, япраҡ шаулауы күңелле бер моң тыуҙыра.

(«Мәктәп календары»нан)

- Ҡылымдарҙы күсереп яҙ, һорау ҡуй, һанын билдәлә.

2. Ҡылымдарҙы **ни эшләне?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәртеп яҙ. Орфограмманың аҫтына һыҙ.

Өлгө: китә – китте.

китә, үҫә, тота, бешә, аса, ҡайта, тарта, көтә, эсә, бөтә, шаулай, сайҡала, ҡойола, яра, ҡоя

3. Тексты уҡы. Исем бир. Һорауҙар төҙө. Һөйләргә әҙерлән.

Ҡарағай – бик файҙалы ағас. Уның ылыҫы витаминдарға бай. Ҡарағай бөрөһөнән дарыу эшләйҙәр. Был ағастан йорттар һалалар. Йорт 100–150 йыл серемәй тора. Кешеләр ҡарағайҙан ҡағыҙ, яһалма ебәк, йөн, капрон эшләргә өйрәнделәр. Унан скрипка ла яһайҙар.

(«Башҡортостан уҡытыусыһы» журналынан)

- Текстан исемдәрҙе тап. Уларҙың һанын, килешен билдәлә.
- Ҡылымдарға һорау ҡуй.

4. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Ҡылымдың үткән заман берлек һаны					
һорау	һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			
		а, о, у, ы	о–о	ә, ө, ү, и, э(е)	ө–ө
ул ни эшләне?	к, ҡ, п, с, ҫ, т, ш	ас+ты	тот+то	киҫ+те	төш+тө

5. Таблицаға ҡарап, ҡылымдарға ялғауҙар өҫтә. Ике һөйләм төҙөп яҙ.

ултырт, киҫ, һип, ҡырҡ, үҫ, быс, һал, һайра

6. Тексты уҡы. Өҫтәлмә мәғлүмәт йый, сығыш яһарға әҙерлән.

Ер шарында иң бейек ағас булып секвойя тора. Уның бейеклеге – 113, диаметры 35 метр. Секвойя 6 мең йыл йәшәй тип иҫәпләнә. Иң оҙаҡ йәшәүсе ағас – Америка шыршыһы. Ул 8 мең йылға тиклем йәшәй.

(«Мәктәп календары»нан)

82. Сәскәләр нур сәсәләр

1. Тексты уҡы.

Сәскәләр телен беләм,
Улар менән һөйләшәм.
Иртән торғас, хәл белешеп,
Сәләм биреп өндәшәм.
Сүп үләне баҫып алһа,
Ҡотҡарсы беҙҙе, тиҙәр.

Сәскәләрҙең рәхмәттәрен
Еткерә миңә елдәр.
Яҙҙан алып көҙгә тиклем
Баҡса гөлгә күмелә.
Донъябыҙҙы матурлағас,
Рәхәт беҙҙең күңелгә.
Ҡояш нык итеп ҡыҙҙырһа,
Гөлдәр минән һыу һорай.
Һыуҙа ҡойоноп алғас та
Күккә йылмайып ҡарай.

(Зөһрә Ҡотлогилдина)

- Ҡылымдарҙы күсереп яҙ. Һорау ҡуй. Ялғауҙар аҫтына һыҙ.
- **Сәскәләрҙең, ҡыҙҙырһа, йылмайып** һүҙҙәренең тамырын, ялғауын билдәлә.
- **Ҡояш, еткерә, донъя** һүҙҙәрендә өн, хәреф һанын билдәлә.

2. Ҡылымдарҙы **ни эшләне?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәртеп яҙ.

тирбәлә, көлә, килә, тотона, ҡала, һала, төшөнә

! **3.** Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Ҡылымдың үткән заман берлек һаны					
һорау	һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			
		а, о, у, ы	о–о	ә, ө, ү, и, э(е)	ө–ө
ул ни эшләне?	л, м, н, ң	ҡал+ды	йом+до	шиң+де	көл+дө

4. Таблицаға ҡарап, **ни эшләне?** һорауына яуап бирерлек итеп ҡылымдарға ялғауҙар өҫтәп яҙ.

сәскә шиң..., бәпембә күҙен йом..., томбойоҡ сәскә ат..., ләлә һулы..., мәк тажын ҡой...

83. Тәбиғәтте һаҡлайыҡ!

1. Тексты уҡы.

Тәбиғәт **яҡлауға** һәм һаҡлауға мохтаж. **Урмандарҙы** иҫәпһеҙ киҫеү, йылғаларҙы, күлдәрҙе бысратыу, унда ау менән балыҡ тотоу, **урманда** ҡош-ҡортҡа һәм **кейеккә** һунар итеү тыйыла.

Йылға, күл буйҙарында, ҡырҡылған **урындарға** ағас ултыртыу, улар ҡороманһын, яҡшы үҫһен өсөн төрлө саралар күреү мотлаҡ. Бындай мөһим **эштәрҙә** уҡыусы **балаларҙың** ҡатнашыуы бик тә кәрәк. **Тәбиғәтте** һаҡлайыҡ! Был – беҙҙең бөтәбеҙҙең дә изге бурыс.

(Ноғман Мусиндан)

- Ҡылымдарҙы күсереп яҙ. Һорауҙар ҡуй.
- Билдәләнгән исемдәрҙең килешен, һанын әйт.

2. Таблицаны анализла. Нимәләр белдең? Һөйлә.

Ҡылымдың үткән заман берлек һаны					
һорау	һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			
		а, о, у, ы	о–о	ә, ө, ү, и, э(е)	ө–ө
ул ни эшләне?	р, ҙ, й, у, ү	бар+ҙы	тор+ҙо	теҙ+ҙе	төр+ҙө

3. Ҡылымдарҙы **ни эшләне?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәрт.

бара, күрә, тора, бешерә, ултыра, эсерә, бирә, төшөрә, тора, ҡоя, утай, йомшарта, ҡаҙа, һибә

4. Уҡы. Ағас исемдәрен күсереп яҙ. Һуҙынҡыларҙы тикшер.

Үҫентеләр алып ҡайтҡан
Урмандан олатайым.
Мин ағастар ултыртам:
Өләсәйемә – муйыл,
Олатайға – ҡара миләш.
Әсәйем сейә ярата,
Уға сейә ултыртам,
Ә ағайым Уралға
Ике йүкә ултыртам.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина)

5. Уҡы. Һәр һөйләмдә әйә менән хәбәрҙе табып, һорау ҡуй.

Урман эсендә ут яғыу тыйыла. Бик кәрәк булған осраҡта, асыҡ урында соҡор ҡаҙып, урын әҙерләйҙәр. Усаҡты ағастарға яҡын яҡмайҙар, сөнки ут ағас тамырҙарын, ботаҡтарын яндыра. Ул, ҡоро ботаҡтарҙан өҫкә үрләп, башҡа ағастарға күсергә мөмкин. Утты ҡоро ағастар йәки ылыҫлы йәш урман эргәһендә лә яҡмайҙар. Аҙаҡтан усаҡты һыу һибеп һүндерәләр йәки тупраҡ менән күмәләр. Көлдө һәм шырпыны ла тирә-яҡҡа ташлау тыйыла.

(«Мәктәп календары»нан)

84. Йәйге хәтирәләр

1. Тексты уҡы.

Июль – йылдың иң эҫе айы. Был айҙа көн ҡыҫҡара бара, ә һауа температураһы көндән-көн күтәрелә. Халыҡ июлде «йәшенле ай» тип атай. Төрлө емеш-еләк: ҡарағат, ҡурай еләге, сейә өлгөрә.

(Евгений Кучеровтан)

- Ҡылымдарҙы күсереп яҙ. Һорауҙар ҡуй. Ялғауҙарын билдәлә.
- Уларҙы **ни эшләне?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәрт.
- **Июнь, август** һүҙҙәрен килештәрҙә үҙгәрт. Ниндәй орфограмманы хәтереңә төшөрҙөң?

2. Шиғырҙы уҡы.

Йомарт йәй

Йәй беҙҙең алға
Ашъяулыҡ йәйҙе,
Ашамлыҡтарын
Мул итеп өйҙө.
Йәнең ни теләй,
Төрлөләре бар:
Ер еләгенең
Эреләре бар.

Ул сейә, алма,
Бик күп бөрлөгән,
Ҡара ҡарағат
Һәм дә суҡ муйыл.
Барыһынан да
Беҙ ауыҙ иттек.
Һый-хөрмәтенә
Ҙур рәхмәт әйттек.

(Сөләймән Муллабаев)

- Ни өсөн шиғыр «Йомарт йәй» тип атала?
- Емеш-еләк атамаларын күсереп яҙ, күплек ялғауҙары ҡуш.
- Ни өсөн **ашъяулыҡ** һүҙендә **ъ** яҙыла? Аңлат.

3. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Ҡылымдың үткән заман берлек һаны					
һорау	һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			
		а, о, у, ы	о–о	ә, ө, ү, и, э(е)	ө–ө
ул ни эшләне?	а, о, ы, ә, ө, е	ҡара+ны	ҡоро+но	бейе+не	йөрө+нө

4. Ҡылымдарҙы **ни эшләне?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәртеп, ялғауҙар ҡушып яҙ.

ҡояш күтәрел…, елəктəр беш…, ашлыҡтар өлгөр…, ямғырҙар яу…, үләндәр үҫ…, алмалар ҡыҙар…, биҙрәләр тул…, бесəндəр сабыл…, йəшелсəләр йыйыл…

? **5. Йə, йе, йо, йө, йы, йү** ижектәре булған һүҙҙәр уйлап яҙ. Ике һөйләм төҙө.

85. Атлай тышта көҙ

1. Уҡы.

Бер, ике, өс…
Атлай тышта көҙ.
Эҙҙәре алтын,
Һулышы һалҡын.
Күлдәр бойоға,
Томан ҡуйыра.
Ел елә туҙып,
Көҙ көйөн һуҙып.
Тынды бал ҡорто,
Һыуынғас йорто.

Ағастар – ҡаҡса,
Шыр ҡалды баҡса.
Әйтерһең, ергә
Түгелгән аҡса.
Һары япраҡтар
Ҡойолған шулай.
Болот баҫҡан күк
Йәш түгеп илай.
Бер, ике, өс…
Атлай тышта көҙ.

(Муса Ғəли)

- Ҡылымдарҙы тап, һорау бир. Һанын, заманын билдәлә.
- Күсмә мәғәнәне аңлатҡан һүҙҙәрҙе әйәреп килгән һүҙҙәре менән табып уҡы.

2. Һүҙҙәргә тейешле ялғауҙар өҫтәп, күсереп яҙ.

Йылд…(нимәнең?) ҡайһы миҙгеле матур? Быны әйтеүе ауыр. Һәр миҙгел…(нимәнең?) үҙ матурлығы бар. Ҡыш…(ҡасан?) ер аҡ юрған ябына. Балалар санала, саңғыла шыу…(нимә эшләйҙәр?). Көҙ мул уңыш бир…(нимә эшләй?). Яҙ һәм йәй әйтеп бөтөргөһөҙ гүзәл. Шулай ҙа кешеләр…(кемдәрҙең?) күбеһенә йәй оҡшай.

3. Таблицаға ҡарап, һүҙҙәрҙе үҙгәрт.

ни эшләгән?	ҡурҡ+ҡан	сиҡ+кән
ни эшләне?	түҙ+ҙе	киҙ+те

төрт, сыҡ, болғат, яҙ, һөрт

4. Һорауҙарға яуап бирерлек итеп, һүҙҙәрҙе үҙгәртеп яҙ. Орфограмманың аҫтына һыҙ.

Ни эшләгән? яҡ…, асыҡ…, һуҡ…, ҡырҡ…, ҡаҡ…, таҡ…, сыныҡ…

Ни эшләне? түҙ…, ят…, тот…, һыҙ…, теҙ…, өҙ…, көт…, бөт…

5. Һүҙҙәрҙең антонимдарын табып яҙ.

тор, һыҙ, ас, аша, һөйлә, уҡы, йүгер, атла, кил, сыҡ

86. Көҙгө байлыҡ

1. Уҡы.

Көҙ апай килә **баҙарҙан,**
Нимә генә алмаған!
Ниндәй бүләк кәрәклеген,
Әйтмәһәң дә, аңлаған.
Ҡайындарға – һары яулыҡ,
Миләшкә – ҡыҙыл мунсаҡ,
Сейәгә – көрән алҡалар,
Ал да ҡолағыңа таҡ.
Алһыу, йәшел **буяуҙарҙы**
Биргән алма, ҡыярға.
Бөрлөгән ҡыҙыл **мәрйенен**
Белмәй ҡайҙа ҡуйырға.

(Айһылыу Йәғәфәрова)

- Исемдәрҙе тап. Һанын, килешен әйт.
- Ҡылымдарҙың заманын, һанын билдәлә.
- **Ниндәй?** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табып, күсереп яҙ.
- Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын тап.

2. Таблицанан сифат тураһында нимә белдең? Ул рус телендә нисек атала? Һөйлә.

Сифат — һүҙ төркөмө

предметтың билдәһен аңлата

ниндәй?	ҡайһы?	ни төҫлө?
яҡты	һуңғы	йәшел

3. Тексты уҡы. Һөйлә.

Сентябрь, октябрь, ноябрь – көҙ айҙары. Көҙ көнө көндәр ҡыҫҡара, төндәр оҙая. Ҡайын, йүкә, саған ағастары япраҡтарын ҡоялар. Һалҡын ямғырҙар яуа. Һыуыҡ елдәр иҫә. Ҡоштар йылы яҡҡа осалар. Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар ғына ҡала. Ҡуяндар, тейәндәр һәм башҡа йәнлектәр йөндәрен алмаштыра. Баҫыуҙа уңыш йыйыу тамамлана. Көҙ аҙағында төньяҡтан беҙгә ҡыҙылтүштәр осоп килә.

- Ҡылымдарға һорау ҡуй.
- Һәр һөйләмдә әйә менән хәбәрҙе табып, һорау ҡуй. Тиң киҫәктәр бармы?

4. Уҡы. Сифаттарҙы күсереп яҙ. Тамырын билдәлә. Улар нисек яһалған?

тоҙло, ҡурҡаҡ, ҡояшһыҙ, ҡарлы, күлдәкле, тәмһеҙ, көсһөҙ, болотло, ҡышын, көҙөн, йылы, һалҡын

87. Беҙҙең яҡта ҡыш

1. Тексты уҡы. Сифаттарҙы күсереп яҙ. Уларға һорау ҡуй.

Кискә ҡаршы талғын ғына ҡар яуа башланы. Тәүге ҡар! Оҙаҡҡа һуҙылған ҡара көҙ ап-аҡ ҡышҡа әйләнә. Йыл миҙгелен үҙгәртеү өсөн күп нәмә кәрәкмәй! Ҡар болотоноң ер өҫтөнән бер елпенеп үтеүе етә. Күҙ асып йомған арала сөм ҡара ер өр-яңы донъяға әүерелә.

(Мостай Кәрим буйынса)

- Сифаттар ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән? Уларҙың аҫтына һыҙ.

2. Шиғырҙы уҡы. Сифаттарҙы тап һәм уларға һорау бир.

Ҡар һибелә йылҡылдап.
Бер бөртөгө йондоҙҙай,
Бер бөртөгө түңәрәк.
Бер бөртөгө көмөштәй,
Бер бөртөгө күбәләк.

(Сәйфи Ҡудаштан)

● **Түңәрәк, күбәләк, биҙәк** һүҙҙәрен берлектәге заттарҙа үҙгәрт. Орфограммаһын әйт.

ⓘ **3.** Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Сифаттың төп дәрәжәһе	Сифаттың сағыштырыу дәрәжәһе		
	һүҙ	һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
		а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э(е)
ҡара, әсе, ал, оҙон, еңел, төҙ	һуҙ. бөтһә тарт. бөтһә	ҡара+раҡ ал+ыраҡ оҙон+ораҡ	әсе+рәк еңел+ерәк төҙ+өрәк

● Рус телендә сағыштырыу дәрәжәһе нисек атала? Ул нисек яһала? Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итеп, өлгө буйынса үҙгәр-теп яҙ.

Өлгө: ҡара – ҡара+раҡ, чёрный – черн+ее.

йәшел, текә, күк, ҙур, бейек, тәпәш, аҡ

4. Сифаттарға сағыштырыу дәрәжәһе ялғауҙарын ҡушып яҙ. Ниндәй орфограммалар иҫкә төштө?

йомро, аҡ, әсе, ҙур, ҡыҙыл, бейек, һоро, тоҙло, ҡыҫҡа

88. Көн ниндәй?

1. Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, көн торошо тураһында һөйлә.

яҡшы, насар; йылы, һыуыҡ, эҫе; ямғырлы, ҡарлы; аяҙ, болотло, томанлы; дымлы, ҡоро; елле, елһеҙ; сыуаҡ, ҡояшлы

2. Шиғырҙы уҡы. Баш киҫәктәрҙе билдәлә.

Күк күкрәй, әйтерһең дә,
Бейек тауҙан таш ауа.
Күк күкрәй, ер тетрәй,
Ямғыр күнәкләп яуа.

Ямғыр үтте, йәйғор ҡалҡты,
Ташты йылға һыуҙары.
Ә күләүек-тәҙрәләрҙә
Уйнай ҡояш нурҙары.

(Ҡадир Әлибаев)

- Ҡылымдарға һорау ҡуй, заманын, һанын билдәлә.
- **Ямғыр, йәйғор, бейек** һүҙҙәрендә нисә ижек, хәреф, өн бар?

3. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.



4. Рус телендә артыҡлыҡ дәрәжәһе нисек атала? Ул нисек яһала? Бирелгән һүҙҙәрҙе тәржемә итеп, өлгө буйынса үҙгәрт.

Өлгө: оҙон – ныҡ оҙон, длинный – очень длинный.

еңел, төҙ, ҙур, матур, ҡыҙыл, йәшел, һалҡын, оҙаҡ

89. Ҡышҡы уйындар

1. Тексты уҡы. Сифаттарҙы табып, аҫтына һыҙ, һорау ҡуй.

Ниндәй күңелле
Саңғыла шыуыуы.
Шаулап, көлөшөп
Ҡарҙа аунауы.

Ап-аҡ булдыҡ беҙ,
Хас та Ҡыш бабай.
Аптырап, беҙҙе
Күҙләй бер малай.

(Зәлиә Әхмәтова)

2. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Сифаттың аҙһытыу дәрәжәһе

һүҙҙең беренсе ижеге +ғылт, +гелт, +ҡылт, +келт +һыу, +һеү, +һыл, +һел

ғына, генә
ҡына, кенә

бергә яҙыла

ҡыҙғылт
алһыу

айырым яҙыла

һалҡын ғына
йыуаш ҡына

3. Сифаттарҙы аҙһытыу дәрәжәһендә яҙ.

кесе, төҙ, ҡаты, оҙон, еүеш, һай, йоҡа, оло, уҫал, һары, көрән, һары, йомшаҡ, зәңгәр, ҡара

4. Ҡыш, ҡар һүҙҙәрендәге һуҙынҡыны алмаштырып, яңы һүҙҙәр уйла. Нисә һүҙ табырһың?

5. Һүрәткә ҡарап, хикәйә яҙ.

90. Бына яҙ ҙа етә

1. Тексты дөрөҫләп уҡы.

Бәләкәй генә күләүектәр йыйыла. Турғайҙар яҙ һыуын тәмләй. Малдар ҡояшта ҡыҙына. Ҡош-ҡорт сыр-сыу килә.

Ҡар аҫтынан ҡара ер сыға. Ерҙең ҡеүәтле күкрәгенән быу күтәрелә. Ҡалҡыу урындарҙа ер кибә. Беҙ шунда туп уйнайбыҙ.

Ҡояш нығыраҡ йылыта башлай. Ҡар ирей. Ҡояш өй ҡыйыҡтарына боҙ алҡалар элә. Тамсы тама. Ҡояш нурҙарында улар ем-ем итә, йәйғорҙо хәтерләтә.

- Тарҡау һөйләмдәрҙе йыйнаҡ һөйләмдәргә әйләндер.
- Сифаттарҙы күсереп яҙ, дәрәжәһен билдәлә.
- **Быу, ерҙең, ҡояш** һүҙҙәрендәге тартынҡыларға характеристика бир.

Алмаш – һүҙ төркөмө. Ул исемдәрҙе, сифаттарҙы алмаштыра.

2. Эйәләрҙең аҫтына һыҙ. Исем ниндәй һүҙ менән алмаштырылған?

1. Ҡояш ҡалҡты. Ул ергә нур һибә. 2. Балалар мәктәптә уҡыйҙар. Улар белем алалар. 3. Нәғим, дәресеңде әҙерләнеңме? Һин күнегеүҙе яҙҙыңмы?

3. Уҡы. Һөйләмдәрҙән алмаштарҙы тап. Һорау ҡуй. Алмаш һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?

1. Мин баҡсала эшләйем. 2. Ул сыйырсыҡ ояһы элә. 3. Һин түтәл ҡаҙаһың. 4. Беҙ ағас ултыртабыҙ. 5. Һеҙ сүп өйәһегеҙ. 6. Улар орлоҡ сәсәләр.

4. Шиғырҙы уҡы.

Ҡыштың ап-аҡ дәфтәренә
Яҙ яҙа шиғырҙарын.
Ел ҡәләме елеп йөрөй,
Һирпеп ҡояш нурҙарын.

(Рәми Ғарипов)

91. Яҙғы байрамдар

1. Тексты уҡы.

Яҙ – байрамдарға бай миҙгел. Иң тәүге байрам – Һигеҙенсе март. Был көндө бөтә ҡатын-ҡыҙҙарҙы байрам менән ҡотлайҙар.

Яҙын Космонавтика көнө, Беренсе май һәм Бөйөк Еңеү байрамдары була. Башҡорттар яҙын милли байрамдар ҙа үткәрәләр. Уларға Науруз байрамы, Кәкүк сәйе, Ҡарға бутҡаһы, Һабантуй инә.

- Байрам атамаларын күсереп яҙ. Орфограмманы әйт.
- Һиңә ниндәй байрам нығыраҡ оҡшай? Һөйлә.

2. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Зат алмаштары					
берлек һан			күплек һан		
1-се зат	2-се зат	3-сө зат	1-се зат	2-се зат	3-сө зат
мин	һин	ул	беҙ	һеҙ	улар

3. Рус телендә заттар бармы? Улар нисек атала? Тәржемә ит.

Берлектә:

1-се зат (мин) –
2-се зат (һин) –
3-сө зат (ул) –

Күплектә:

1-се зат (беҙ) –
2-се зат (һеҙ) –
3-сө зат (улар) –

4. Тейешле зат алмаштарын ҡуйып, һөйләмдәрҙе уҡы. Улар ниндәй һүҙ төркөмөн алмаштырған?

1. … уҡырға барам. 2. … икмәк һатып алаһың. 3. … иртәгә ял итә. 4. … баҡсала эшләйбеҙ. 5. … ҡыяр сәсәһегеҙ. 6. … сыйырсыҡ ояһы яһайҙар.

5. Мәҡәлдең мәғәнәһен аңлат.

Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра.

92. Еңеү байрамы

1. Тексты уҡы.

Бөйөк Еңеү

Сыуаҡ май – сағыу гөлдәр, яҡты йөҙҙәр, оло байрамдар айы...

Ошо иң оло байрамдарҙың береһе – Бөйөк Еңеү – 9 Май! Атай-олатайҙарыбыҙ, фашизмға ҡаршы яуға ҡалҡып, илебеҙҙе һаҡлап алып ҡалды. Был байрам ҡыуаныслы ла, моңһоу ҙа.

Башҡортостан был Еңеүгә ҙур өлөш индерҙе. Уның 277 һалдатына Советтар Союзы Геройы тигән исем бирелде.

Өфөлә Еңеү паркында ғорур һәйкәл тора. Бейек гранит баҙана башында алтын йондоҙ яна. Аҫтараҡ – ике батыр яугирҙың бюсы. Шунда уҡ уларҙың батырлығын күрһәткән һын – автомат тотҡан һалдат дошман утын үҙ кәүҙәһе менән ҡаплаған. Был – Советтар Союзы Геройҙары рядовой Александр Матросов һәм лейтенант Миңлеғәли Ғөбәйҙуллинға һәйкәл. Батырҙар беҙҙең менән. Улар үлемһеҙ.

(Рауил Бикбаевтан)

- Еңеү паркында булғаның бармы? Александр Матросов һәм Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин тураһында нимә беләһең?
- Ни өсөн был байрам ҡыуаныслы ла, моңһоу ҙа?
- Текстан алмаштарҙы тап. Улар ниндәй һүҙ төркөмөн алмаштырған?

2. Тейешле ялғауҙарҙы ҡуйып яҙ.



Дошман баҫып ингәс ил…(нимәне?),
Ҡол итмәк булып беҙ…(кемде?),
Олатам киткән һуғыш…(ҡайҙа?)
Һаҡларға тыуған ер…(нимәне?)
Олатайым батыр булған,
Дошманды ҡыуған ил…(ҡайҙан?),
Фашистарҙы тар-мар итеп,
Ҡайтҡан ул еңеү менән.

(Зөһрә Ҡотлогилдина)

- Һуғыш геройҙарынан кем тураһында һөйләр инең? «Үлемһеҙ полк» маршында ҡатнашҡаның бармы? Ул нимәгә бағышланған?

3. Таблицаны өйрән. Нимә белдең? Һөйлә.

Эйәлек алмаштары					
берлек һан			күплек һан		
1-се зат	2-се зат	3-сө зат	1-се зат	2-се зат	3-сө зат
минең минеке	һинең һинеке	уның уныҡы	беҙҙең беҙҙеке	һеҙҙең һеҙҙеке	уларҙың уларҙыҡы

- Эйәлек алмаштары рус телендә нисек атала? Һүҙлектән ҡара.

4. Эйәлек алмаштарына һорау ҡуй. Улар ниндәй һүҙҙе асыҡлай? Һөйләмдең ҡайһы урынында килә?

Минең олатайым – ветеран. Ул беҙҙең тыныс киләсәк өсөн һуғышҡан. Уның күкрәген бик күп орден, миҙалдар биҙәй.

93. Һабантуй

1. Тексты уҡы.

Йәй башында күңелле байрам – Һабантуй үткәрелә. Был байрамда баҫыу эштәрендә еңеүселәрҙе, хеҙмәт алдынғыларын ҡотлайҙар. Төрлө ярыштар үткәрелә. Берәүҙәр бағанаға үрмәләй, икенселәре бүрәнә өҫтөндә тоҡ менән алыша. Ҡатын-ҡыҙҙар йомортҡа һалынған ҡалаҡ тешләп, йә һыу тулы биҙрәләрен көйәнтәләп уҙыша. Балалар тоҡ кейеп йүгерә, күҙ бәйләп, епкә тағылған бүләктәрҙе киҫә, йүгереп, йә һикереп ярыша. Иң ҡыҙығы – ҡурайсылар, бейеүселәр, йырсылар сығышы, милли көрәш, аттарҙа ярышыу бәйгеһе. Элекке йола буйынса, еңеүселәргә бүләк бирелә.

(«Ағиҙел» журналынан)

- Һин был байрамда булғаның бармы?
- Ниндәй уйын төрҙәрендә ҡатнаштың?
- Тиң киҫәктәрҙе билдәлә, уларға һорау бир. Улар ниндәй һүҙ төркөмдәренән килгәндәр?

2. Һөйләмдәрҙән текст төҙөп яҙ. **Ҡасан?** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе тап.

1. Шунан һуң сыйырсыҡтар килеп етә. 2. Яҙын ҡояш көндән-көн йылыта. 3. Тиҙҙән йылы яҡтарҙан ҡоштар ҡайта башлай. 4. Ҡар ирей. 5. Март аҙаҡтарында һабан турғайының йыры яңғырай. 6. Бер аҙҙан улар һайрарға тотона.

(Евгений Кучеров буйынса)

- **Сыйырсыҡтар** һүҙенең хәрефтәренән яңы һүҙҙәр төҙөп яҙ.
- **Йылы, һайрарға** һүҙҙәренең тамырын, ялғауын билдәлә.

94. Дүрт миҙгел

1. Тексты уҡы. План төҙөп, һөйләргә әҙерлән.

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, дүрт егет. Иң өлкәне – Ҡыш, икенсеһе – Яҙ, кесерәге – Йәй, иң бәләкәйе Көҙ исемле булған.

Шулай татыу ғына йәшәп ятҡанда, быларҙың ауылына **һылыу** ҡыҙ булып Мәскәй әбей килгән. Ул үҙенең матурлығы менән **егеттәрҙең** баштарын әйләндергән.

Бер ваҡыт Ҡыш сибәр **ҡыҙҙы** сәй эсергә саҡырған. Унда Яҙ ҙа, Йәй ҙә, Көҙ ҙә булған. Бөтәһе лә һылыу ҡыҙҙы оҡшатҡан.

– Мин арағыҙҙан иң көслөһөнә кейәүгә сығам, – тигән Мәскәй әбей.

Шунан егеттәр араһында көрәш киткән. Ҡыш – **Көҙҙө**, Яҙ – Ҡышты, Йәй – Яҙҙы, Көҙ **Йәйҙе** еңгән. Мәкерле ҡыҙ быларҙан көлә-көлә ҡайтып киткән.

Ә был дүрт егет һаман да көрәшәләр, ти, бер-береһен сиратлап еңәләр, ти.

(Заһир Мәхмүтов)

- Ҡылымдарҙы тап. Заманын, һанын билдәлә.
- Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ. Орфограмманы аңлат.
- Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән икәнен һәм килешен әйт.

2. Шиғырҙы уҡы. Сифаттарҙы артыҡлыҡ дәрәжәлә үҙгәртеп яҙ.

Аҡ пароход,
Ҡара тулҡын,
Ҡыҙыл маяҡ,
Һоро ҡом.

Зәңгәр күктә
Яҡты йондоҙ.
Йәшел ярҙа
Һары ҡыҙ.

(Рәмил Фәйзуллин)

3. Баш киҫәктәрҙе табып, аҫтына һыҙ.

1. Көҙ оҙаҡ килһә, яҙ һуң килер. 2. Кисен һауа йылынып китһә, ямғыр яуыр. 3. Ҡарға ҡарҙа ҡойонһа, көн боҙола. 4. Ҡаҙ һыңар аяғында торһа – һалҡынға.

- **Яҙ, ямғыр** һүҙҙәрен килеш менән үҙгәрт.
- Исемдәрҙе табып, күплек ялғауҙарын ҡушып яҙ.

95. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Һорауҙарға яуап бир.

1. Ҡышҡы каникул ҡайһы айҙа була? 2. Уҡыуҙар ҡасан башлана? 3. Ҡоштар көҙөн ни өсөн йылы яҡҡа осалар? 4. Яҙҙың беренсе айы ниндәй ай? 5. Ҡайһы айҙа еләк бешә? 6. Әсәйҙәр байрамын ҡайһы айҙа билдәләйбеҙ? 7. Бер йылда нисә ай? 8. Йәй айҙарын һанап сыҡ. 9. Ниндәй айҙа йылғала боҙ китә?

2. Ялғауҙар ҡуй.

Ҡыш йыл… (нимәнең?) үҙенсә матур, үҙенсә күңелле бер мәле. Йәш ҡар бөртөктәр… (нимәләре?) күҙ яуын алып емелдә… (нимә эшләй?). Күктә йөҙ… (нимә эшләгән?) ҡояш һаран йылыта. Аҡ юрған бөркәнгән өй… (нимәләр?) тәүге ҡарға кинәнеп, тынып ҡалған. Мөрйәләр… (нимәләрҙән?) яй ғына аҡ төтөн күтәрелә.

(Ярулла Вәлиев буйынса)

- **Мәле, йәш, емелдәй, түбән генә, тәүге, яй ғына** һүҙҙәренә синонимдар тап.
- Тарҡау һөйләмдәрҙән йыйнаҡ һөйләмдәр яһа.

? **3.** Һөйләмдәрҙе дөрөҫләп әйт.

Исем **ни эшләй?** һорауына яуап бирә.

Ҡылым **ниндәй? ҡайһы? ни төҫлө?** һорауҙарына яуап бирә.

Сифат **кем? нимә? кемдәр? нимәләр?** һорауҙарына яуап бирә.

4. Әкиәттән өҙөктө уҡы. Миҙгелдәр тураһында һөйлә.

Йылбүләр ҡабат-ҡабат
Фарман-әмерҙәр биргән.
Ҡышҡа әйткән: ҡырыҫ бул!
Яҙға әйткән: көләс бул!
Йәйгә әйткән: йәмле бул!
Көҙгә әйткән: йомарт бул!
Ул шулай ҡыҙ-улдарын
Ҡулға-ҡул тотондорған,
Һәр миҙгелдең бурысын
Үҙенсә уйлап ҡорған.

(Венер Йәнбәков)

- Исемдәрҙең һанын, килешен билдәлә.
- Ҡылымдарҙың заманын, һанын әйт.
- Сифаттарҙың дәрәжәһен билдәлә.
- Алмаштар бармы? Улар ниндәй затта килгән?

Уҡыу өсөн текстар

Ололар аманаты

Ололар: Тырышып уҡыу өсөн,
Белемле булыу өсөн
Бик күп, бик күп асҡыс бар,
Бик күп, бик күп баҫҡыс бар.
Балалар: Ул ниндәй асҡыс?
Ул ниндәй баҫҡыс?
Ололар: Уҡыу йорттары – баҫҡыс.
Китап – белемгә асҡыс.
Балалар: Ул асҡысты кем бирә?
Ололар: Тыуған илебеҙ бирә.

(Ынйыҡай Исламғолова)

Әйтеш

– Аптыратайыммы?
– Аптырат.
– Аптырат ҡайҙа?
– Кеҫәлә.
– Кеҫә ҡайҙа?
– Күлдәктә.
– Күлдәк ҡайҙа?
– Шкафта.
– Шкаф ҡайҙа?
– Бүлмәлә.
– Бүлмә ҡайҙа?
– Өйҙә...

Хужа Насретдин мәҙәктәренән

Хужа Насретдин кейемдәр буяй торған оҫтахана асҡан икән. Бер көндө уға бер кеше йөн туҡыма килтергән.

– Хужа, буяп бирһәңсе? – тигән.
– Ниндәй төҫкә?
– Донъяла булмаған бер төҫкә.

– Нисек инде ул донъяла булмаған төçкә?

– Ул ҡыҙыл да булмаһын, ҡара ла, күк тә, зәңгәр ҙә, һары ла, аҡ та. Аңлашылдымы?

– Аңлашылды. Һин һорағанса буярмын.

– Әйберҙе алырға ниндәй көндө килергә һуң?

– Һин шундай көндө кил, ул көн дүшәмбе лә, шишәмбе лә, шаршамбы ла, кесаҙна ла, йома ла, шәмбе лә, йәкшәмбе лә булмаһын, – тигән Хужа.

Волейбол

Волейболдың мәғәнәһе
«Осоусы туп» була икән.
Шуға тупты сетка аша
Осоралар ғына күктән.
Ҡаршы яҡтан килгән тупты
Әгәр төшөрһәң ергә,
Кире һуғып өлгөрмәһәң,
Командаң бит еңелә.
Ағайҙарҙың уйнағанын
Ҡарап өйрәндек беҙ ҙә,
Волейбол майҙансығына
Килегеҙ, әйҙә, һеҙ ҙә.

(Зөһрә Ҡотлогилдина)

Ҡурсағымды йоҡлатам

Ҡояш батты, кис етте,
Сәскәләр йоҡлап китте.
Йоҡла һин дә, ҡурсағым,
Матурым, уйынсағым.

Йоҡлай урман, туғайҙар,
Күгәрсендәр, турғайҙар.
Йоҡла һин дә, ҡурсағым,
Шаяным, уйынсағым.

(Гөлфиә Юнысова)

Ысын дуҫ ниндәй була?

– Ысын дуҫтар юҡ ул, әсәй, – ти улым. – Хатта һин маҡтаған Хәниф тә «ысын» түгел, теге көндө сумканан өй асҡысын алып, мине ҡалай йөҙәтте, юғалтһа, өйгә нисек керер инем? Венер ҙа «ысын» була алмай, сөнки минең компьютерҙың ватылғанын белгәс, беҙгә барған еренән боролоп, Вадимға эйәрҙе лә китте. Дуҫтар шулай булмай бит. Яппаров кеүек маҡтанған, Ғәфүр кеүек һуғышырға яратҡан малайҙар менән дә дуҫ булып булмай.

– Әсәй, теләһәм, мин бөтәһе менән дә дуҫ була алам, – ти икенсе улым.

– Нисек?

– Һин миңә бер ҡап «Стиморол»ға аҡса бирәһеңме? Тәнәфестә малайҙарға өләшәм... Шунан барыһы ла минең дуҫ була.

(Динә Фәтихованан)

Матур һәм көслө

Бер кем дә юҡтыр
Әсәйем ише:
Ул донъялағы
Иң **матур** кеше.

Бер кем дә юҡтыр
Атайым төҫлө –
Ул бик тә **батыр**,
Ул бик тә **көслө**!

(Фәүзиә Рәхимғолова)

Яуаптар

14-се бит. Берҙәмлектә – көс.

16-сы бит. Класташ, йыйылыш.

17-се бит. Элеккегөн, кисә, бөгөн, иртәгә, иртәнән һуң.

19-сы бит. Үлсәм, линейка, таҡта, миҫал.

27-се бит. Думбыра, баян, пианино, ҡумыҙ, ҡурай, скрипка, флейта, фагост.

30-сы бит. Бит, май, алма.

49-сы бит. Әсәй, йөрәк, кәзә, әтәс, сәскә, әйт, тәмле, еләк, кәмә, әрем, мәк, кәнфит.

57-се бит. 1) **Ҙ** хәрефенә; 2) **т** хәрефе.

62-се бит. Һөнәрһеҙ ир – ҡанатһыҙ ҡош.

70-се бит. Уҡығандың теле икәү.

71-се бит. 1) матур; 2) кәкүк; 3) күбәләк; 4) уйын; 5) ултырғыс; 6) сәүкә.

75-се бит. Ҡуян.

79-сы бит. Башҡортостан.

87-се бит. Бесәй, һыйыр, ҡолон, быҙау, бәрәс, көсөк.

89-сы бит. Дуҫһыҙ кеше – ҡанатһыҙ ҡош.

99-сы бит. Н хәрефе.

109-сы бит. Бүре, жираф, тейен, фил, дөйә, айыу, төлкө, ат.

117-се бит. Һағыҙаҡ, ҡырмыҫҡа, ҡамҡа.

Һүҙлек

1-се дәрес

таныш булығыҙ – будьте знакомы
Нисә кеше ҡатнаша? – Сколько человек участвует?
уйланыу – думать, задуматься

2-се дәрес

һөйләү телмәре – устная речь
төр(-ҙәр) – вид(-ы)

3-сө дәрес

хәбәрсе – журналист
яҙма телмәр – письменная речь
инша – сочинение
хикәйә – рассказ
мәҡәлә – статья
зинһар – пожалуйста
иртәгәгә тиклем – до завтра
һүҙбәйләнеш – словосочетание

4-се дәрес

ҡушып ҡара – попробуй прибавить
булмаҫ – не может быть
күҙ алдымда – перед глазами
уҡыған йылдарым – годы учёбы
сүгәләп – сидя на корточках
эске телмәр – внутренняя речь
хыялланыу – мечтать
тынғанбыҙ – замолкли

5-се дәрес

эстә – внутри
олпатыраҡ күрһәтте – казались солиднее
тәрән хистәр – глубокие чувства

6-сы дәрес

мәғлүмәт – информация
Бөрө – Бирск
Мәләүез – Мелеуз
Силәбе – Челябинск
Ырымбур – Оренбург
яҙылышы – написание
аралаша – общается
иғтибар иттең – обратил внимание

7-се дәрес

Белем байрамы – День знаний
тулған – заполнился
һуҡыр – слепой
тантаналы – торжественный
тигеҙ сафтар – ровные ряды

Хәтерҙә ҡалдыр!

тексҡа исем бир – озаглавь текст
иҫбатла – докажи
аяҡ баҫҡан – ступил ногой

8-се дәрес

утанылар – пололи
үҫентеләр – ростки
тәрбиәләнеләр – ухаживали
ҡый үләндәре – сорняки
орлоҡ – семя

тигеҙләп сыҡты – выровнял
сәстеләр – посеяли

Хәтерҙә ҡалдыр!

төп фекер – основная мысль
өлөш – часть
башы – начало
аҙағы – конец
ҡыҙыл юл – красная строка

9-сы дәрес

теҙелгән – выстроились
тынғы – покой
ялҡаулана – ленится
тәнҡитләне – критиковал
түҙемлек – терпение
үҙ-ара – между собой
тамамланған – завершённый

10-сы дәрес

уҡытыусылар кабинеты – учительская
бигерәк тә – особенно
фән – наука, предмет

11-се дәрес

мәғәнә – значение
һөйләм киҫәктәре – члены предложения
һөйләмдең баш киҫәктәре – главные члены предложения

Хәтерҙә ҡалдыр!

фарсы теле – персидский язык
дини – религиозный
намаҙға йыйылыу – сбор на молитву
һөйләмдең нигеҙе – основа предложения
кесе йома – четверг

12-се дәрес

эйәрсән киҫәктәр – второстепенные члены
мәҙрәсә – школа при мечети
ялан тәпәй – босиком
этлек ҡылмай – не делает плохого

13-сө дәрес

дәрес ваҡытында – во время урока
йыйнаҡ (һөйләм) – нераспространённое (предложение)
тарҡау (һөйләм) – распространённое (предложение)
аҫтына һыҙ – подчеркни

14-се дәрес

хәйләкәр – хитрый
ҡушам – прибавляю
алам – отнимаю, вычитаю
бүләм – делю
холоҡ – зд.: поведение
һыҙам – черчу
үлсәйем – измеряю

Хәтерҙә ҡалдыр!

алдап ҡасалар – сбегают, обманув
ете һигеҙең – семью восемь

15-се дәрес

яттан – наизусть
эстәлек – содержание

кәмит – смешное, комедия
нытҡыш – настырный
маҡсат – цель

16-сы дәрес

оҙонлоҡҡа һикереү – прыгать в длину
бейеклеккә – в высоту
аңлатмалы һүҙлек – толковый словарь

17-се дәрес

ҡатырға – картон
киҫәбеҙ – режем
остары – кончики
күсмә – переносное
мулине ебе – нитки для вышивания

Хәтерҙә ҡалдыр!

сөй – зд.: гвоздь
һырлайбыҙ – украшаем резьбой
елпенеп – взмахивая

18-се дәрес

һунарсы – охотник
әйтелеш – произношение
күптән көткән – долгожданный
талпына – машет крыльями
толпарға атлана – садится на коня
ат кешнәүе – ржание коня

19-сы дәрес

думбыра – домбра
ҡумыҙ – кубыз
дейеү – див
силәк – ведро

Хәтерҙә ҡалдыр!

аңҡы-тиңке – сам не свой
йәнләнә – оживает

20-се дәрес

бер ҡат – один раз
төшөнөп булмай – не могу понять
сисеп ҡараным – пробовал решить
яуап сыҡмай – ответ не выходит
ҡабат – заново

Хәтерҙә ҡалдыр!

яйлап ҡына – не торопясь
тотондом – взялся
маташтым – пытался
ҡолаҡ ҡыҙармаҫ – не будет стыдно

21-се дәрес

Көньяҡ Урал – Южный Урал
һанала – считается
араһында – среди
сыуаштар – чуваши
йөҙ – зд.: лицо
табып ҡара – попробуй найди
ҡабып ҡара – попробуй на вкус
алма – зд.: не бери

Хәтерҙә ҡалдыр!

тау итәге – склон горы
тәшкил итә – составляет
халыҡ һаны – численность населения

вәкилдәр – представители

22-се дәрес

тәбиғәт – природа
уҫаҡ – осина
баҡыр – медь
тимер – железо
балан – калина
ҡуҙғалаҡ – щавель
тамырҙаш һүҙҙәр – однокоренные слова

Хәтерҙә ҡалдыр!

ҡаҙылма байлыҡтар – полезные ископаемые
ғорурланам – горжусь
ялғауҙар ҡушып – добавляя окончания

23-сө дәрес

суйын – чугун
яһалма һүҙҙәр – производные слова

24-се дәрес

рөхсәт – разрешение
ижек яһай – образует слог

25-се дәрес

ҡаршы ала – встречает
тарих – история
данлай – прославляет
борон – раньше
дуҫлыҡ хөрмәтенә – в честь дружбы
нигеҙ – основание
берләшеү – объединение

Хәтерҙә ҡалдыр!

ҡоластарын йәйеп – раскинув руки
ғүмер кисергән – жизнь прожил
лавр тажы – лавровый венец

26-сы дәрес

ҡунаҡсыл – гостеприимный
юлсы – путник
шағир – поэт
Бөйөк Ватан һуғышы – Великая Отечественная война
һоҡлана – восхищается
ҡыҙыҡһына – интересуется
һыбайлы – всадник
әүерелде – превратился

Хәтерҙә ҡалдыр!

арнап – посвятив
һын – скульптура
юлда ҡалдырылмай – не оставляется в конце строки
мәңгеләштереү – увековечить

27-се дәрес

тыуған яҡты өйрәнеү музейы – краеведческий музей
үткән – прошлый
табылған – нашлись
ҡабырсаҡтар – ракушки
файҙалы – полезные
сәнғәт музейы – музей искусства
һуғыш ҡоралдары – орудия войны

28-се дәрес

хөрмәт итә – уважает
Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры – Башкирский академический театр драмы имени Мажита Гафури
йүнсел – предприимчивый, деловой

29-сы дәрес

оҙата башлаһаң – начнёшь провожать
башым әйләнә – голова кружится
үҙләштерелгән һүҙҙәр – заимствованные слова
төп башҡорт һүҙҙәре – исконно башкирские слова
ауылса – по-деревенски
һүҙемде тыңла – послушай меня
буйһона – подчиняется
хәлгә осрауы – попасть в … ситуацию

30-сы дәрес

Хәрәкәттә – бәрәкәт. – В движении – сила.
ыңғай тәьҫир итә – положительно влияет
һау (сәләмәт) булырһығыҙ – будете здоровы

31-се дәрес

сәйәхәт – путешествие
ҡармаҡ – удочка
ғалим – учёный
һыу инеү костюмы – купальник

32-се дәрес

тарихи урындар – исторические места
Ҡыҙыл майҙан – Красная площадь
уҡтар – стрелки
семәрләнгән – вырезаны узорами
нигеҙ һалған – основал

33-сө дәрес

сит ил – заграница
тауға менәм – поднимусь на гору
бесән сабам – кошу сено
ҡорот – корот (кисломолочный продукт)
боролош – поворот

34-се дәрес

беләк – локоть
беләҙек – браслет
белгес – специалист
ҡырын – криво, косо

35-се дәрес

хөрмәтләй(-ҙәр) – уважает(-ют)
тупһа – порог
Ни сәсһәң, шуны урырһың. – Что посеешь, то и пожнёшь.
хурлама – не срами
тәҙрә пәрҙәләре – оконные шторы

ырыҫ – счастье
түллек – плодородие
муллыҡ – богатство

36-сы дәрес

ҡайнар – горячий
сәстәрен һыйпай – гладит волосы
сирле – больной
иҙрәп ултыра – сидит расслабившись

37-се дәрес

ентекләп – подробно
ат – зд.: имя
зат – род
яман – плохой
хайран – изумлённо
ынйы – жемчуг

Хәтерҙә ҡалдыр!

олоно оло ит – уважай старших
кесене кесе ит – уважай младших

38-се дәрес

шәжәрә – родословная
ырыу – род
ҡәрҙәштәр – родственники
ырыуҙаштар – родичи
нәҫел-нәсәп – родня, родственники

39-сы дәрес

хөрмәтле – уважительный
Мөхәммәт өммәте – род Мухаммеда

40-сы дәрес

мөләйем – миловидный
суҡыш – клюв
таҡылдата – стучит
эләкмәй – не попадает
ялап – облизал
ҡеүәт – сила
һаран – жадный, скупой

Хәтерҙә ҡалдыр!

һылап – замазал
бәрәкәт – благополучие, богатство
әҙәп ҡағиҙәләре – правила этикета

41-се дәрес

йәлләү – жалеть
кәңәш ҡорҙоҡ – посоветовались
билен яҙмай – не разгибая спины
олуғ – большой
мал ҡарашырға – ухаживать за домашними животными

42-се дәрес

сүп – сорняк
балсыҡ – глина
күҙ эйәрмәй – глаза не успевают следить
мең йәшәһен – пусть живёт тысячу лет

43-сө дәрес

борсоно – беспокоило

тынғы – покой
елеү – прокатиться
ҡыҙыҡһындырҙы – заинтересовал
тәржемәсе – переводчик
үҫкәс – когда вырасту
ҡаза – беда
остаз – наставник

44-се дәрес

тәүге аҙым – первый шаг
бурһыҡ – барсук
баш ҡата – голова идёт кругом

45-се дәрес

алсаҡ – приветливая
ҡушҡан эшен – поручения
кәрәкле – нужный
ғилем йылъяҙмаһы – летопись знаний
китаптар тупланмаһы – хранилище книг

46-сы дәрес

ҡырҡыу – резать
ҡағыҙ – бумага

47-се дәрес

бәүелсәк – качели
танылған – известный

48-се дәрес

шуҡ – шустрый
ваҡиға – событие
мәрәкә – забавный
һуңынан – потом

49-сы дәрес

һөрәләр – пашут
тырматалар – боронуют
ашлыҡ – зерно
келәт – склад
халыҡтар сығышы – происхождение народов
дәлилләү – подтверждать

50-се дәрес

һый – угощение
йүгән – узда, уздечка
бер ҡарышҡа – на один вершок

51-се дәрес

дуҫтарымды саҡырам – зову друзей
өй йыйыштырам – убираюсь дома
өҫтәл әҙерләргә – накрыть на стол
бейеү көйҙәре – плясовая музыка

52-се дәрес

тыйнаҡ бул – будь скромным
сиратлаша – чередуется
ашамлыҡ – еда, пища
ауыҙ йомоп – закрыв рот
һонолма – не тянись

53-сө дәрес

ҡайнатма – варенье
яланым – облизал
шапылдатып – чавкая

һуңлап килдем – пришел с опозданием

54-се дәрес

йән дуҫы – близкий друг
иҫәпләп ултыра – считает

55-се дәрес

ысын йөрәктән – от всего сердца
үҙенсәлекле өндәр – особые звуки
өн белдермәй – не обозначает звука

56-сы дәрес

ҡушылды – присоединился
һуҡыр – слепой
кемде тота – кого поймает
һәпәләк – жмурки
кире борола – возвращается назад

57-се дәрес

сәләмдәр ебәреп – посылая приветы
ҡыуанды – обрадовался (-лась)
еңгә – сноха
һүҙ төркөмө – часть речи
исем – имя существительное
тырнаҡтар эсендә – в кавычках

58-се дәрес

арыһаҡ – если устанем
арымай – не устаёт
ырғытһаң – если бросишь
яңғыҙлыҡ исемдәр – имена собственные
уртаҡлыҡ исемдәр – нарицательные имена
йылғыр – шустрый

59-сы дәрес

тороп китеүе ҡыйын – тяжело оторваться
иҫәплә – считай
һүрәт төшөр – нарисуй
аңлап бөтөр өсөн – чтобы понять

60-сы дәрес

көтмәгәндә – неожиданно
юғалтты – потерял
аҙашып – заблудившись
яңғыраны – прозвучал
утын – дрова
эт өргән яҡҡа – на лай собаки
борҙо – повернул
бәлә – беда

Хәтерҙә ҡалдыр!

эйәрҙе – последовал
апайыңдыҡы кеүек – как у сестры

61-се дәрес

маңлайында – на лбу
тамға – метка
үткер – острый
болғай – виляет
һунар – охота
һырт – спина
көмрәйтә – сгибает
мыйыҡ – усы

Хәтерҙә ҡалдыр!

тырпайып – торчком
йылҡылдай – блестит
ҡоростай – как сталь

62-се дәрес

ағас башына менеп киткән – залез на дерево
юл уртаһында – посреди дороги
еҫкәгән – понюхал
ҡуш тартынҡы – парная согласная
үлгәнгә һалышҡан – притворился мёртвым

63-сө дәрес

тотоноу – браться
ҡалманы – не осталось
мейес емерелһә – если развалится печь
кейем туҙһа – если износится одежда
кәсеп – профессия
ҡәҙер – почёт, ценность
кесе эргәһендә – около маленьких

64-се дәрес

осорға китә – улетает
һөйөклө – дорогой(-ая)
ҡотлайым, тәбрик итәм – поздравляю
ғүмер – жизнь
уң – удачный

Хәтерҙә ҡалдыр!

йөҙөң көләс – улыбчивое лицо
күңелең көр – настроение бодрое
ҡыуаныс-һөйөнөс – радость

65-се дәрес

саҡырыу ҡағыҙы – пригласительный билет
көндәлеген асып – открыв дневник
сикһеҙ шатланды – радовался(-лась) безгранично

66-сы дәрес

һиҙеп ҡала – почувствовал(-а)
юрамал – нарочно
серек – гнилой

Хәтерҙә ҡалдыр!

аламалыҡҡа – плохому
минең арҡала – из-за меня
заманса бәйләнеш саралары – современные средства коммуникации

67-се дәрес

ҡая – скала
аҡлан – поляна
шишмә – родник
данлы – славный
аҫыл таш – драгоценный камень
томбойоҡ – кувшинка
ҡарсыға – ястреб

Хәтерҙә ҡалдыр!

наҙлы – нежный
һулымаҫ – не завянет

68-се дәрес

көнбайыш – запад
түбә – вершина
йылтыр – блестящий
шеш – торчащий

Хәтерҙә ҡалдыр!

һырт – хребет
мөңрәгән – мычащий
сыңғыр-сыңғыр йылҡы сыңрауы – нежное ржание лошадей

69-сы дәрес

килеп ҡушыла – впадает
һаҡланған – сохранился
сығанаҡ килеш – творительный падеж

70-се дәрес

иркәләнә – ласкается
ҡамыш – камыш
туғай – луг

71-се дәрес

шифалы – лечебный
туйындыра – кормит
янғындан – от пожара
һаҡларға – защищать
ҡоротҡостар – вредители
юҡ тиңең – нет равных

72-се дәрес

бәпкә үләне – лапчатка гусиная
кесерткән – крапива
алабута – лебеда
билсән – осот
гөлйемеш, әлморон – шиповник

73-сө дәрес

һары мәтрүшкә – зверобой
юл япрағы – подорожник
меңьяпраҡ – тысячелистник
әрем – полынь
төҙ – прямой
ашҡаҙан – желудок
төнәтмә – настой

74-се дәрес

һыуыҡ тейгәндә – при простуде
боҙолғанда – когда воспаляется
сайҡаталар – полощут
яра – зд.: рана
андыҙ – девясил

Хәтерҙә ҡалдыр!

туйғансы – досыта
бөйөр – почка (орган)
тамаҡ шешкәндә – при воспалении горла
уңалта – заживляет

75-се дәрес

ҡоралай – косуля
һаҡ – осторожный
эйәләшәләр – приручаются
таптар – пятна
тынғылыҡ – покой

Хәтерҙә ҡалдыр!

борола – поворачивается
ҡыбырлай – шевелится

76-сы дәрес

айыралар – различают
ҡолон, тай – жеребёнок (до года и до двух лет)
айғыр, дүнән, ҡонан – жеребец
бейә – кобыла

Хәтерҙә ҡалдыр!

аҡбуҙ – сизый, серый
буҙ – светло-серый
ерән – рыжий
күк ат – сивка

77-се дәрес

шифахана – санаторий
борон-борондан – с давних времён
нервыны нығыта – укрепляет нервы

78-се дәрес

һарығош – иволга
өсмөйөш булып – клином
алмашҡа – взамен
дөйәғош – страус
күсмә ҡоштар – перелётные птицы

79-сы дәрес

ҡармаҡ – удочка
байтаҡ – много
юғарыраҡ – повыше
ҡапманы – не клюнул
алабуға – окунь
ҡорман – лещ
йәйен – сом
суртан – щука
табан балыҡ – карась
сиртте – клюнул

80-се дәрес

ҡырмыҫҡа – муравей
һағыҙаҡ – оса
ҡырмыҫҡа иләүе – муравейник
ҡамҡа – божья коровка
зарарлы – вредные

Хәтерҙә ҡалдыр!

матдә – вещество
тиңләргә – сравнивать

81-се дәрес

шаулай – шумит
өйрәнделәр – научились
серемәй – не гниёт
тирбәлә – качается
мөһабәт – величавый
моң тыуҙыра – рождает мелодию

82-се дәрес

шиңә – вянет
гөлгә күмелә – покрывается цветами

83-сө дәрес

ау – сеть
һунар итеү – охотиться
ағас ултыртыу – посадка дерева
мотлаҡ – обязательно
изге – священный

ҡара миләш – черноплодная рябина
ут яғыу – разводить костёр
соҡор – яма
ут, усаҡ – костёр
һүндерәләр – тушат

Хәтерҙә ҡалдыр!

күмәләр – закапывают
көл – зола
шырпы – спички
тыйыла – запрещается
саралар – мероприятия

84-се дәрес

ҡыҫҡара – сокращается, укорачивается
өлгөрә – поспевает

Хәтерҙә ҡалдыр!

мул – щедро
йәнең ни теләй – что желает душа
суҡ муйыл – гроздь черёмухи

85-се дәрес

эҙ – след
һулыш – дыхание
ҡуйыра – густеет
ҡаҡса – худой
шыр ҡалды – стал голым
әйтеп бөтөргөһөҙ – несказанно
күбеһенә – многим

86-сы дәрес

мунсаҡ, мәрйен – бусы
оҙая – удлиняется
ҡала – зд.: остаётся
алмаштыра – меняет
ҡышлаусы – зимующие
уңыш йыйыу – сбор урожая

87-се дәрес

үҙгәртеү – изменить
сөм ҡара – очень чёрный
талғын – медленно

88-се дәрес

ҡоро – сухой, сухо
сыуаҡ – солнечный
күк күкрәй – гром гремит
таш ауа – падает камень
ер тетрәй – земля дрожит

89-сы дәрес

аунай – валяется
күҙләй – наблюдает
аптырап – с удивлением

90-сы дәрес

сыр-сыу килә – суетится
сыға – появляется
ҡалҡыу урындар – возвышенности
кибә – сохнет
хәтерләтә – напоминает
сыйырсыҡ ояһы – скворечник

Хәтерҙә ҡалдыр!

быу – пар
ҡеүәтле – мощный

91-се дәрес

Кәкүк сәйе – Кукушкин чай

Ҡарға бутҡаһы – Воронья каша
Һабантуй – Сабантуй

92-се дәрес

ҡыуаныслы – радостный
моңһоу – печальный
батырлыҡ күрһәткән – проявил мужество
һуғыш – война
ҡол – раб

Хәтерҙә ҡалдыр!

тар-мар итеп – уничтожив
үҙ кәүҙәһе менән – своим телом
үлемһеҙ – бессмертный
ғорур – гордый
яугир – воин

93-сө дәрес

үрмәләй – лазает
бүрәнә – бревно
тоҡ – мешок
уҙыша – обгоняет
алыша – борется
бәйге – соревнование
йола – обычай
һабан турғайы – жаворонок

Хәтерҙә ҡалдыр!

хеҙмәт алдынғылары – передовики труда
баҙана – столб
көйәнтә – коромысло
күҙ бәйләп – завязав глаза
милли көрәш – национальная борьба

94-се дәрес

һылыу ҡыҙ – красивая девушка
сиратлап – по очереди
кейәүгә сығам – выйду замуж
һыңар аяғында торһа – если стоит на одной ноге
Мәскәй әбей – Баба Яга
баштарын әйләндергән – заморочил(-а) голову

95-се дәрес

йылбүләр – распределитель времён года
ҡырыҫ – суровый
фарман-әмер – приказ
көләс – ласковый

Йөкмәткеһе

I бүлек. Танышыу

1-се дәрес. Таныш булығыҙ! 3
2-се дәрес. Хәлдәр нисек? 4
3-сө дәрес. Рәхим итегеҙ! 5
4-се дәрес. Һиңә нисә йәш? 6
5-се дәрес. Ҡайҙа йәшәйһең? 8
6-сы дәрес. Һин ҡайҙан? 9

II бүлек. Минең мәктәбем

7-се дәрес. Белем байрамы 10
8-се дәрес. Мин дежур 12
9-сы дәрес. Беҙҙең класс 13
10-сы дәрес. Мәктәбем 15
11-се дәрес. Аҙнала нисә көн? 16
12-се дәрес. Мәктәп хәтирәләре 17
13-сө дәрес. Башҡорт теле дәресендә 18
14-се дәрес. Хәйләкәр һандар 20
15-се дәрес. Китап – беҙҙең дуҫ 21
16-сы дәрес. Кем физкультура ярата? 22
17-се дәрес. Ҡайсы йырлай 23
18-се дәрес. Рәсем төшөрәбеҙ 25
19-сы дәрес. Музыка донъяһында 26
20-се дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 28

III бүлек. Минең республикам

21-се дәрес. Башҡортостаным – илем 29
22-се дәрес. Башҡортостан – бай яҡ 31
23-сө дәрес. Гүзәл баш ҡалам 32
24-се дәрес. Өфөлә экскурсияла 33

25-се дәрес. Дуҫлыҡ монументы 35
26-сы дәрес. Салауат Юлаев һәйкәле 36
27-се дәрес. Тыуған яҡты өйрәнеү музейы 37
28-се дәрес. Өфөлә транспорт төрҙәре 39
29-сы дәрес. Өфө урамдары буйлап 40
30-сы дәрес. Йәйәү йөрөү файҙалымы? 42
31-се дәрес. Сәйәхәт ниндәй була? 43
32-се дәрес. Мәскәү – Рәсәйҙең баш ҡалаһы 44
33-сө дәрес. Диңгеҙҙә ял итеү хыялы 46
34-се дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 47

IV бүлек. Мин һәм минең ғаиләм

35-се дәрес. Олатайым кәңәштәре 48
36-сы дәрес. Өләсәйем кәңәштәре 50
37-се дәрес. Олоно оло ит, кесене кесе ит 51
38-се дәрес. Минең шәжәрәм 53
39-сы дәрес. Ғаилә байрамы 54
40-сы дәрес. Ҡунаҡтар килде 56
41-се дәрес. Әсәйемә ярҙам итәм 58
42-се дәрес. Атайыма ярҙам итәм 59
43-сө дәрес. Минең хыялым 61
44-се дәрес. Йөҙ юл 63
45-се дәрес. Ниндәй китап оҡшай? 64
46-сы дәрес. Минең шөғөлөм 66
47-се дәрес. Спорт һәм мин 67
48-се дәрес. Ялым күңелле үтә 68
49-сы дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 70

V бүлек. Мин һәм минең дуҫтарым

50-се дәрес. Тыуған көн 71
51-се дәрес. Байрамға әҙерлек 73

52-се дәрес. Үҙеңде нисек тоторға? 74
53-сө дәрес. Әҙәп ҡағиҙәләре 75
54-се дәрес. Дуҫтарым менән күңелле 77
55-се дәрес. Ҡәҙерле бүләк 78
56-сы дәрес. Минең дуҫтарым 79
57-се дәрес. Сәләм Өфөнән! 81
58-се дәрес. Яратҡан уйынсығым 83
59-сы дәрес. Дуҫым компьютер 84
60-сы дәрес. Дуҫым Аҡбай 85
61-се дәрес. Дуҫым Аҡйондоҙ 86
62-се дәрес. Ысын дуҫ ниндәй була? 88
63-сө дәрес. Атайҙар байрамы 89
64-се дәрес. Әсәйҙәр байрамы 91
65-се дәрес. Саҡырыу ҡағыҙы 93
66-сы дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 94

VI бүлек. Мине уратып алған донъя

67-се дәрес. Нимә ул тәбиғәт? 96
68-се дәрес. Тауҙар илендә 98
69-сы дәрес. Төйәгемдә йылғалар күп 99
70-се дәрес. Тұңәрәк күл туғайҙа 101
71-се дәрес. Йәшел алтын 103
72-се дәрес. Йәйге йәмле болонда 104
73-сө дәрес. Дарыу үләндәре 105
74-се дәрес. Йәшел аптека 107
75-се дәрес. Ҡыр хайуандары 108
76-сы дәрес. Ат – кешенең дуҫы 110
77-се дәрес. Ҡымыҙ – файҙалы эсемлек 111
78-се дәрес. Ҡанатлы дуҫтар 113
79-сы дәрес. Ҡап, балығым, ҡармаҡҡа! 114
80-се дәрес. Бөжәктәр файҙалымы? 116
81-се дәрес. Ағастар – урман йәме 117

82-се дәрес. Сәскәләр нур сәсәләр 118
83-сө дәрес. Тәбиғәтте һаҡлайыҡ! 120
84-се дәрес. Йәйге хәтирәләр 122
85-се дәрес. Атлай тышта көҙ 123
86-сы дәрес. Көҙгө байлыҡ 125
87-се дәрес. Беҙҙең яҡта ҡыш 126
88-се дәрес. Көн ниндәй? 128
89-сы дәрес. Ҡышҡы уйындар 129
90-сы дәрес. Бына яҙ ҙа етә 130
91-се дәрес. Яҙғы байрамдар 132
92-се дәрес. Еңеү байрамы 133
93-сө дәрес. Һабантуй 135
94-се дәрес. Дүрт миҙгел 136
95-се дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? . . . 137
Уҡыу өсөн текстар 139
Яуаптар 142
Һүҙлек 143

Учебное издание

Нафикова Закия Галиахметовна
Муртазина Фаузия Фагимовна

БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

Учебное пособие для 3 класса
для изучения родного (башкирского) языка и литературы
в общеобразовательных организациях
с русским языком обучения

(*на башкирском языке*)

Уҡыу баҫмаһы

Нафиҡова Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы
Мортазина Фәүзиә Фәһим ҡыҙы

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Уҡытыу рус телендә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмаларының
3-сө класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм
әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *З. М. Ғәлишина*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Г. Ә. Таһирова,*
З. М. Камалова, Л. Ф. Саниева

Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.10.2017. Форматы 70×90 $^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 11,70. Шартлы буяу отт. 47,97. Иҫәп-нәшер таб. 4,73. Тиражы 5310 дана. Заказ 1.0195.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.